ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

18-24 апрель (алағарай)
2020
№ 16 (902)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

*"Йыланды күҙ алдына килтерәйек. Уның ҡойроғо башына былай ти: "Мин баш яҡта булырға тейешмен". Баш ҡойроҡҡа былай тип яуап бирә: "Һәр ваҡытта ла мин ал яҡта йөрөйөм. Ниңә хәҙер һинеңсә булырға тейеш әле?" Бәхәс һөҙөмтәһендә баш еңә һәм алға сыға. Ләкин шул ваҡыт ҡойроҡ ағасҡа уралып тора һәм баш алға китә алмай, тотҡарланып ҡала. Аптырағас, баш ҡойроҡто алға ебәрә. Шул саҡ йылан ут янып торған соҡорға төшөп китә һәм һәләк була... Уҡыусылар һәм остаздар менән дә йыш ҡына шулай була.*

*(Риүәйәттән).*

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Һин көрәштең ҡайһы яғында?**



3

**Мәктәпте һағыналар...**



5-6

**Никахтары күктә яралған...**



8-9

**Яугир ат кәрәк!**



12-13

**ТВ-программа** 14

*МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ*

# АЛҒЫ ҺЫҘЫҠТАБЫҘ!

**Бар донъя миллионлаған вирустарҙың береһенең, "тажлыһының", афәтенән ҡалтыранып йәшәй башлап, илдә, республикала ла үҙизоляция иғлан ителгәс, кешеләр өйҙә ултырырға фарман алды. Тик был өйҙә ултырырға тейештәр исемлегенә мотлаҡ эш урынында ҡалыуы талап ителгәндәр - йәшәйеште тәьмин иткән структуралар, медицина учреждениелары, дарыуханалар, магазиндар, финанс иҫәп-хисабын тәьмин иткән учреждениелар, транспорт, шулай уҡ барлыҡ кимәлдәге власть органдары хеҙмәткәрҙәре индерелмәне, әлбиттә. Шулай уҡ почтальондар, журналистар ҙа эште дауам итте.**

Әйе, беҙ ҙә аҙна һайын гәзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙға ошо хәүеф, уға ҡаршы ойошторолған көрәш һәм һаҡланыу саралары тураһындағы мәғлүмәттәрҙе еткереп торабыҙ. Һәм... Был ғына түгел, баҫмабыҙ йөкмәткеһенә тоғро ҡалып, уйлыларға - уй, аңлыларға - ишара, аңламағандарға - фәһемле һүҙ, тормош һабаҡтары еткереүҙе лә дауам итәбеҙ. Әйе, уҡыусыларыбыҙ "Киске Өфө"нө аҡыл-кәңәш биреүсе, Урал батыр әйткәнсә, "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ, кеше булһын затығыҙ" тип рухландырыусы, сәмләндереүсе, ғәмләндереүсе баҫма булараҡ белә. Беҙҙең был йөкмәткене, уның тәрбиәләүсе ролен инҡар итеп маташыусылар ҙа бар, әлбиттә. Аҡыл өйрәтмәгеҙ, үҙебеҙ беләбеҙ, йәнәһе. Хәйер, аҡ ҡағыҙға яҙылғандарҙы ғына түгел, ә Хоҙай Тәғәлә инселәгән йәшәү рәүешен, әхлаҡи ҡанундарҙы, үҙ-ара күркәм мөнәсәбәттәрҙе, ғаилә ҡиммәттәрен инҡар итеүселәр ишәйеп китте бит тормошобоҙҙа. Бөгөн, оло хәүеф солғанышында ултырғанда, үҙенең быға тиклем ҡылған ҡылыҡтарынан тетрәнәме, һабаҡ аламы икән әҙәмдәр? Гәзитебеҙ аша был һорауҙы ҡабат-ҡабат юллайбыҙ уҡыусыларыбыҙға.

**"Киске Өфө"нөң 13-сө һанында "Хоҙай киҫәтеүелер был" тигән сәләмебеҙҙе ебәрҙек, уҡынығыҙмы икән?** "Ни өсөн шулай килеп сыҡты һуң? Төптәнерәк фекер йөрөтһәң, күп осраҡтарҙа кешеләр үҙҙәре ғәйепле булып сыға. Күп нәмә кешеләрҙең тәбиғәттән өҫтөн булырға тырышыуында, Ер йөҙөндә тик үҙен генә тәбиғәт батшаһылай итеп тойоп, нәфсеһенә баш була алмай, вәхшиҙәрсә, ҡырағайҙарса тотоуындалыр, тим. Һөҙөмтәлә бына нимә килеп сыға: һин донъябыҙҙа шул уҡ вирустар булыуын иҫәптән сығарып, тәбиғәт ҡанундарын боҙаһың икән, уны һис туҡтауһыҙ ағыулайһың, бысратаһың, шәхси тормошонда һәр төрлө аҙғынлыҡтан, боҙоҡлоҡтан баш тартмайһың икән - ошо илаһи Тәбиғәт, йәғни Хаҡ Тәғәлә, һине һис шикһеҙ үҙ язаһына дусар итәсәк. Һин һанға һуҡмаған донъя һинең башыңа етәсәк!"- тип яҙҙы авторыбыҙ Бәҙри Әхмәтов.

**Журналисыбыҙ Миләүшә Ҡаһарманова иһә аңлыларҙың, уйлыларҙың ошо афәт эсендә ултырғанда яһаған һығымтаһын еткерҙе 15-се һандағы мәҡәләһендә:** "Бөгөнгө көсөргәнешле торошта беҙ ҙә үҙгәрҙек. Күп нәмәне аңланыҡ, тойҙоҡ һәм уйҙарҙы, анды тәртипкә һалдыҡ. Кешелек ҡиммәттәре ҡапыл ғына алмашынды. Кисәге ҡыҙыҡ һәм кәрәк булғандар мәғәнәһен юйҙы. Кисәге мөһим нәмәләр баштан сығып осто. Алдағы аҙналарҙа ғына беҙгә ниндәйҙер кәңәшмәләр, ултырыштар, отчеттар, түрәләр, командировкалар, саралар донъя тотҡаһы һымаҡ булһа, бөгөн беҙ уларҙың бөтөнләйе менән әҙәм ғүмере өсөн кәрәкле булмауын белдек. Беҙ бәлә килгәнен тойғанда бер ҙә эшебеҙҙе йәки идеяларыбыҙҙы яҡларға, уларҙы ҡотҡарып ҡалырға ынтылманыҡ. Беҙ иң беренсе сиратта үҙ йәнебеҙ һәм балаларыбыҙ, яҡындарыбыҙ өсөн борсолдоҡ. Шуларҙы һаҡлап-ҡурсып ҡалыуға ташландыҡ. Бына бит ул Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте! Ошо аҙ ғына ваҡыт эсендә донъя халыҡтары аңындағы ысын хистәрҙе уята һәм рухи таҙарыныу кисертә алыуы..."

**(Дауамы 2-се биттә).**



КӨНАУАЗ

# ЯУАПЛЫЛЫҠ АРТА



**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республикала үҙизоляция режимын кәмендә майға тиклем оҙайтты. "Муниципалитет башлыҡтары, һеҙ оҙаҡҡа иҫәп тотоғоҙ, халыҡты ла шуға әҙерләгеҙ. Апрель-май бына ошондай режимда эшләйбеҙ. Башҡортостандың 40-тан ашыу муниципалитетында яңы коронавирус инфекцияһын йоҡторғандар бар. Шуға ла вирустан хәүефләнеү кимәле юғары булырға тейеш. Сир сығанаҡтары Өфөлә генә түгел, 18 осраҡ райондарҙа раҫланған", - тип белдерҙе ул кесаҙна республика Хөкүмәтендәге кәңәшмәлә.**

Радий Фәрит улы һәр етәксегә муниципалитеттарҙы карантинға ябыу буйынса юл картаһы төҙөргә, республиканың Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетына йәмәғәт транспортында, шул иҫәптән таксиҙа санитар-эпидемиологик ҡағиҙәләрҙе үтәүгә йүнәлтелгән саралар әҙерләргә ҡушты. Йәмәғәт транспорты тураһында һөйләгәндә, республика Башлығы Башавтотранс автобустары тураһында ғына түгел, ә барлыҡ ташыусылар хаҡында һүҙ барыуын билдәләне: "Беҙҙең талап: йәмәғәт транспортында битлек һәм бирсәткә кейеп кенә йөрөргә ярай. Бирсәткәләрҙең төрлө булыуы мөмкин, бары инфекция ғына йоҡмаһын. Ошо ике ҡағиҙә үтәлергә тейеш. Автобустарҙы туҡтатып, тикшереү ойошторола. Был норма 20 апрелдән ғәмәлгә индерелә", - тип белдерҙе Башҡортостан Башлығы.

Билдәләнеүенсә, Башҡортостандың аҙ тәьмин ителгән ғаиләһенә, йәғни ай һайын балалар пособиеһы алыусыларға 100 мең аҙыҡ-түлек пакеты тапшырыла. Бындай ғаиләләр - 72 мең, уларҙа 165 меңдән ашыу бала йәшәй. Радий Хәбиров һүҙҙәренсә, әгәр ғаиләлә бер нисә бала тәрбиәләнһә, аҙыҡ-түлек пакеты ла шунса була. Республика Башлығы хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев билдәләүенсә, әҙерләнгән пакеттарҙағы продукцияның 80 проценты Башҡортостанда етештерелгән. Халыҡҡа тәүге пакеттар 23 апрелдә таратыла. 1 майға тиклем бөтәһе лә аҙыҡ-түлек пакеттарын алырға тейеш.

Әйткәндәй, 17 апрелгә ҡарата мәғлүмәттәр буйынса, Башҡортостанда 213 кеше коронавирус инфекцияһы менән сирләй. Уҙған тәүлектә республикала коронавирус йоҡтороуҙың 22 яңы осрағы асыҡланған. 213 сирләнән 14 кеше һауығып сыҡҡан, һигеҙе үлгән.

Стопкоронавирус.рф порталында хәбәр ителеүенсә, Рәсәйҙә бөгөн 32 008 ауырыу иҫәпләнә, уларҙың 2590-ы һауыҡҡан, 273-ө вафат булған. Һуңғы тәүлектә Рәсәйҙә бөтәһе 4070 яңы осраҡ раҫланған, 41 үлем осрағы теркәлгән. Тәүлек эсендә илдә 286 кеше тулыһынса һауыҡҡан. Роспотребнадзорҙың оператив мәғлүмәттәре буйынса, 17 апрелгә Рәсәй төбәктәрендә 129 мең 175 кеше табиптар күҙәтеүендә ҡала. Бөгөнгә Рәсәйҙә яңы коронавирусҡа 1,71 миллион лаборатория тикшереүе үткәрелгән. Башҡортостан лабораторияларында хәҙер 9 мең самаһы өлгө коронавирусҡа тикшереү көтә. Эпидемиологик хәлгә бәйле ҙур йөкләмә арҡаһында сират барлыҡҡа килгән.

МӨХӘРРИР ҺҮҘЕ

# АЛҒЫ ҺЫҘЫҠТАБЫҘ!

(Башы 1-се биттә).

Шулай, коронавирус һөжүмен иҫкәртеү саралары тураһында һөйләй-һөйләй, Хоҙай язаһы тураһында ла иҫкәртә-иҫкәртә баҫмабыҙҙы сығарыуҙы дауам итәбеҙ. Журналистарыбыҙҙан кемдәрҙер ситтән тороп эшләүгә күсһә лә, тормош һәм ваҡиғалар ағышында эштәрен дауам итәләр. Фәүзиә Мөхәмәтшина республикабыҙ буйлап таралған уҡыусыларыбыҙҙан "Әйт, тиһәгеҙ..." рубрикаһындағы иң актуаль һорауҙарға яуаптар йыя, барыһын да аптыратҡан ҡайһы бер сәйәси йә социаль өлкәләге яңылыҡтарҙы "Бынағайыш" рубрикаһында ҡәләм осона эләктерә һала. Вәлиәхмәт Бәҙретдинов иһә аналитик мәҡәләләре менән күтәрә баҫма йөкмәткеһен, бик күп тарихи сығанаҡтарҙы байҡап, ырыуҙар тураһындағы мәғлүмәттәрҙе бер материал итеп туплай, шулай уҡ данлы Башҡорт кавалерия дивизияһы үткән ҡаһарманлыҡ юлы яҙмаларын дауам итә. Миләүшә Ҡаһарманова тормоштағы күп төрлө күренештәрҙе байҡап, "Уйлыға - уй" рубрикаһында уйландырыр, тетрәндерер һығымталар яһай. Зәйтүнә Ниғәмәтйәнова әле коронавирус тирәһендәге ваҡиғалар менән бәйле мәғлүмәттәр еткереү, өйҙә ултырыусыларҙан, балаларын дистанцион уҡытҡан ғаиләләрҙән һорау-яуаптар ойоштороу менән мәшғүл. Сәриә Ғарипова иһә уҡыусыларыбыҙҙан "Зыялылар майҙаны"на, "Әйтер һүҙем бар!" рубрикаһына фәһемле фекерҙәр йыя, уҡыусыларыбыҙ көтөп алған башватҡыстар әҙерләй. Сәрүәр Сурина гәзиттең рухиәтле биттәрен тулыландыра: фольклорсылар, милли кейем буйынса белгестәр менән һөйләшеүҙәр ойоштора, театр сәхнәләрендә барған яңы тамашалар менән таныштыра. Ҡыҫҡаһы, бөгөн дә һәр кем үҙ урынында. Тимәк, гәзит һәм уның хеҙмәткәрҙәре лә "алғы һыҙыҡта".

**Әммә беҙҙе борсоған тағы бер мәсьәлә бар һәм уратып килтереп һөйләр һүҙем шул турала: 2020 йылдың икенсе яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу компанияһын нисек үткәрергә, тип баш ватабыҙ, борсолабыҙ, борсолоуҙарыбыҙҙы һеҙгә, уҡыусыларыбыҙ иғтибарына ла төбәйбеҙ.** Почтальондар үҙ эшен эшләй, әлбиттә, өйҙән-өйгә, фатирҙан-фатирға йөрөп, матбуғат баҫмаларын, ҡарттарға пенсия аҡсаһын тарата. Ләкин был мәлдә улар өсөн дә кешеләр, тимәк, уҡыусылар менән аралашыу сикләнгән. Тимәк, уларҙан да беҙҙең ышанысты аҡлау өсөн эшһөйәрлек, тырышлыҡ талап ителә. Редакцияның гәзитте таратыу буйынса яуаплы хеҙмәткәре Алһыу Кинйәбаева менән бөгөн уларға хаттар адреслаһыҡ. Гәзитте әүҙем таратыусы **почтальондарға** матур бүләктәр вәғәҙәләнек. **Гәзит уҡыусыларыбыҙ** ҙа даими рәүештә беҙҙән бүләккә матур китаптар алып тора, йолабыҙ был юлы ла дауам итәсәк.






- Шулай итеп, уҡыусыларыбыҙ иғтибарына шуны еткерәбеҙ: бөгөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә 694 һум 34 тингә яҙыла алһағыҙ, **20 апрелдән 30 апрелгә тиклем ташламалы хаҡ менән яҙылыу ун көнлөгө иғлан ителә, ул мәлдә иһә яҙылыу хаҡы 628 һум 32 тин, йәғни 66 һумға арзанырaҡ буласаҡ.**

- **Өйҙән сыҡмай, почтальонды өйөгөҙгә ҡабул итмәй генә яҙылыу ысулы ла бар.** Уның өсөн "Почта России" podpiska.pochta.ru сайтына инеп, эҙләү һыҙығында "Киске Офо" тип йә ПР905 индексын йыяһығыҙ, үҙегеҙҙең адресты, исем-фамилияны, яҙылыу осорон яҙып, кәрзингә күсәһегеҙ ҙә, банк картаһы менән онлайн түләйһегеҙ. Был ысул менән гәзиткә яҙылыу, әлбиттә, банк картаһы менән онлайн түләүҙәр башҡара белгәндәргә уңайлы, шуға ла уларға: "Ауыл-ҡалаларҙа йәшәгән атай-әсәйҙәрегеҙгә, туғандарығыҙға яҙылып, бүләк итегеҙ баҫмабыҙҙы", - тип өндәшәбеҙ.

- Шулай уҡ ҡайһы ғына районда, ҡалала йәшәһәгеҙ ҙә, 8-800-1-000-000 номерына шылтыратып, почта хеҙмәткәрен өйгә йә офисҡа саҡырып була (хеҙмәт түләүле).

Әйткәндәй, белеүебеҙсә, күҙәтеүебеҙсә, бөгөн үҙизоляцияла ултырған кешеләр гәзит-журнал, китап уҡый. Бына Баймаҡ районынан бер уҡыусыбыҙ ебәргән хәбәр: "Телевизорҙағы негатив хәбәрҙәрҙән ялҡып, уҡыуға бирелеп киттем. Өйөмдә матбуғат баҫмалары ла, китаптар ҙа байтаҡ. Бына әле "Киске Өфө"нөң элекке һандарын да алып, һәр һүҙенә, һәр хәрефенә тиклем диҡҡәт һалып уҡып ултырам. Ниңәлер быға тиклем төбөнә төшөп аңларға тырышмағанмын икән унда яҙылғандарҙы. Әле һәр мәҡәләнән, һеҙ әйткәнсә, аҡыл тирәм, фекерҙәр тирәм. Иҫән булһам, артабан һеҙҙең кәңәштәр менән йәшәйәсәкмен..." Һәм тағы. Беҙгә еткерелгән хәбәрҙәрҙән кемдәрҙер "Ырғыҙ", Зәйнәб Биишева романдары кеүек башҡорт классикаһын аҡтара, кемдәрҙер рус классикаһын күҙҙән үткәрә икәнен беләбеҙ. Үҙизоляцияла ултырыу беҙ юғала тип саң ҡаҡҡан уҡыу ғәҙәтен дә иҫкә төшөрә икәнен ишетеп, эске бер кинәнеү, ҡыуаныс кисерелә...

Шулай итеп, "тажлы" вирус тыуҙырған афәтте лә үткәреп ебәрербеҙ, иҫән-имен ҡалған әҙәм балаларының асылы уяныр, ҡылыҡтары дөрөҫ юҫыҡ алыр, Хоҙай биргән ҡиммәттәргә ҡәҙерле бүләк итеп ҡарау, һаҡсыл мөнәсәбәт яңырыр, тигән өмөт тыуа әле. Шулай булһын. Һәр хәлдә, бөгөнгө бер бәләкәй генә вирус тыуҙырған хәүефте беҙ Күктән төшөрөлгән һынау, үҙ һаулығын, кешелек сифаттарын һаҡлай, ҡәҙерләй белмәгәндәргә ҡаты киҫәтеү итеп ҡабул итәйек.

**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Рәсәй 1" федераль каналы эфирында Владимир Соловьев программаһында Республика клиник дауаханаһында килеп тыуған хәлде аңлатты. Уның һүҙҙәренсә, был дауахана табиптары һәм пациенттары менән бәйләнешкә ингән 3000 самаһы кеше COVID-19 йоҡтороу буйынса хәүеф зонаһына эләккән. Улар менән ведомство-ара бригадалар эшләй. Шулай уҡ Башҡортостан башлығы пациенттарҙың һәм табиптарҙың Республика клиник дауаханаһында кәмендә 20-21 апрелгә тиклем ҡаласағын әйтте.

✓Республика Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитетының элекке етәксеһе Тимур Мөхәмәтйәнов Башҡортостан Башлығы Радий Хәбировтың ярҙамсыһы итеп тәғәйенләнде. "Уның бурысы - транспорт һәм юл инфраструктураһын, төҙөлөштө, төҙөкләндереүҙе, торлаҡ-коммуналь хужалыҡты үҫтереүгә булышлыҡ итеү", - тип хәбәр итте Башҡортостан Башлығының матбуғат хеҙмәте.

✓Рәсәйҙең Мәғариф министрлығы, Мәғариф һәм фән өлкәһендә күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәт 9-сылар өсөн төп дәүләт имтихандары теҙмәһенең проектын әҙерләне. Уға ярашлы, төбәктәрҙә имтихандар 8 июндә башлана һәм июль аҙағына тиклем дауам итә. Бынан алда быйыл төп дәүләт имтиханы рус теле һәм математиканан ғына үткәрелеүе, һайлау буйынса имтихандары булмауы тураһында хәбәр ителгәйне.

✓Коронавирус таралыуы сәбәпле Владимир Путин Еңеү парадын күсерҙе. Был хаҡта ул Рәсәй Хәүефһеҙлек советы ултырышы ваҡытында белдерҙе. 15 апрелдә 12 ветеран ойошмаһы етәкселәре президенттан парадты күсереүҙе һораны. Ветерандар уны икенсе ваҡытта, "эпидемиологик хәлгә ярашлы парад хәүеф түгел, ә ысын мәғәнәһендә тыныслыҡ һәм хәүефһеҙлек тантанаһы" булған саҡта уҙғарырға тәҡдим итте.

✓17 апрелдә Өфөгә Бангкоктан (Таиланд) "Уральские авиалинии" авиакомпанияһы самолеты менән Рәсәй туристары ҡайтты. Самолет тәүҙә Ҡаҙанда туҡтап, 111 пассажирҙы ҡалдырып китә. Өфөгә 68 пассажир ҡайта. Уларҙың барыһы ла тикшергәндән, коронавирус инфекцияһына тест үткәргәндән һуң обсерваторға ебәрелгән.

✓ *Ваҡыт уҙыу менән улар еңеү яулаусылар булараҡ почетҡа күмелде, ә беҙ, шул ҡәһәрле һуғыштың бөтөн ауырлыҡтарын татығандар, бала сағы булмағандар һәм атайһыҙ үҫкәндәр онотолоп торҙоҡ та ҡалдыҡ.*



БЫНАҒАЙЫШ!

# ҺИН КӨРӘШТЕҢ ҠАЙҺЫ ЯҒЫНДА?

**Бәлә яңғыҙы йөрөмәй, тиһәләр ҙә һуңғы осорҙа улар күбәйеберәк тә китте түгелме? Эйе, мәкерле вирус фонында уның башҡа эйәрсендәре үлемесле һәләкәт менән янамай янауын, әммә бөтә көс яман сирҙе еңеүгә йүнәлтелергә тейеш мәлдә зиһенде тарҡата, көсөргәнеш өҫтәй - ҡыҫҡаһы, дошман тирмәненә һыу ҡоя.**



Валюта тотороҡһоҙлоғо, шуның эҙемтәһе булараҡ башланған иҡтисад көрсөгө менән COVID-19 афәте араһындағы бәйләнеште берәү ҙә инҡар итмәҫтер. Тап ана шул сир шауҡымы нигеҙендә аҙыҡ-түлек баҙарында килеп тыуған ғауға һәм ығы-зығынан оҫта файҙаланмаҡсы бәғзе берәүҙәр. Аҙыҡ-түлек етештереүселәр менән улар продукцияһын ваҡлап һатыусылар сылбырын берләштереп тороусы аралашсылар, йәғни тәьминәтселәр яҡын араларҙа ризыҡҡа кәмендә 5-20 процентҡа хаҡтар арттырыласағы хаҡында белдерҙе. Белгестәр билдәләүенсә, үткән аҙнала ваҡлап һатыу әйләнешендә инфляция 0,3 процент тәшкил итеп, ҡайһы бер аҙыҡ-түлек төрҙәренә былай ҙа бер аҙ хаҡ артыу күҙәтелгәйне. Мәҫәлән, шәкәр - 7 процент, ҡарабойҙай - 2,8, он - 1,2, һуған - 3,5, кишер 2,5 процентҡа ҡиммәтләнде. Хаҡтарҙы күҙаллау һатып алыусыларҙың запас аҙыҡ-түлек туплау маҡсатында теге йәки был тауар төрөнә ғауғалы ихтыяжы нигеҙендә формалаша. Хаҡтар артыуҙың килеһе тулҡыны иһә һумдың осһоҙланыуы менән бәйле буласаҡ. Ҡыҫҡаһы, ҡулланыусыға билбауҙы ҡыҫыбыраҡ бәйләргә тура килмәгәйе, тип иҫкәртә эксперттар. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ваҡлап һатыу әйләнеше иң ҙур һорау менән файҙаланылған өлкә булып ҡала килә.

Әйткәндәй, бынан алдараҡ, март айында, РФ Дәүләт Думаһы тарафынан эпидемия ваҡытында кеше ғүмере өсөн мөһим 700 төр дарыу исемлегенә, медицина тауарҙарына һәм башҡа төр медикаменттарға хаҡ арттырыуҙы тыйыусы закон ҡабул ителгәйне. Был юлы иһә Думаның "Берҙәм Рәсәй " фракцияһы депутаттары оперативлығы ғәжәп итте. Үткән аҙнала фракция вәкилдәре Рәсәй Хөкүмәте башлығы Михаил Мишустин менән осрашты һәм аҙыҡ-түлеккә, дарыуҙарға хаҡтарҙы арттырыуға юл ҡуймау хаҡында һөйләште. Дәүләт Думаһы спикеры Вячеслав Володин был мәсьәләне хөкүмәт контроленә алыуҙы һәм сара күреүҙе һораны. "Ҡайһы бер йәшелсә-емешкә хаҡтар тиҫтәләгән тапҡырға ҡиммәтләнде, - тине ул. - Тимәк, беҙҙең сауҙа селтәрҙәре кешеләрҙең матди ярҙам йә эш хаҡы булараҡ алған барлы-юҡлы аҡсаларын тартып ала тигән һүҙ..." Рәсәйҙәрҙең 39 проценты үҙҙәренең көндәлек сығымы артыуын тап ана шул хаҡтар күтәрелеүендә күрә лә инде. Премьер-министр депутаттарҙың хаҡ арттырыуҙы тыйыу тураһында тәҡдимен хупланы. Президент алғы һыҙыҡта табиптар көрәшә, тип әйтте, ә бына беҙҙең тылда бөгөн низәр ҡылына, тип өҫтәне Володин бөгөнгө хәлдә кеҫә ҡалынайтыу маҡсатында файҙаланырға маташыусыларға. Ысынлап та, ҡайһы берәүҙәр тарафынан коронавирустан әмәл тип иҫәпләнгән лимон, һарымһаҡ һәм имбирҙән башланып киткән ажиотаж арҡаһында бер тән эсендә хаҡтар артыуы әкренләп кенә йогошло вирус төҫлә башҡа төр аҙыҡ-түлеккә лә күсә башланы: ҡайһы бер магазиндарҙа, мәҫәлән, йомортҡаның тиҫтәһен 67 һумға, кукуруз, йәшел борсаҡтың 200 грамлыҡ иң бәләкәй банкаһын 63 һум 90 тингә, ҡыйыртылған һөттөң ҡалай банкаһын (370 г) 89 һум 90 тингә, сөгөлдөрҙөң килоһын 53 һум 90 тингә, һуғанды - 37 һум 70 тингә, тәмләткес ҡәнәфер бөрөһөнөң 10 грамын 81 һум 90 тингә һатып алырға була. Был исемлеккә әле хаҡы артҡан башҡа бик күп аҙыҡ-түлек төрҙәре инмәне, бары тик осраҡлы, һайлап алынған тауарҙар ғына килтерелде.

Дәүләт Думаһы һәм Хөкүмәт тарафынан пандемия осоронда иң беренсе ихтыяж менән файҙаланылған аҙыҡ-түлеккә хаҡтарҙы арттырмаҫҡа тырышыу ниәте ни тиклем генә мәрхәмәтле ғәмәл булмаһын, был миҙалдың бер яғы ғына әле. Уның икенсе яғында - яҡын арала хаҡтарҙы арттырырға ниәтләнеүсе аралашсылар - сауҙа селтәрҙәре тәьминәтселәре. Ваҡлап һатыу компанияларының ассоциацияһы (АКОРТ), властарҙың был ниәткә тыйыу һалыуы магазин кәштәләренән теге йәки был төр тауарҙарҙың юҡҡа сығыуына, йәғни наҡыҫлыҡ килеп тыуыуға сәбәпсе булыуы ихтимал, тип иҫкәртә. Шуныһы ғәжәп: был юҫыҡта етештереүселәрҙең дә, сауҙа ойошмаларының да аппетиттары ҡабарғаны тойолмай, улар әлегә өнһөҙ-тынһыҙ үҙ бурыстарын атҡарыу өҫтөндә: тәүгеһе көн-төн ризыҡ етештерә, икенсеһе - һата. Улай ғына ла түгел, сауҙа селтәрҙәренең ҡайһылары, мәҫәлән, "Магнит" кеүек йорт янында урынлашҡан һәм үҙҙәрен ғаилә магазины тип иғлан иткән ойошмалар күп кенә тауар төрҙәренә, атап әйткәндә, дөгө, быҡтырылған ит консерваларына, "Геркулес" ярмаһы, макарон, шәкәр, кер һабыны кеүек тәү кәрәк тауарҙарға хаҡты арттырмаҫҡа, уны тәьминәтсенән һатып алынған хаҡтан күтәрмәскә тигән белдереү менән сығыш яһаны. Афарин, бөгөн шулай булырға тейештер ҙә. Спикер В. Володин һүҙҙәрен үҙгәртеберәк әйткәндә, бөтәһе лә намыҫын юғалтмаған әле. Был коронавирус, әйтерһең дә, лакмус ҡағыҙылай кемдең кем икәнлеген донъяға таныта башланы түгелме? Донъя, ил өсөн икеләтә, өсләтә ябырылған оло һынау мәлендә, эйе, хаҡтарҙың да баш бирмәй китеүе бик ихтимал, ләкин йәшәү менән үлем араһында барған көрәштә ауыр һынауҙы бер төптән тартыу ғына уңышҡа килтерер. Үкенескә, бар әле һаман арабыҙҙа мәкерле сирҙең башҡа илдәрҙә ҡылғаның һиһалап еткермәүселәр, битарафтар, нәфсе ҡолдары, ҡомһоҙҙар. Был көрәштең ҡайһы яғында һуң улар?

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# ҒӘҘЕЛ ТҮГЕЛ БЫЛ



**Һуңғы ваҡытта "Рәсәй Италияға самолет менән медицина ярҙамы ебәрҙе", тип телевизорҙан да һөйләнеләр, гәзиттәр ҙә яҙып сыҡты. Был, әлбиттә, хуплауға лайыҡ. Илдәргә, халыҡтарға ауырлыҡ килгәндә Рәсәйҙең һәр ваҡыт ярҙамға ташланырын бар донъя белә. Әммә тейешенсә баһалайҙармы икән бындай ярҙамды? Ярай, быныһы икенсе мәсьәлә. Әйтә торғаным башҡа.**

Ошондай яуыз сир баҫып алып барғанда үҙ граждандарыңдың ауыҙынан өҙөп, ситтәргә ярҙам итеүгә ҡарата төрлө мөнәсәбәт белдерҙе кешеләр. Беҙҙең илдең бындай мөмкинлектәре бар, тип тынысландырҙылар тынысландырыуға. Ә шулай ҙа ул мөмкинлектәрҙе барыбер ҙә үҙ граждандарыбыҙ өсөн файҙаланыу урынлыраҡ булмаҫ инеме ни? Бына, мәҫәлән, мин инвалид, пенсия аҡсамдың бер өлөшө ай һайын бушлай биреләсәк кәрәкле дарыуҙарға тотоп ҡалына. Әммә былтыр 4-се кварталда ла, быйыл да шул аҡсаға дарыу ала алғаным юҡ. Ауыл медпунктына барһаң, тейешле бланкылары юҡ, район үҙәгенә мөрәжәғәт итһәң, йә бланк юҡ, йә дарыу юҡ, тип яуаплайҙар. Миңә йөрәк, ашҡаҙан сирҙәренә бәйле даими рәүештә дарыуҙар ҡабул итергә кәрәк. Аптырағандың көнөнән март айында ғына 7 меңлек дарыу һатып алдым. Тәү сиратта дәүләт үҙ граждандары тураһында хәстәрлек күрһен ине ул, тип уйлайһың инде ҡотолғоһоҙлоҡтан. Динебеҙҙә лә, тәүҙә үҙеңде ҡара, шунан балаларыңды, туғандарыңды хәстәрлә, шунан һуң ғына ситтәргә ярҙам ит, тиелгән бит.

Тағы бер проблеманы телгә алып үтмәй булдыра алмайым. Бына тиҙҙән бөтә илебеҙ өсөн күркәм байрам - Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүҙең 75 йыллығын ҡаршы алырға йыйынабыҙ. Уны йөш быуын сиратталағы ял көндәре итеп кенә ҡабул итә, йәки һуғышта һәләк булған олатай-өләсәйҙәрен иҫкә ала. Ә беҙ, атайҙары яу ҡырында ятып ҡалған балалар, был көндә тағы бер тапҡыр ҡайғы яңыртабыҙ. Мин үҙем 1937 йылғымын, атайыбыҙ фронтҡа киткәс, 1943 йылда, алты йәшемде тултырған малай ғына көйө колхозға күбә тартырға сыҡҡанмын. Ул саҡта колхоз бесәнлегендә тик етем балалар һәм тол ҡалған ҡатындар ғына эштә йөрөнө. Һуғыштан имен ҡайтҡан ирҙәрҙең балалары беҙҙең кеүек ауыр эшкә егелмәне, уларҙың әсәйҙәре лә өйҙә ултырҙы. Ваҡыт уҙыу менән улар еңеү яулаусылар булараҡ почетҡа күмелде, ҡатындары һәм балалары төрлө льготалар менән файҙаланды, фатир алды. Хәҙер шул фатирҙарҙа уларҙың ейән-бүләләре рәхәтләнеп йәшәй. Ә беҙ, шул ҡәһәрле һуғыштың бөтөн ауырлыҡтарын татығандар, бала сағы булмағандар һәм атайһыҙ үҫкәндәр, ауыр эштән миктәп, бик иртә яҡты донъя менән хушлашҡан әсәйҙәрҙән ҡалғандар бер ниндәй иғтибарһыҙ, онотолоп торҙоҡ та ҡалдыҡ. Тылдағыларға, яуҙа үлгәндәрҙең балаларына ярҙам тураһындағы хәбәр һүҙҙә бар барлыҡҡа, ләкин беҙ ул ярҙамды тойғаныбыҙ ҙа, күргәнебеҙ ҙә юҡ. Ошондай ғәҙелһеҙлек тураһында ине әйтер һүҙем.

**Юламан РАЕВ.**
**Баймаҡ районы Шүлкә ауылы.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓16 апрелгә Өфөлә үҙизоляцияны боҙған 843 кешегә штраф һалынған. Республика Башлығы билдәләүенсә, штрафҡа йәлеп ителеүе кешенең артабанғы эшкә урынлашыуында кире сағылыш табасаҡ. 20 апрелдән үҙизоляцияны боҙған өсөн тикшереүҙәр тағы ла ҡатыланасаҡ.

✓Башҡорт дәүләт медицина һәм Өфө дәүләт авиация университеттары ғалимдары математик моделләштереү алымы менән иҫәпләп сығарып, 21 апрелгә республикала короновирус менән ауырыусылар һаны 389 кешегә етәсәк, тип фаразлай. Ғалимдар фекеренсә, әле республика эпидемияның уртаһында. Үҫеш темпының стабилле булыуына үҙизоляция саралары булышлыҡ итә, тигән фекерҙә ғалимдар.

✓Ауырымаған кешеләр ҙә "Медиа-Лаб", "МЕГИ","Лорак" кеүек шәхси медицина үҙәктәрендә короновирусҡа анализ тапшыра ала. Анализ хаҡы - 1200-1900 һум. Паспорт булыуы шарт. Короновирус булыуы асыҡланһа, лаборатория Роспотребнадзорға хәбәр итә һәм биоматериалды яңынан тикшереүгә ебәрә.

✓Ҡыуатов исеменәге Республика клиник дауаханаһы пациенттарына туғандары пакет тапшыра ала. Пакеттарҙы Кустарный, 17 адресындағы мәҙәниәт һарайында ҡалдырырға кәрәк. Ҡабул иткәндә волонтерҙар йә клиника хеҙмәткәрҙәре пакеттарҙы тикшерә, дезенфекциялай һәм адресат буйынса тапшыра.

✓Бөгөн Өфөнөң 25 предприятиеһы битлектәр тегеү менән шөғөлләнә. Тәүлегенә улар 38 меңдән ашыу битлек әҙерләй. "Каланы йәшелләндереү хужалығы" муниципаль предприятиеһы ла яңы коронавирус инфекцияһы таралыуын кәметеү өсөн битлектәр тегеүҙе яйға һалды. Мәғлүмәттәр буйынса, бер нисә йыл элек предприятиела тегеү цехы асылған, унда "Каланы йәшелләндереү хужалығы" һәм коммуналь өлкә ойошмалары эшселәре өсөн махсус кейем етештерелгән.

✓Башҡортостанда тәүге тапҡыр ветеран иҫән сағында уҡ иҫтәлекле таҡтаташ ҡуйыла. 15 апрелдә 100 йәшен билдәләгән Ришат Сәлих улы Исмәғилевтың яҡташтары шул турала һораған. Иҫтәлекле таҡтаташ Ришат Исмәғилев тамамлаған Кушнаренко һөнәри колледжында ҡуйыла. Шулай уҡ Байгилде ауыл лицейына ветерандың исеме бирелә.

✓ *Иң киҫкен мәлдә көнөнә 350 пациент сирләйәсәк, һуңынан, сирләүселәр һаны дауаланып сығыусыларҙан кәмерәк булһа, киҫкен осор үтте, тип әйтергә мөмкин буласаҡ. Әле барьер булдырыу - коллектив иммунлаштырыу бурысы тора.*



*ӘЙТКӘНДӘЙ...*

# ӨФӨ ТАБИБЫ ҺӨЙЛӘЙ

**Медицина фәндәре докторы Нәүфәл Заһиҙуллин Башҡортостандың баш ҡалаһында яңы коронавирус инфекцияһының көсәйеүе апрель һуңында, май башында көтөлөүен белдерҙе.**

Бының өсөн ауырыу динамикаһы буйынса билдәле ваҡыт арауығы күрһәткестәре һәм аныҡ, дөрөҫ, асыҡ мәғлүмәттәр кәрәк. Иң киҫкен мәлдә көнөнә 350 пациент сирләйәсәк, һуңынан, сирләүселәр һаны дауаланып сығыусыларҙан кәмерәк булһа, киҫкен осор үтте, тип әйтергә мөмкин буласаҡ. Табип белдереүенсә, әле барьер булдырыу - коллектив иммунлаштырыу бурысы тора. Халыҡтың 30-40 проценты сирләһә, шундай барьер барлыҡҡа киләсәк. "Әлбиттә, бәләкәй ҡалаларҙа, ауылдарҙа йәшәүселәр араһында ҡабаттан сирләүселәр ҙә осраясаҡ, әммә был һирәк күренеш буласаҡ һәм йыл һуңынаса дауам итәсәк. Иң ҡурҡынысы - пациенттарҙың бер юлы күпләп ауырыуы", - ти Нәүфәл Заһиҙуллин.

Медицина фәндәре докторы әлеге ваҡытта бөтөн донъяла, шул иҫәптән Рәсәйҙә лә, бер нисә компанияның вакцина эшләү менән шөғөлләнеүе тураһында һөйләне. Ул яҡынса көҙ һуңында ғына әҙерләнеп бөтәсәк, уның һөҙөмтәһе вакцинациянан һуң бер ай үткәс кенә күренә башлаясаҡ һәм, нигеҙҙә, ул киләһе эпидемияны профилактикалау сараһы буласаҡ.

Табип белдереүенсә, барлыҡ инфекцияларҙың 30 проценты коронавирус булып тора, әммә улар яңы инфекцияға оҡшаш түгел. Шулай ҙа илдәге үлем күрһәткесенең түбән булыуы - 0,8 процент, быға тиклем 30 процент коронавирус менән сирләгән сирҙәр короновирус инфекцияһына антитела барлыҡҡа килтереү ихтималлығына ишаралай.

Яңы коронавирус тыуҙырған һәм ғәҙәти пневмония араһындағы айырманы аңлатып, табип, ғинуар-февралдә киҫкен респиратор сирҙәре һәм үпкә ауырыуҙары менән сирләүселәр коронавирус менән зарарланған булһа, рентгенологик картина аша быны асыҡлап булыр ине һәм күрһәткестәр ҡапыл күбәйер ине, тине. Ә был осорҙа пневмония күрһәткестәре үткән йылдарҙағынан айырылмаған.

Шулай уҡ ул әлеге ваҡытта бер нисә компания һәм фирманың яңы тестар эшләүе хаҡында белдерҙе. Улар апрель-майҙа сығарыласаҡ, һөҙөмтәне асыҡлау ваҡытын 3-4 сәғәткә тиклем ҡыҫҡартыу мөмкинлеге бирәсәк. Иң мөһиме - уларҙың һөҙөмтәне аныҡ күрһәтергә тейешлеге, кире осраҡта зыян күберәк буласаҡ, тип билдәләне Нәүфәл Заһиҙуллин.

**"БАШИНФОРМ".**

*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

## КҮРЕНЕП ТОРАСАҠ!

**Башҡортостанда иҫтәлекле урындарҙың һәм туристик объекттарҙың беренсе күрһәткестәре менән таныштырҙылар. Халыҡ-ара стандарттарға ярашлы эшләнгән, рус һәм инглиз телдәрендәге яҙыуҙар менән тәүге күрһәткестәрҙе республика Башлығы Радий Хәбиров үҙенең сәхифәһенә һалды.**




Республика Башлығы миҫал итеп башҡорт мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың Ҡырмыҫҡалы районында урынлашҡан музейына күрһәткесте килтерҙе. "Тиҙҙән тотош республикала бына шундай билдәләр элеп торор. Беҙҙә яҡшы туристик объекттар бик күп. Ләкин уларҙы табыуы енелдән түгел", - тип яҙҙы Радий Хәбиров. Бынан алда "Башинформ" республикала ҡыҙыҡлы туристик объекттарға илткән 108 күрһәткес ҡуйыу планлаштырылыуын хәбәр иткәйне. Исемлектә популяр объекттар ҙа, аҙ билдәле, мәҫәлән, ҡыҙыҡлы музейҙар һәм ҡорамдар ҙа бар. Күрһәткестәр федераль, төбәк трассаларында һәм урындағы әһәмиәткә эйә юлдарҙа ҡуйыла. Объекттар араһында - Шүлгәнташ мәмерйәһе, Ирәмәл тауы, Ар ташы, Нөгөш һәм Йомағужа һыу һаҡлағыстары, "Башҡортостан" милли паркы һәм башҡалар.

## СӘСӘЛӘР...

**Башҡортостандың 10 районында яҙғы сәсеү башланды, тип хәбәр иттеләр республика Ауыл хужалығы министрлығының матбуғат хеҙмәтенән.**

"Ғәҙәттәгесә, тәүгеләрҙән булып сәсеүгә Урал алды дала һәм көньяҡ урман-дала климат зоналарында төштөләр. Хәҙер Дүртөйлә һәм Илеш районларында сәсеү кампанияһы әүҙем бара - әлеге ваҡытта бында 2,1 һәм 1,8 мең гектарҙа сәселгән", - тип белдерҙеләр ведомствоның матбуғат хеҙмәтендә. Дөйөм алғанда, 14 апрелгә Башҡортостанда 5,7 мең гектар майҙанда яҙғы сәсеү эштәре башҡарылған. Быйыл иген һәм ҡуҙаҡлы культуралар өсөн бөтәһе 2 миллиондан ашыу гектар бүлеп биреү планлаштырыла. Республиканың барлыҡ хужалыҡтарында тиерлек ужым культураларын туҡландырыу, күп йыллыҡ үләндәрҙе тырматыу һәм дым ҡаплатыу әүҙем дауам итә. Быйыл яҙғы баҫыу эштәрен федераль һәм республика бюджеттарынан 1 миллиард 92 миллион һум йүнәлтеү ҡуҙаллана.

## ШТРАФ ҺАЛЫНА

**Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай ашламалар һәм агрохимикаттар менән хәүефһеҙ эш итеү тураһында ике федераль закон проектын Дәүләт Думаһына тәҡдим итте, тип белдерҙеләр республика парламентының матбуғат хеҙмәтендә.**

Яландарҙа һәм урмандарҙа химик матдәләрҙе файҙаланған граждандарға һәм юридик берәмектәргә яҡындағы тораҡ пункттарҙа йәшәгән халыҡҡа ошо матдәләрҙе ҡулланырға йыйыныу хаҡында ваҡытында хәбәр итеү буйынса яуаплылыҡ йөкмәтелә. Икенсе проект беренсеһен үтәмәгән өсөн административ яуаплылыҡ билдәләй: граждандарға штраф суммаһы 1-3 мең һум була. Шәхси эшҡыуарҙарға һәм юридик берәмектәргә штраф йәки 90 тәүлеккә тиклем эшмәкәрлекте административ туҡтатыу ҡарала. Эшҡыуарҙар өсөн штраф - 5-30 мең һум, компаниялар өсөн 20-100 мең һум булыуы ихтимал. "Ваҡытында хәбәр итмәүҙең кире эҙемтәләренең иң сағыу миҫалдарының береһе - 2019 йылдың июлендә бал ҡорттарының ҡырылыуы. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, ул саҡта Рәсәйҙең 25 төбәгендә 80 меңгә яҡын бал ҡорто ғаиләһе һәләк булған, зыян ике миллиард һумдан ашыу тәшкил иткән. Умартасылар үҙҙәренә килгән зыянды тағы ла күберәк тип баһалай", - тип аңлатма бирҙе Дәүләт Йыйылышы рәйесе Константин Толкачев. Былтыр сертификаты булмаған пестицидтар ҡулланыу арҡаһында бал ҡорттарының ҡырылыуына юл ҡуйған предприятиеға 34 мең һум штраф һалынды.

## ДЕКРЕТТА БУЛҺАҢ...

**Башҡортостанда декрет ялындағы әсәләр яңы һөнәр үҙләштерергә һәм уҡыған ваҡытта стипендия алырға мөмкин. Республика Башлығы Радий Хәбиров уҡытыу һәм һөнәри әҙерлек буйынса яңы программаның башланыуы тураһында һөйләне.**

Ҡабаттан уҡытыу программаһын өс йәшкәсә балаһы менән декрет ялында ултырған ҡатын-ҡыҙҙар йәки 7 йәшкә тиклем бала тәрбиәләгән, ләкин эшләмәгән ҡатын-ҡыҙҙар үтергә мөмкин. Теләһә ниндәй һөнәргә уҡып сығырға була. Эш биреүселә квалификацияны күтәрергә йәки белем биреү сертификатын алырға, йә иһә мәшғүллек үҙәге йүнәлтмәһе буйынса уҡырға мөмкин. Уҡыу ваҡыты - өс айға хәтлем. Белем биреү сертификатының хаҡы - 46,3 мең һумға тиклем. Бынан тыш, уҡыған осорҙа ҡатын-ҡыҙҙарға МРОТ күләмендә - 13,9 мең һум стипендия түләнә. "Сер түгел, йәш әсәләр бала менән өйҙә ултырған ваҡытта йыш ҡына үҙҙәренең компетенцияһын юғалта, декрет ялы тамамланғас, уларға эш режимына инеү ҡыйынығаҡ. Был - стресты кәметеү, үҙеңдең оҫталығыңды арттырыу йәки яңы һөнәр үҙләштереү өсөн уйланылған программа", - тине Радий Хәбиров. Быйыл республикала бөтәһе 1 257 ҡатын-ҡыҙҙы уҡытыу планлаштырыла. Уҡыуға яҙам сараларын алыу өсөн эш биреүсегә йәки йәшәгән урын буйынса халыҡ мәшғүллеге үҙәктәренә мөрәжәғәт итергә кәрәк.

## БЕР ҺУМҒА ҺАТЫЛА...

**Ҡала хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәлә ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Евгений Чебаков белдереүенсә, бөгөн муниципаль милек ҡарамағында айырым торған 42 мәҙәни мираҫ объекты бар, шул иҫәптән 39-ы - ҡала ҡаҙнаһында.**

18 объект ҡәнәғәтләнерлек торошта, 21-е - ҡәнәғәтләнерлек түгел һәм улар буйынса һаҡлау саралары алып барыла. Был исемлеккә 4 торлаҡ булмаған бина, 17 хужалары икенсе ергә күсерелгән авария торошондағы торлаҡ йорт инә. 3 объект муниципаль предприятиелар хужалығында.

Ҡаланың мәҙәни мираҫ объекттары исемлеге авария торошондағы йорттар - боронғо архитектура һәйкәлдәре иҫәбенә тулылана. Граждандарҙы икенсе ергә күсереүҙең адреслы программаһына 84 объект индерелгән, уларҙың 48-е Октябрь революцияһы урамында урынлашҡан. Ошо объекттарҙың 20-һендә йәшәүселәр күсерелгән, 57-һе күсереү стадияһында, ә объектта йәшәүселәр - киләһе йылда, дүрт объекттан - 2022-2024 йылдарҙа күсереләсәк.

Һуңынан инде улар реставрациялау шарты менән ҡуртымға биреләсәк йәки һатыласаҡ. Законға ярашлы, объектты һатып алыу хаҡы бер һум, әммә милеккә хужа булыусы килешеү буйынса уны реставрацияларға тейеш. Әгәр инде килешеү боҙолһа, муниципалитет объектты, тотонолған сығымдарҙы кире ҡайтармайынса, тартып алырға хоҡуҡлы.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Мәскәүҙән һәм Рәсәйҙең коронавирус инфекцияһы буйынса хәүефле төбәктәренән ҡайтҡандар 8-800-250-56-04 телефон номеры буйынса Өфө хакимиәтенә үҙҙәренең ҡайтыуҙары хаҡында хәбәр итергә тейеш. Шылтыратыу бушлай. Мэрияла белдереүҙәренсә, өфөләргә исем-шәрифтәрен, йәшәгән адресын әйтергә һәм үҙизоляция режимын үтәүҙәрен раҫларға кәрәк.

✓Башҡортостан Мотлаҡ медицина страховкаһы фондының 2020 йылға бюджеты 300 миллион һумға тиерлек арттырылды. Республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа асыҡлыҡ индереүҙә ренсә, аҡсаның төп өлөшө медицина хеҙмәткәрҙәренең эш хаҡына түләү өсөн йүнәлтелә. Шул уҡ ваҡытта штаттыс кинәйтеү күҙ уңында тотола. Бынан тыш, аҡсаның бер өлөшө диспансеризация һәм медицина тикшереүҙәре барышында онкология сирҙәрен асыҡлаған өсөн медицина хеҙмәткәрҙәренә дәртләндереү түләүҙәре өсөн бүленә.

✓Башҡортостанда яҡынлашып килгән Рамаҙан айы мосолмандар өсөн ҡайһы бер сикләүҙәр менән уҙғарыла. Был турала Башҡортостан Республикаһы мосолмандарының Диниә назараты рәйесе Айнур Бирғәлин хәбәр итте. Атап әйткәндә, тәрәүих намаҙҙары һәм ифтарҙар булмай. Башҡортостанда бөтә мәсеттәр ҙә ябыҡ. Йома намаҙҙары уҙғарылмай. Манаранан диндарҙарҙы азан һәм үҙизоляция тәртибен үтәргә саҡырыу яңғырай.

✓Өфөлә яңы тундырма фабрикаһы асыла. "Инвестиция сәғәте"ндә "Интел Ко" компанияһының финанс департаменты директоры Владимир Онацкий ("Нерал" компаниялар төркөмө) "Башкирский холод" асыҡ акционерҙар йәмғиәте предприятиеларында яңы фабрика булдырыу буйынса пландары тураһында һөйләне. Заманса етештереү линиялары менән тәъмин итеү өсөн килешеүҙәр төҙөлгән дә инде, тиҙҙән яңы корпус һалыу өсөн рөхсәт әҙер була.

✓Башҡортостанда дөйөм йорт электр иҫәпләгестәрен ҡуйыу бурысын закон нигеҙендә ресурс менән тәъмин итеүселәргә йөкмәтеү планлаштырыла. Республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа ҡаралыусы закон проекты дөйөм йорт электр энергияһын иҫәпләү приборҙарына ғына ҡағыла. Фатирҙарҙа иҫәпләгестәр ҡуйыу һәм алмаштырыу өсөн элеккесә уларҙың хужалары яуаплы.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

***✓ Предмет уҡытыусылары һәр дәрес һайын отчет бирә, кем булды, кем ҡатнашты йә ҡатнашмаған. Шунда уҡ ата-әсәләре менән бәйләнешкә инеп, бындай хәлдәрҙең сәбәбе асыҡлана. Бер бала ла иғтибарһыҙ ҡалмай.***

*ӘЙТӘГҮР!*

**Уҡыусыларҙың дистанцион белем алыу системаһына күсеүенә лә ике аҙна үтте. Бөтөн донъя йәйләп интернет селтәренә күсеп бара, тип һөйләһәк тә, үҙебеҙ шуның менән күҙмә-күҙ осрашмай тороп, уның нимә икәнен елкәбеҙҙә татығас, уҡытыусылар ҙа, ата-әсәләр ҙә, балалар ҙа тәүҙә бер аҙ шаңҡып ҡалған кеүек булғайны. Бер ни тиклем адаптациянан һуң, уҡытыусылар һәм ата-әсәләр ниндәй фекерҙә икән, әйҙәгеҙ, һүҙҙе уларға бирәйек.**

# МӘКТӘПТЕ ҺАҒЫНАЛАР...



***Зөбәржәт ҒАТАУЛЛИНА, Өфө ҡалаһы, уҡытыусы:*** Бөгөн тормошобоҙҙо ситтән тороп эшләүҙән башҡа күҙ алдына ла килтерә алмайбыҙ, сөнки теләйбеҙме-юҡмы, әммә хеҙмәткәрҙәр ҙә, етәкселәр ҙә шундай хәлдә тороп ҡалдыҡ. Ойошмалар өсөн ситтән тороп эшләү улай уҡ артыҡ нервы көсөргәнешен талап итмәһә, уҡытыусылар, бигерәк тә оло йәштәгеләр өсөн был ысын мәғәнәһендә шок булды, улар һандал һәм сүкеш араһында ҡалды. Өсөнсө көнгә дәрестәр бер аҙ нормаға инде. Етәкселәр бер аҙ тынысланды, уҡытыусылар тәүге шокты үткәрҙе, иң ҙур проблема булған Elschool (мәктәп көндәлеге һәм электрон журнал) бөгөн бер ҡытыршылыҡһыҙ эшләй. Ата-әсәләр ҙә ситтән тороп белем алыуҙы шулай тейеш кеүек ҡабул итте. Ә балалар дистанцион уҡыуға бер проблемаһыҙ, бер ниндәй ығы-зығыһыҙ, тыныс ҡына инеп китте. Дөрөҫөн әйткәндә, улар шул смартфондары эсендә йәшәйҙәр ине лә инде. Әммә бәләкәстәр мәктәпте, беҙҙең ҡосаҡлашыуҙарҙы һағына. Ата-әсәләргә түҙемлек кенә теләргә ҡала. Үҙегеҙҙе балағыҙҙың уҡытыусыһы итеп тойоғоҙ, ниһайәт, тәрбиә, белем биреүҙәге күҙ уңынан төшөп ҡалған мәлдәргә иғтибар йүнәлтегеҙ, тип әйтке килә уларға. Ҡайһы берҙә яҡшы белем һәм яҡшы баһалар ғаиләләге хәлдәргә, ғаиләләге мөхиткә бәйле. Бик йыш үҙебеҙҙең феминизмыбыҙ менән үҙебеҙҙе күтәреп, ғаилә абруйын, атайҙар абруйын онотоп китәбеҙ. Хәҙер ана шул хатаны төҙәтеү ваҡыты. Ауыр заманда, һынау осоронда йәшәһәк тә, ситтән тороп белем биреү һәм белем алыу, бер аҙ ҡыйынлыҡтар булһа ла, иң яҡшы вариант. Барыбыҙ ҙа һау-сәләмәт булайыҡ!

***Гөлназ СӘЛИХОВА, Күгәрсен районы, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы:*** Башта балалар каникулда ял иткәндә, беҙ, уҡытыусылар, ситтән тороп нисек эшләргә өйрәндек, вебинарҙар тыңланыҡ, районда ла республика күләмендә лә онлайн асыҡ дәрестәр күрһәтеп ҡараныҡ. Беренсе көн бигерәк ауыр булды. Дәрестәрҙең күбеһе zoom аша үткәрелә. Унан тыш, ватсап, "Бәйләнештә" социаль селтәрҙәре аша ла эшләйбеҙ. Бер үк ваҡытта өйҙә ултырған бөтә кеше ватсапҡа һәм "Бәйләнештә" селтәренә ингәс, интернеттың көсө етмәй, этә-төртә тигәндәй тәүге көндө үткәрҙек. Унан ата-әсәләргә, ауыл халҡына, төшкә тиклем, балалар уҡығанда, интернетҡа инмәй тороғоҙ, тип әйтелде.

Артабан балалар ҙа, үҙебеҙ ҙә өйрәнеп киттек. Хәҙер икенсе аҙна бара. Ундай уҡ проблемалар юҡ. Ата-әсәләр ҙә өйрәнде. Тәүҙә улар ҙа күп һорауҙар бирҙеләр. Уҡытыусының эше кәмемәне, өҫтәлде генә. Хәҙер бит 7-се дәрестәр ҙә бар. Уларҙы уҡытып бөтәһең дә кискә тиклем һәр береһенән килгән эштәрҙе тикшерәһең, һәр береһенә яуап яҙаһың. Аудиояҙмаларын тыңлайһың, видеоларын ҡарайһың. Ана шул көнө буйы гаджетҡа бәйле булыу ауыр.

Уҡыусыларға килгәндә инде, тырыштары, әүҙемдәре дистанцион уҡытыуҙа ла әүҙем. Онлайн дәрестәр ваҡытында хатта, кем алдараҡ яуап бирә, эште ебәрә, тип ярышалар. Мәктәптә арттараҡ ултырғандар бында ла йәшенеп ҡалырға тырыша. Әммә класс етәкселәре тарафынан контроль көслө. Предмет уҡытыусылары һәр дәрес һайын отчет бирә, кем булды, кем ҡатнашты йә ҡатнашмаған. Шунда уҡ ата-әсәләре менән бәйләнешкә инеп, бындай хәлдәрҙең сәбәбе асыҡлана, интернеты эшләмәһә, телефондан шылтыратып булһа ла эштәр бирелә. Бер бала ла иғтибарһыҙ ҡалмай.

Башҡорт теле һәм әҙәбиәтен уҡытыуҙа ярҙамсы төркөмдәр күп. Бигерәк тә Милли мәғариф буйынса ресурс үҙәге уҡытыусыларҙың эш тәжрибәһен күп һала. Башҡортостан Республикаһының Мәғарифты үҫтереү институты ла күп материалдар менән тәьмин итә. Унан тыш "Бәйләнештә" лә, ватсапта ла төрлө төркөмдәр булдырылған. Википедиянан, башҡа уҡытыусыларҙың сайттарынан да мәғлүмәттәр алабыҙ. Яңғыҙ түгелбеҙ.

**(Дауамы 6-сы биттә).**

*ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ*



# КОРОНАВИРУСТАН ҠАСЫП...

## талпан, сысҡан ҡорбаны булма!

**Республика Башлығы Радий Хәбиров 10 апрелдән баҡсаларға, дачаларға барырға рөхсәт итеүен үҙҙәренең участкалары бар кеше шатланып ҡабул иткәндер, моғайын. Бигерәк тә ҡала фатирында йәшәүселәр. Сөнки шәхси өйҙәре булыусылар үҙ территорияһына ҡасан теләй, шунда сығып әйләнә ала, ә бына ҡалала йортонан сығыу менән йәмәғәт урынына барып эләгәһең.**

Әммә был хәүефле заманда артыҡ ҡыуанып, хәүефһеҙлек саралары хаҡында ла онотоп китергә ярамай. Юҡһа, бүренән ҡасып, айыуға барып юлыҡҡан кеүек, коронавирустан ҡасып, сысҡан биҙгәге, талпан энцефалиты кеүек сирҙәргә барып ҡабырға мөмкин. Ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив видеоконференция форматындағы кәңәшмәһендә тап ошо мәсьәләләргә иғтибар йүнәлтелде. Был хаҡта "Республика дезинфекция үҙәге" дәүләт бюджет һаулыҡ һаҡлау учреждениеһының баш табибы Павел Молчанов сығыш яһаны.

Мәғлүм булыуынса, Өфөлә генә түгел, тотош республика буйынса дератизация, дезинсекция һәм дезинфекция эштәрен башҡарыу буйынса тап берҙән-бер ошо ойошма яуаплы булып тора. Быйыл ҡала территорияһында улар тарафынан талпандарҙан - 555, серәкәйҙәрҙән - 497, кимереүселәрҙән 10400 гектар майҙан эшкәртеләсәк. Профилактика эштәре ғәмәлдәге санитар ҡануниәткә ярашлы, яңы ҡорамалдар һәм халыҡ өсөн зыянһыҙ булған заманса препараттар ҡулланып башҡарыла һәм уның һөҙөмтәлелеген Үҙәк белгестәре тикшерә. Талпанға һәм кимереүселәргә ҡаршы профилактик эштәр 21 апрелдән башланып, 31 майҙа тамамланырға тейеш.

Был мәсьәләгә лә етди ҡарарға һәм һаҡ булырға кәрәк, сөнки ул илдә таралған коронавирус сире фонында тағы ла ауырыраҡ эҙемтәләргә килтереүе мөмкин. Бөгөн ҡалала коронавирус таралмаһын өсөн бик күп һаҡланыу саралары күрелә, шул иҫәптән сит илдәрҙән, Мәскәү, Санкт-Петербург һ.б. кеүек Рәсәйҙең хәүеф төбәге исемлегендә торған территорияларҙан ҡайтҡан граждандар тикшерелә, хәҙер Ғ. Ҡыуатов исемендәге Республика клиник дауаханаһында ятып сыҡҡан 1688 кеше лә контролгә алынған.

Шулай уҡ территорияны патрулләү мәсьәләһенә лә етди иғтибар бирелә. Оло йәштәгеләргә һәм балаларға билдәле ваҡыттарҙа урамға сығыу тыйылһа ла, 14 апрелгә ҡарата ошо ике категорияға ҡараған 7 меңдән ашыу граждандың талаптарҙы үтәмәүе асыҡланған. Бында шуны ла билдәләп китеү зарур: быға тиклем ундай хоҡуҡҡа эйә булмаһалар, 12 апрелдән Эске эштәр органдары, Ғәҙәттән тыш хәлдәр буйынса министрлыҡ, Росгвардия һәм башҡа структураларҙың хеҙмәткәрҙәре, административ хоҡуҡ боҙоуҙар тураһында протокол төҙөү хоҡуғына эйә булды. Тимәк, әгәр ҡуйылған талаптарҙы үтәргә теләмәйһегеҙ икән, штраф түләргә тура киләсәк. Ә һеҙгә ундай проблемалар кәрәкме?

**Земфира ХӘБИРОВА.**

## ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Аллергия

❖ Сәғәт сәскәһе, йәки русса "гвоздика дельтовидная" үләнен аллергияны дауалағанда файҙаланырға була. Унан әҙерләнгән сәй аллергия билгеләрен бөтөрә һәм шешеү процесынан булған ауыртыуҙы баҫа. Бер балғалаҡ ваҡланған сәғәт сәскәһенә бер стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 40-50 минут бешерергә. Көнөнә өс тапҡыр икешәр ҡалаҡ эсергә.

❖ Әҫпе ҡалҡҡанда, тән ҡысыһа бәпембә һәм дегәнәк тамыры ярҙам итә. Дауаны әҙерләү өсөн бер тигеҙ миҡдарҙа бәпембә һәм дегәнәк тамырын онтап ҡушырға һәм 1,5 стакан һыуыҡ һыу ҡойоп, төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк талғын утта 10 минут ҡайнатырға һәм һөҙөргә. Яртышар стакан төнәтмәне көндөҙ өс тапҡыр һәм төнгөлөккә бер тапҡыр эсергә. Уның менән әҫпе сыҡҡан урындарҙы һөртөргә лә була.

❖ Егерме йылдан ашыу аллергиянан интеккән кешене лә ҡысыныуҙан, күпертке сығыуҙан арындырған ябай рецепт: ҡайын япрағын ҡайнар һыуҙа бешереп, сәй урынына күп итеп эсергә. Был сәй ярҙамында бер аҙнанан хәл яҡшыра.

❖ Яҙ башында, кесерткән ҡалҡынып япраҡ яра ғына башлаған мәлдә һабағы менән өҙөп алып, яҡшылап йыуырға һәм ваҡ ҡына итеп турарға. Һуты сыҡһын өсөн саҡ ҡына иҙергә. Бер литрлыҡ банкаға һалырға, ләкин тығыҙлап тыҡмаҫҡа. Өҫтөнән ҡайнатып һыуытылған һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк көн дауамында күпме теләйһегеҙ, шунса эсергә. Был рәүешле дауаланыу эсәктәргә яҡшы тәьҫир итә, ҡанды аллергендарҙан таҙарта һәм нервы системаһын тынысландыра.

❖ Саңға аллергия булғанда һарыгүҙ (золототысячник) - 3 өлөш, бәпембә тамыры - 2 өлөш, кукуруздың емешлек ауыҙы, ромашка сәскәһе һәм баҫыу ҡырҡбыуынын - 1-әр өлөш алырға. Бөтә үләндәрҙе лә яҡшылап бутарға һәм ваҡларға, бер ҡалағына һыу ҡойоп, ҡайнағансы утта тоторға. Шунан йылыға төрөп, 3-4 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Сирек стакан күләмендә көнөнә 3-4 тапҡыр эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

***✓ Мәктәптә дистанцион уҡытыу ойошҡан ғына башланып китте. Интернет көслө заманда уҡытыусыларыбыҙ ҙа балаларҙы каникул, карантин мәлендә төрлө эштәр ебәреп алдан өйрәткәйне. Шуға артыҡ ауырлығы һиҙелмәне.***

ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!

# БАШҠОРТ НАҒЫШЫ

Баймаҡ, Йылайыр һәм Хәйбулла райондары территорияһында киң таралған ғәҙәт - кейемде мәрйен менән нағышлау, сәнғәт кимәленә еткерелгән. Йөн һәм ебәк ептәр менән ҡайығандағы кеүек үк сюжеттар ҡулланылған: нурлы йондоҙҙар, уртаһына аҡыҡ ҡуйылған мәрйен ҡояштар, суҡтар йәки көмөш сулпылар менән тамамланған өсмөйөштәр.

Һәр тиҫтә йыл үтеү менән XX быуатта кейемде ҡайыу ғәҙәте юғалтыла барған. Үткән быуаттың уртаһында көньяҡ-көнсығыш ауылдарында уны ни бары ҡыҙ балалар кейемендә генә осратып булған. Ғәҙәттә, камзулдарҙың арҡа тирәһенә һәм салғый буйҙарына сиккәндәр. Орнамент нескә һабаҡтар һәм үренделәрҙән торған. Төҫлө йөйҙәр (ябай тамбур) сәйлән, быяла мунсаҡ, сәсәк, тупсыҡтар менән аралашып килгән. Өлкәнерәк ҡыҙҙарҙың һәм ҡатындарҙың камзулдары күп итеп тәңкә һәм көмөш биҙәүестәр баҫылғас, ауырая барғандар. Әбйәлил районының төньяҡ территорияһында һәм Учалы районының көньяғында камзул итәктәренә ике рәт йәки кәкерсәк (зигзаг) формалаштырып тәңкәләр тегелгән. Йышыраҡ тәңкәләрҙең ике-өсәүһен бергә ҡушып, айырым-айырым баҫҡандар. Унан тыш, сулпы һәм көмбәҙҙәр тегелгән.

Көньяҡ-көнсығыш башҡорттарының зауыҡлы өҫ кейеме боронғо төрки халыҡтары кейемдәренә хас үҙенсәлектәрҙе сағылдыра. Иң боронғо халат төрө - буҫтау сәкмән. "Сәкмән" төрки телдәрҙән ингән һүҙ, ул Көнсығыш Европа, Себерҙең көньяғында, Урта Азия, Кавказ территорияһында йәшәгән халыҡтарҙа төрлөсә яңғырай. Өйҙә әҙерләнгән (тула) йәки һатып алынған буҫтауҙан тегелгән кейем киң билдәле булған, әммә һәр ваҡыт байрам кейеме сифатында ғына ҡулланылмаған.



*Ебәк еп һәм быяла мунсаҡ менән нағышланған балалар камзулы (БР, Әбйәлил районы, Байым ауылы).*



*Әбйәлил тарих-крайҙы өйрәнеү музейында һаҡланған камзул.*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаҫ һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

ӘЙТӘГҮР!

# МӘКТӘПТЕ ҺАҒЫНАЛАР...

**(Башы 5-се биттә).**

***Римма АҠМАНОВА, Сибай ҡалаһы, күп балалы әсә:*** Өлкәнебеҙ һәм уртансыбыҙ ҡаланың Р. Өмөтбаев исемендәге башҡорт лицейында 11-се һәм 3-сө синыфта уҡый. Бәләкәйебеҙ "Ҡурай" балалар баҡсаһына йөрөй ине. Хәҙер өсөһө лә өйҙә шөғөлләнә. Балалар баҡсаһы ла дистанцион белем биреүгә күсте, унан да өйгә эш бирелә. Шиғыр ятлайбыҙ, биремдәр эшләйбеҙ. Конкурстарға ла әҙерләнәбеҙ. Өйҙә нимә менән шөғөлләнә икәнен фотоға, видеоға төшөрөп һалабыҙ. Мәктәптә дистанцион уҡытыу ойошҡан ғына башланып китте. Интернет көслө заманда уҡытыусыларыбыҙ ҙа балаларҙы каникул, карантин мәлендә төрлө эштәр ебәреп алдан өйрәткәйне. Шуға артыҡ ауырлығы һиҙелмәне. Әлбиттә, төрлө етешһеҙлектәр килеп сыҡты: йә видео ваҡытында асылып өлгөрмәй, йә смсхат оҙаҡ килде, йә порталға инеү ваҡытты алды. Ата-әсәләр менән дә, уҡыусылар менән дә уҡытыусыларҙың әүҙем аңлашып эшләүе был проблемаларҙы бөтөрҙө. Әлегә ситтән тороп уҡыу балаларға ҡыҙыҡ. Тик барыбер мәктәпте һағыналар.

Ҡайһы ваҡыт телефондан ата-әсәләрҙең әрләшеп яҙҙырған тауышлы хәбәрҙәрен һалалар. Бындай хәлдәр ҡала мәктәптәрендә йәки ҙур ҡалаларҙа ғыналыр ул, тип уйлайым. Сөнки беҙҙә, мәҫәлән, ата-әсәләр тыныс, хатта аңлап ҡарай. Синыф етәксеһенең йылдар дауамында тырышып, аңлашып эшләүе һөҙөмтәһелер был. Икенсе яҡтан, башҡорт мәктәптәрендә һәм башҡорт синыфтарында тәртип ныҡ яҡшы, тигәндәрен гел ишетергә тура килә ине, хатта рустар балаларын шуның өсөн генә башҡорт класына бирергә тырыша, тиҙәр ине. Бәлки, ысынлап та шулайҙыр. Балаларым тик башҡорттар йыйылған, башҡорт мөхитле белем усағында уҡый. Һәм был минең өсөн оло ғорурлыҡ.

***Альбина НАЗАРОВА, Өфө ҡалаһының З. Биишева исемендәге 140-сы Башҡорт гимназияһы башланғыс синыф уҡытыусыһы:*** Быйыл мин 4-се класты уҡытам, барлығы 28 бала. Хәҙер ҡулайлашып киләбеҙ инде: ике дәресте генә онлайн итеп, ҡалғандарынан электрон кейстар ебәрәм. Был осраҡта бөтә ауырлыҡ уҡытыусыға төшә инде, онлайн дәрес итеп үткәреүгә ныҡлы ышанып булмай, ҡапыл ғына бәйләнеш өҙөлөү ихтималлығын да күҙ уңында тоторға кәрәк. Шуға бер үк дәрес темаһы буйынса онлайн үткәреү өсөн дә, ул килеп сыҡмаһа, электрон кейстар ҙа ебәрергә әҙерләнәм. Бөтәһе лә былай әүҙем генә дәрестәргә ҡушыла, берәһе лә ситтә тороп ҡалмай. Бының өсөн баштан уҡ ҡағыҙҙа яҙып алдыҡ, теүәл шуны үтәйбеҙ тип һөйләштек. Был йәһәттән атай-әсәйҙәрҙең ярҙамы ҙур, эшебеҙҙе аңлап ҡабул итәләр. Көн һайын бөтәһенә үк өлгөрөп етмәһәм дә, ҡайһы берҙәренең ата-әсәләренән шылтыратып дәрес һәм өйгә эштең үтәлеше, бала нисек ҡабул итеүе, эште уңайлаштырыу өсөн нимәгә иғтибар итеү тураһында һорашам.

Шуныһы ҡыҙыҡ, быға тиклем дә төрлө мәғлүмәт сығанаҡтарында киләсәктә балаларға уҡытыусы кәрәк булмаясаҡ, улар заман технологияларын ҡулланып, үҙҙәре белем аласаҡ, йәки цифрлы технология педагогтарҙы алмаштырасаҡ, тигәнерәк фекерҙәр осрап ҡуя торғайны. Әле бер аҙна белем алыу осоронда, киреһенсә, тере аралашыуға бер нәмә лә етмәүен тойҙоҡ. Класта дәрес ваҡытында кем нисек эшләүен, аңлау-аңламауын күреп тиҙ генә ярҙам итеп ебәреү, уҡыусының иғтибарын тик дәрескә генә йүнәлтеү йәһәтенән беҙҙең күнегелгән эш ысулы отошло барыбер.

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**14 апрелдә Өфө ҡала хакимиәтенең Мәғариф идаралығы етәксеһе Елена Хаффазова ҡатнашлығында мәктәп уҡыусыларына дистанцион белем биреүҙең тәүге аҙнаһына йомғаҡ яһауға һәм балалар баҡсалары нисек эшләүенә арналған брифинг уҙғарылды. Елена Хаффазова әйтеүенсә, әлеге көндә баш ҡалала дистанцион уҡытыу буйынса эштәр көйлө бара, уҡыуҙың тәүге ике аҙнаһында уҡыусыларға "икеле" билдәһен ҡуймаҫҡа кәңәш ителгән. Атай-әсәйҙәр һорауына ярашлы, даими рәүештә психологик ярҙам күрһәтеү эшенә иғтибар бүленәсәк, был маҡсатта "Вся Уфа" телеканалы педагог-психолог ҡатнашлығында тапшырыуҙар әҙерләй. Күп һорауҙар экстернат, йәғни уҡыу йылын алдан тамамлау тураһында бирелгән, ләкин баш ҡала мәғарифы белгестәре быны кәңәш итмәүен белдерҙе. Ата-әсәләрҙе ҡыҙыҡһындырған тағы бер һорау - туҡланыу өсөн түләнгән аҡса мәсьәләһе. Дистанцион уҡытыу ҡасанға тиклем һуҙылыуы анығ билдәле булғас, туҡланыуға түләнгән аҡсаның бала мәктәпкә йөрөмәгән осорҙағыһын оператор кире ҡайтарасаҡ. Бының өсөн ата-әсәләргә ғариза яҙырға кәрәк була.**

ТЕМАНЫ ДАУАМ ИТЕП...

# ҠУЛ ЕТМӘГӘН ЭШТӘР ЭШЛӘНДЕ...




***Гүзәл СИТДИҠОВА, Өфө ҡалаһы:*** Мин 13 йыл өйҙә ултырам инде, шуға сирҙән ҡурсаланыу мөҙҙәтенә күнегәһе түгел тиерлек. Әлбиттә, ҡалаға сығыу, сараларҙа ҡатнашыу тураһында һүҙ ҙә бармай - аралашыу тотош телефон йә социаль селтәрҙәр аша ғына бара. Иң ауыры - балалар, ейәндәр менән күнегелгәнсә йәкшәмбе мунсаларына йыйылып, бергәләп сәйләп ултыра алмау, кинйәбикә ейәнсәребеҙҙе тотоп һөйә алмау. Үҙ өйөбөҙҙә йәшәйбеҙ, ихатаға инәләр, битлек кейеп кенә баҡса буйлап йөрөтәбеҙ. Ике йәше менән генә барған балаға олатай-өләсәһенең ҡапыл ғына шулайға әйләнеүе сәйерҙер инде - шундай моңһоу ғына ҡайтып китә.

Хәләлем йорт эсендә, тышында ошоғаса ҡулы етмәй торған эштәрҙе теүәлләү менән мәшғүл, баҡсала ла миҙгел асыла башланы инде. Кәрәк булһа, кәрәк-яраҡты балалар, ейәндәр килтерә, әммә икмәкте өйҙә үҙем бешерәм, уларға ла биреп ҡайтарам. Википедияла яҙышҡан кешеләр өсөн, киреһенсә, ҡолас ташлап яҙышырға мөмкинлек тыуҙы тип әйтергә булалыр. Фейсбукта Викиөләсәйҙәр төркөмөндә яҙышабыҙ, сит ил викиөләсәйҙәренең яҙмаларын да ҡуябыҙ - улар аша Башҡортостаныбыҙҙы танытабыҙ, уларҙағы хәлдәрҙе лә күҙәтәбеҙ. Кемдер был вирустың килеп сығыуында ғәйеплене эҙләй, кемдер ышанмай ҡарай ине, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, Өфөләге хәлдәр ышанырға мәжбүр итә шул. Үҙемдекеләргә былай тинем: "Беҙҙең эш был ысынмы-юҡмы тип ҡаҙынып ултырыу түгел, беҙҙең бурыс - мөмкин тиклем был сирҙе арабыҙға индермәү сараһы күреү!" Ҡурҡыуға төшөп китеү кәрәкмәй - бары гигиена ҡағиҙәләрен үтәргә кәрәк. Унан, сир йоҡторғандарҙың күпселеге (80 процент тип тә әйтәләр) өҙлөкмәй тип тынысландыралар.

***Банат ЯУБАҪАРОВА, Ҡырмыҫҡалы районы:*** Ҡурсаланыу осоронда быға тиклем ҡул һәм ваҡыт етмәгән эштәр менән булышабыҙ: бабайым менән ярышып балаларыбыҙ, яҡындарыбыҙ өсөн үҙебеҙҙең тормошобоҙ тураһындағы хәтирәләребеҙҙе яҙабыҙ, уларҙы мөхәррирләйбеҙ, шәжәрәләребеҙҙе тултырабыҙ. Атай-әсәйҙәребеҙҙең һөйләгәндәренән иҫтә ҡалғандарҙы һәм аудиояҙмаларҙа һаҡланғандарын үҙебеҙҙең хәтирәләргә ҡыҫтырып ҡуябыҙ. Бер күҙ компьютерҙа булһа, икенсеһе фотоальбомдарҙа: уларҙы ла хронологик тәртиптә һаҡларға ҡуябыҙ. Шул яҙыу-һыҙыуҙан ял иткән саҡта ҡулдарҙа дини китап: үҙебеҙгә, балаларыбыҙға, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, илдәге халыҡҡа был афәттән һау сығыуыбыҙҙы теләйбеҙ! Магазинға ла сыҡмайбыҙ, сөнки һыуытҡыс ларыбыҙға ҡурсаланыуға тиклем бик күп аҙыҡ һатып алып һалғайныҡ, шуларҙы ҡулланабыҙ, ә икмәкте ҡомалаҡ әсеткеһе менән өйҙә бешерәм. Балаларым барыһы ла ситтә, көнө-төнө Хоҙайҙан уларға һаулыҡ-бәхет теләп ултырам. Ҡасабабыҙҙағы бер аҙыҡ магазинының хужаһы 65 йәштән өлкәндәрҙең өйҙәренә ярҙам йөҙөнән аҙыҡ һатырға килтерә, рәхмәт инде уға, Бикбаев Артур тигән балаға! Беҙ, ҡарттар, өйҙә ултырабыҙ ҙа ул, тик бына йәнде көйҙөргәне урамда балаларҙың велосипедта йөрөгәне, урамда күмәкләшеп күренеүҙәре. Теге вирусологтар әйткәненсә, бәлки, балалар еңел кисерер ҙә ул вирусты, тик бына ололарға ҙур проблема тыуҙырмаҫмы улар, етмәһә, районда бер осраҡ асыҡланыуы ла билдәле... Борсолорға урын бар... Телевизорҙы бик һирәк ҡарарға тырышабыҙ, сөнки уны асһаң, ҡайһы каналын ғына алма, барыһы ла шул вирус тураһындағы статистика менән тулы, күңелде борсоу баҫа, ләкин үҙ өйөбөҙ - үҙ ҡәлғәбеҙ, тип, яҙмышты Хоҙай ҡулына тапшырып ултырабыҙ, көн һайын ишекте һәм тотҡаларҙы дезинфекциялап. Башта һәр өс көн һайын подъезыбыҙҙа торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре санитар эшкәртеү үткәрә ине, әммә был көндәрҙә нишләптер хлорка еҫе һиҙелмәй, әллә средстволары бөттө инде...

"Киске Өфө" гәзитенең махсус бите

8

# Ғаиләм-ҡәлғәм

18-24 апрель (алағарай) 2020 йыл №16 (902)

УЙЛЫҒА -УЙ

# АТАҢ АТЛЫ БУЛМАҺА ЛА,

## инәң затлы булһын

**Үҫкән ваҡытта, йәш саҡта йыш ҡына фекерҙәрем әсәйемдеке менән тура килмәне. Унның уй-теләктәрен артыҡ уртаҡлашманым, үҙемсә уйланым һәм хәл иттем, хатта һүҙен дә баһалап етмәгәнмендер әле. Миңә шулай һымаҡ тойолдо. Үҙ фекерем, еңмеш кенә холҡком шундай уйға юлыҡтырғандыр инде.**



Ә бөгөн иһә уйым үҙгәргән. Ҡапыл ғына, бер бөгөн генә килеп түгел, ә йәшәй-йәшәй, тормошто өйрәнә-өйрәнә мин шундай хәҡикәткә килдем: әсәләрҙең көсө шундай ҙур һәм ҡеҙрәтле икән. Балаһы алдындағы көсө. Әсә балаһының донъяға ҡарашын, кешеләргә мөнәсәбәтен һәм тағы ла бик күп төшөнсәләрҙе бар итә һәм формалаштыра. Балаға ябай тел менән аңлатып ҡына ла бөтә алмаҫлыҡ күп нәмә, күп аң әсә тарафынан һалына икән. Ҡасандыр мин әсәйемдең һүҙен артыҡ һанға һуҡмаған һымаҡ булһам, әле уның шул саҡтағы ҡарашы аша ҡарайым, уның үлсәме менән баһалайым һәм хатта ҡайһы бер кешеләрҙе лә уның ҡасандыр әйткән һүҙҙәре буйынса ҡабул итәм йәки итмәйем.

Миҫалдар килтерәм. Әсәйем үҙенең санитаркаларын яратты. Беренсеһе мин бала саҡта булған Нәғимә инәй, икенсеһе үҫеп сығып киткән саҡтағы, үҙе пенсияғаса бергә эшләгән Мәрйәм апай булды. Тәүгеһе әсәйемдән күпкә оло, икенсеһе күпкә йәш ине. Ҡатындарҙың икеһен дә яҡындан белмәйем, улар беҙгә килеп йөрөгән йәки аралашҡан кешеләр булманы, бары ауылдаштар ғына. Әммә әсәйемдең шулар хаҡындағы яҡшы һүҙен ишетеп үҫкәс, нисектер, күңелемдә хөрмәт тойғоһо тамыр йәйеп өлгөргән. Әле килеп улар хаҡында кем генә, нимә генә тиһә лә, мин тыңламаҫ һәм ҡабул итмәҫ инем. Сөнки миңә бала саҡтан әсәйем ул апайҙар хаҡында яҡшы фекер һеңдергән. Шулай уҡ бер килен хаҡында ике ауыҙ һүҙ менән генә "Эй аҡыллы ҡыҙыҡай икән" тип әйткәйне, шул килендә әллә нисә йылдар үткәс тәүгә күрҙем. Ҡоҙоҡ буйында осраҡлы ғына тап булыштыҡ та, ул "Һеҙҙең әсәйегеҙгә ингеләп йөрөй торғайным", тип һүҙ ҡатты. Ә мин уны әсәйемдең шул бер баһаһынан ғына ла яҡын күреп өлгөргәйнем. "Әсәйем маҡтаған киленһең икән", тинем. Ҡояш булып балҡып китте.

Шундай уҡ миҫалдан сығып, әсәйемдең "Ул мине яратмай" йәки "Эй тар күңелле кеше лә инде" тип әйтеүе лә йөрәгемдә ул әҙәмдәргә ҡарата кире тойғолар уятҡан. Унан һуң, әсәйем насар тип иҫәпләгән гәҙәттәрҙе, эштәрҙе, хәбәрҙәрҙе лә эске донъям ҡабул итмәй. Әсәйем эсмәне һәм эскеселәрҙе лә, эскелекте лә яратманы. Яратманы ғына түгел, ене кеүек күрҙе. Шуға, бөгөн әлеге "йәшел йылан" ҡолдары менән осрашырға тура килгәндә намыҫымды бесәй тырнай. "Былай дөрөҫ түгел, дөрөҫ түгел. Әсәкәйем, ғәфү ит", тип өҙгәләйем үҙемде эстән. Тағы ла ул ҡатын-ҡыҙҙың ире алдындағы тоғролоғон юғары баһаланы, абортҡа ҡаршы булды, яҙмыш ауырлыҡтары алдында бөлйерәп төшкәндәрҙе яратманы (теҙһән, күп улар). Ғүмер буйы эсеп-боларып йәшәгән атайыма ҡарата ла нәфрәт уятманы. Хатта ул нәфрәт уянырға тип баш ҡалҡытҡанда ла "ул булмаһа, һин булмаҫ инең", тип бармаҡ янап йә атайҙың яҡшы сифаттарын һанап күрһәтеп, хистәрҙе яҙып ебәрҙе. Атайҙы беҙ, уның балалары, әсәй һүҙе буйынса ғына ҡабул иттек. Күҙ алдыбыҙҙа нисек кенә булмаһын, әсәйебеҙ уны хөрмәт иттерҙе, атай итеп буйһондорҙо һәм... яраттырҙы. Бөгөн мин, үҙем дә аңғармаҫтан, әсәйем уҡыған китаптарҙы, киноларҙы ҡатҡат уҡыйым, ҡарайым. Малышеваның "Здоровье" тапшыуына (хәҙер ул "Жить здорово" тип атала) барып юлыҡһам да һүндереп ҡуя алмайым, сөнки был әсәйемдең яратҡан тапшырыуы ине... Былар ҙа миңә һеңгән. Асылда, минең рухи булмышымды әсәйем формалаштырған да ҡуйған икән. Быуа шундай асыш яһаным.

Төрөктөн "Великолепный век" тигән сериалын яратып ҡараным. Шунда Сөләймән Солтандың ике ҡатынында тәрбиәләнгән балаларҙың тормошта эшләгән хаталары һәм уңыштарын күҙәттем. Беренсе ҡатыны Махидевран иренә үс итеп, көндәшенә дошманлашып, бөтөн шул асыуын балаһына һеңдерҙе лә ҡуйҙы. Ул тик ҡара уйҙар менән генә йәшәне, улына был ситуацияла еңеп сығыу, нисек тә тере ҡалыу юлдарын, алымдарын өйрәтер, уның киләсәген ҡайғыртыр урынға бары бер көнлөк көрәштәр менән йәшәне. Ә икенсе ҡатын Хөррәм хатта иренең беренсе ҡатынын да "хөрмәт итегеҙ" тип киҫәтте балаларына. Бәлки, быларҙы ул ысын күңелдән дә эшләмәгәндер, әммә балаларын ғаилә араһындағы ығы-зығыға, талаш-тартышҡа тыҡманы. Шулай итеп, ике ҡатын бер ата балаларын һәр икеһе үҙҙәренсә формалаштырып үҫтерҙе. Һәм, әлбиттә, икенсе ҡатындың балаһы солтанлыҡты алып ҡалды ла. Әсәһенең дөрөҫ йүнәлеш бирә белеүенән генә еңде ул.

Шәжәрә атай тармағынан ғына ҡаралһа ла, бала тулыһынса әсә тәрбиәһендә, әсә йөгонтоһонда үҫә һәм уның булмышын үҙенә һеңдерә. Бында аптыраулыҡ та түгелдер, әсә ҡарынында яралып, тыуыҙ ай ятып, бөтөн камиллығы шунда етлегеп сыҡҡан бит һуң. Хатта бер яғы менән дә әсәһенә оҡшамаған балалар уның ғәҙәттәрен тота. Ул ниндәй аштар ашатҡан, шуларҙы тәмле күрә, ул нисек мөғәмәлә иткән - дөрөҫ һымаҡ, ул матур күргәндәр оҡшай, ул яманлағандар - дошман, ул маҡтағандар - дуҫ. Көслө характерлы, үҙаллы балалар ҙа әсә йөгонтоһонан азат була алмай. Сөнки ул - әсәй. Ул һиңә ҡарынында уҡ үҙ булмышын һеңдергән, һин уның бер өлөшө, унан бүленгәнһең. Төрки халыҡтарҙа "Атаң атлы булмаһа ла, инәң затлы булһын" тигән мәҡәл йәшәй. Бында һүҙ мал йәки матди мөмкинлектәр хаҡында түгел, ә әсәнең балаһына һалғанының сифаты тураһында. Шунлыҡтан, мин уны улай итеп тәрбиәләмәгәйнем, ни өсөн балам улай булды икән, тип аптыранған әсәләргә иң беренсе үҙен һәм үҙенең йәшәү рәүешен, тормошҡа ҡарашын, кешеләргә мөнәсәбәтен, ғаиләлә ҡорған сәйәсәтен, балаларына талаптарын анализларға кәңәш итер инем. Һәм ни тиклем иртәрәк - шулай яҡшыраҡ. Ошоларҙы аңлағандан һәм ҡабул иткәндән һуң, уйла инде: балаңдың күңеленә ниндәй донъя һалаһың? Һин - әсә, һинең шундай ҡеҙрәтең һәм мөмкинлектәрең ҙур. Һин - бөйөк. Һәм балаңды кеше итеп һин әүәләйһең. Ә һин нисек уйлайһың һуң, уҡыусым?

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА.**

---

ӘЙТӘГҮР!



# БУЙ ЕТМӘҪТӘЙ ИНЕ

**ҺОРАУ: "Һеҙҙең ғаилә, туғандар Өфөнө нисек, ҡасан яуланы?"**

***Азат ЯРМУЛЛИН, тарихсы, йәмәғәт эшмәкәре, Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге Хөкүмәт премияһы лауреаты:*** Өфөлә әсәйемдең бер туған ҡустыһы уҙған быуаттың 70-се йылдарынан уҡ йәшәй ине. Атайымдың апаһының балалары: ике туған ағайым, ике апайым 80-се йылдарҙа баш ҡалала төпләнде. Улар төрлө тармаҡтарҙа эшләне. Әсәйемдең ике туған ағаһы Әхтәм олатай Бикбулатов - Нефть фәнни-тикшеренеү институты хеҙмәткәре булды, Миңлеғәли ағай Нәҙерғолов - өләсәйемдең бер туған ағаһының улы, режиссер һәм актер Азат Нәҙерғолов шулай уҡ беҙҙең нәҫелебеҙ.

Ләкин бер туғандарҙан Өфөнө минең өсөн ағайым, хәҙер инде Рәсәйҙең атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре һәм мәғариф отличнигы, Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәтенең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге һәм Шәйехзада Бабич исемендәге республика йәштәр дәүләт премиялары лауреаты Сәлмән Ярмуллин "асты". 1990 йылда ул Башҡорт дәүләт университетына уҡырға ингәс, ауылға ҡайтҡан мәлдәрендә күңелле студент тормошо тураһында мауыҡтырғыс итеп һөйләй торғайны. Бынан тыш, тап ошо ваҡытта Өфө Башҡортостандың суверенитеты өсөн көрәш үҙәгенә әүерелде бит. Ул саҡтағы иң алдынғы, иң ҡыйыу матбуғат баҫмаһы - "Йәшлек"тең һәр һанын алып уҡып бара торғайным. Өфөләге ошо милли күтәрелеш мөхитенә барып инеү теләге ҙур булды. Шуға күрә лә мотлаҡ Башҡорт дәүләт университетының тарих факультетына уҡырға инергә тигән ниәт тыуҙы.

1993 йылда хыялым тормошҡа ашып, уҡырға килдем һәм студент булып киттем. Әлбиттә, биш йыл эсендә Өфө яратҡан ҡалама әүерелде. Университетты тамамлағас, ҡайҙа барырға, районға ҡайтырғамы, тигән уйҙар булманы. Тик Өфөлә йәшәү теләге генә бар ине. Тап шул йылда, 1998 йылда, Рәсәйҙә дефолт булып, илдә иҡтисади хәл ауырлашып китте. Хатта тәүге йылда торлаҡ, эш урыны табыу ҡыйынлыҡтары булыуға ҡарамаҫтан, Өфөнө ташлап китеү уйы башыма ла инеп сыҡманы. Киреһенсә, тырышып-тырмашып баш ҡалала оло тормош юлын башланым һәм быға бер ҙә үкенмәйем.

Ҡасандыр Өфө беҙҙең өсөн буй етмәҫтәй ҡала булып тойолһа ла, беҙ уны яуланыҡ, артабан балаларыбыҙ яңы үрҙәр яулауҙы дауам итер, сөнки улар бит баш ҡала аҫабалары.

✓ *Гөлиәлә шулай теле, үҙе өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уяттыҡ. Аҙаҡ урыҫлашҡан балалар уйнарға килһә, Фларис уларҙы: "Өйҙә тик башҡортса ғына һөйләшәбеҙ", - тигән шарт менән индерә торғайны.*



**Уларҙың икеһе менән дә бер осорҙа уҡыным: Фларис менән бер мәктәп коридорын тапаһаҡ, Гөлнара менән бер вузда уҡырға, ул ғына ла түгел, бер ни ҡәҙәр бер ятаҡта, күршеләр булып йәшәргә тура килде. Хәҙер иһә - ауылдаштарбыҙ, Өфө районының Шамонин ауылында аралашып йәшәйбеҙ. Флaристар ғаиләһендә өс малай үҫһә, Гөлнараларҙа - ҡыҙҙар. Шуға ла уларҙың ғаиләһендә һәр нәмә баштан уҡ үҙ урынын алған кеүек тойола миңә: ир-ат бурысы һәм эше бөгөн "Роснефть"тә эшләүсе Фларис елкәһендә ятһа, ҡул эштәренә, аш-һыуға оҫта ҡатыны өйҙә зауыҡ тыуҙыра, тәмле аштары менән һыйлай, оҙаҡ йылдар республика матбуғатында эшләп һәм бер нисә китап яҙырға өлгөрөп кенә ҡалмай, иренә яғымлы мөнәсәбәтен дә йәлләмәй. Һөҙөмтәлә баш - баш урынында ҡала, әммә муйын теләгән яҡҡа ла еңел генә борола. Тормош йөгөн ике тиҫтә йылдан ашыу бер йүнәлештә тартһалар ҙа, башҡорттарҙың борондан килгән йолаһын тотоуҙанмы икән, ҡатын-ҡыҙ серләшкәндә ир-ат ҡыҫылманы, ул ғына ла түгел, күҙ менән ҡаш араһында юҡ булды. Шуға ла әңгәмәне өс сәскә кеүек ҡыҙ тәрбиәләүсе МОСТАФИНдар исеменән "Шоңҡар" журналының яуаплы секретары булып эшләүсе Гөлнара менән генә алып барырға тура килде.**

# НИКАХТАРЫ КҮКТӘ



**Никахтар күктә ярала, тиҙәр. Һеҙҙең никах күктә яралғанына ышанаһығыҙмы, ғөмүмән, дәүләттең бер ячейкаһы булған ғаиләгеҙ нисек барлыҡҡа килде?**

- Никахтарҙың күктә яралыуына ла, маңлайыңа ни яҙылған, шуны күрәһең икәнлегенә лә ышанам. Шулай булмаһа, студент сағымда Башҡортостандың бер сигендә ятҡан Баймаҡтан булып, әллә ҡайҙа Салауат районындағы кеше менән уйламағанда тормошомдо бәйләр инемме икән? Тимәк, шулай тейеш булған. Ятаҡта Фларистың ауылдашы менән бер бүлмәлә йәшәнем. Ул ауылдашына килеп йөрөп, шулай танышып киттек.

**Ғаиләне - бәләкәй дәүләт, тиҙәр. Ошо шәхси дәүләтегеҙҙә ролдәр нисек бүленгән, Фларисҡа ҡатын-ҡыҙ батшалығында йәшәү ауыр түгелме, әллә ул үҙен батша кеүек тоямы?**

- Һәр кем үҙ ролендә. Фларистың эшенә миңә нык оҡшамаһа, йә үҙемә кәрәк осраҡта ғына ҡыҫылам. Буйы менән өйрәтеп, ҡыҫтырылып, маҙаһына тейеп йөрөмәҫ өсөн алдан уҡ миңә нимә, нисек кәрәк икәнен аңлатып ҡуям. Мәҫәлән, өй һалғанда шулай булды, экскурсияға ғына килеп китә инем. Мин уға ышаныс белдергәс, айырыуса тырышҡандыр кеүек тойола. Әммә обой, мебель кеүек нәмәләрҙе һайлауҙы уға ышанып тапшырырға ҡурҡам. Әгәр минең күңелгә ятмаған нәмә һайлаһа, аҙаҡ үҙенең башын ҡатырам бит инде. Беҙҙең был тәңгәлдә зауыҡтар төрлө. Шулай булһа ла, ул сифатына нык ҡарай. Ә мин ҡайһы бер осраҡта "осһоҙ" тип хаҡына алданып та ҡуям. Сифатлы, нык булһын тип тырышыуы ҡайһы ваҡыт оҡшамай ҙа китә. Ҡатын-ҡыҙға тиҙ кәрәк бит инде. Ә ул әллә күпме уйлай, ҡат-ҡат үлсәй, әйләндерә-тулғандыра. Ҡайһы ваҡыт шулай эшләгәненә үҙен-үҙе әрләп тә йөрөй. Ҡыярға ваҡытлыса тип эшләгән япмаһын һүткәндә, бағаналарҙы һурып алырға тура килгәндә: "Мәңге торор тип уйлағанмындыр инде", - тип үҙен әрләп-әрләп ала ине. Ғаиләлә ир затынан яңғыҙы булһа ла ҡыҙҙарынан, минән ирҙәр эшен бик эшләтмәй. Йә үҙе осона сыға, йә берәйһен яллайбыҙ. Бер туған ағаһының Өфөлә йәшәгән улдарының ярҙамы ҙур, ҙурыраҡ эш булһа, улар килеп ярҙамлаша.

**Бөгөн шәхес формалашыуҙа төрлө факторҙар йоғонто яһай, тиһәләр ҙә, барыбер ҙә, тәү сиратта, ғаиләнең роле ҙурыраҡтыр. Һеҙ ҡыҙҙарығыҙҙы тәрбиәләгәндә ниндәй алымдар ҡулландығыҙ, олатай-өләсәй тәрбиәһенә, халыҡ педагогикаһына йыш мөрәжәғәт итәһегеҙме?**

- Үҙебеҙсә, үҙебеҙ белгәнсә, бәлки, ниндәйҙер кимәлдә, заманса тәрбиәләгәнбеҙҙер. Нигеҙҙә, психологик китаптарға һәм үҙемдең интуицияға таянып. Шәхесте үҫтереүсе китаптар ҙа күп бит хәҙер. Шулар буйынса баланың психологияһын өйрәнерәгә тырыштым. Күберәген үҙҙәренең һәм дуҫтарының хатаһында өйрәткәнбеҙҙер. Балалар өсөн яҙыуымдың бер сәбәбе лә ошонда яталыр әле ул. Һәм тағы, ҡыҙыбыҙ Лилиә бер саҡ:"Һеҙ нимә эшләйһегеҙ, шуны эшләйбеҙ инде", - тигәндән һуң, балаларҙан алда үҙебеҙҙе тәрбиәләргә тырыштыҡ. Үҙебеҙ өлгө була алмаһаҡ, уларҙан ниндәй тәртип талап итмәк кәрәк. Бөтә нәмә иң тәүҙә үҙеңдән башлана. Нимә эшләһәк тә күрһәтеп, әйтеп башҡарҙыҡ, бергә алып йөрөнөк. Ауылда саҡта өләсәләренә нык ярҙам итәләр. Бесән эшләргә лә, картуф үҫтерергә лә (сәсеү, алыу, тәпкеләү, күмеү), мал алып ҡайтыу, ҡош-ҡорт ҡарау ҙа улар өҫтөндә булды. Беҙ ярҙам итергә тейеш, тип аңлап эшләнеләр, ә кемдер эшлә, тип мәжбүр иткән өсөн түгел.

**Ҡала балалары булһалар ҙа, ҡыҙҙарығыҙ барыһы ла башҡортса ла матур итеп һөйләшә. Белеүемсә, заманында балалар баҡсаһында эшләгәндә, башҡорт телен өйрәтеүҙең үҙ методикаһын да булдырғайның. Уны ғаиләлә ҡулландығыҙмы, әллә баланы башҡортса өйрәтеүҙең һеҙҙең ғаиләгә генә хас үҙенең алымдары бармы?**

- Башҡорт дәүләт университетының башҡорт филологияһы һәм журналистика факультетының башҡорт бүлеген тамамлағандан һуң мәктәптә эшләнем. Американан килгән ғаиләләр менән танышып, уларға башҡорт телен үҙ алымым менән өйрәткәндә "Шоңҡар" журналында эшләп йөрөй инем инде.

Балаларҙы башҡортсаға махсус өйрәтеп ултырманыҡ. Эйе, күптәр баланың теле русса асылыуына хатта ҡыуанып риза, башҡортса аҙаҡ өйрәтербеҙ әле, тигәндәрен ишеткәнем бар. Баландың теле русса асыла икән, һуңынан уны башҡортсаға өйрәтеү мөмкин булмаған эш. Ул ваҡытта атай-әсәй үҙенә артыҡ проблема ғына өҫтәй. Махсус өйрәтмәһәк тә, бер ни тиклем тыйыуҙар, сикләүҙәр булды инде. Ҡалала йәшәгәс, урыҫ балалары менән уйнағас, дөрөҫөрәге, урыҫлашҡан, теле русса асылған балалар менән уйнағас, ул хәүеф гел һағалаңы. "Өйҙә башҡортса һөйләшәбеҙ!" тигән талапты онотторманыҡ. Бер ваҡыт уртансы ҡыҙыбыҙ Гөлиә илап ҡайтты. "Минән бөтәһе лә башҡорт тип көлә. Минең башҡорт булғым килмәй. Миңә бынан һуң Света тип әйтегеҙ!", - ти был. Шунда үҙебеҙсә матур итеп аңлаттыҡ: "Һинән көлһәләр ҙә, улар һинең кеүек гимназияла түгел (шуға микән, Гөлиә үҙебеҙҙең эргәләге бөтәһе лә уҡыған мәктәптә уҡыуҙан уттан ҡурҡҡан кеүек ҡурҡа ине. Ҡурҡытыу алымы булараҡ та ҡулланғаныбыҙҙы иҫләйем хатта), ә ябай мәктәптә уҡый. Һин 4 йәшең тулыуға гимнастика менән шөғөлләнә башланың, матур бейейһең, ә улар яҡшылап түңәрәктәргә лә йөрөмәй. Рус телен дә, үҙеңдең туған телеңде лә беләһең... Шулай булғас, уларға һинең кеүек башҡорт булырға кәрәк әле тәүҙә..." Гөлиәлә шулай теле, үҙе өсөн ғорурлыҡ тойғоһо уяттыҡ. Аҙаҡ урыҫлашҡан балалар уйнарға килһә, Фларис уларҙы: "Өйҙә тик башҡортса ғына һөйләшәбеҙ", - тигән шарт менән индерә торғайны. Беҙҙә уйнар өсөн өйҙә ишеткән һүҙҙәрен иҫтәренә төшөрөп, ватып-емереп булһа ла башҡортса һөйләшергә тырыша ине балалар. Ғөмүмән, ҡыҙҙарҙың өсәүһенә лә туған телде белеүҙең ни тиклем яҡшы, мөһим икәнен һеңдерергә тырыштыҡ, ул ғына түгел, урыҫ балаларынан бер башҡа юғарыраҡ тороуҙарын теләнек. Лилиә менән Гөлиә көҙгөләккә ауылдан килеүгә саф башҡортса һөйләшһә, Гүзәлдең, киреһенсә, йәйгеһен теле боҙола. Сөнки көндөҙ - балалар баҡсаһында, аҙаҡ кискә саҡлы күршеләге русса һөйләшкән балалар менән уйнай. Шулай ҙа башҡорт телен белеүе менән башҡа балаларҙан өҫтөн булыуын һиҙеп, ҡыуанып йөрөй. Сәңгелдәккә лә "Тамыр" телеканалы редакторы Зөлфиә Даянова башҡорт телендә матур, таҙа һөйләшкәнгә, фекерен матур итеп әйтә белгәнгә саҡырҙы бит инде. Әле Гөлиә апайы менән Инстаграмда ҡыҙыҡлы, әммә мәғәнәле видеолар төшөрә башланылар. Тик русса. Күптәр, нишләп башҡортса төшөрмәйһегеҙ, тип һорай. Апайының күп интернет дуҫтары башҡортса белмәй, шуға ла русса төшөрөргә мәжбүрҙәр. Ә бына Гүзәлдең Ютуб каналы өсөн саф башҡортса ниндәй видеолар төшөрөү тураһында уйларға кәрәк. Йә йүнле генә кәңәш, идеялар ҙа ишетелгәне юҡ.

Шуға, баламды башҡортса һөйләштерә алмайым, тигәндәргә, был һылтау ғына тиер инем. Тимәк, өйҙә үҙҙәре лә русса һөйләшә. Магазинда бер нисә тапҡыр шундай күренешкә юлыҡҡаным булды: балаһы магазин яңғыратып, ауыҙ тултырып башҡортса һорауҙар бирә, ата-әсәһе русса яуаплай. Үҙ телендә яуап бирергә оялалармы икән? Тимәк, аңлай башлаһа, бала үҙе лә ояла, һөйләшмәй башлаясаҡ. Өлкән ҡыҙыбыҙ Лилиә тәүҙә 20-се гимназияла, һуңынан авиация лицейында уҡыны. Унда күберәген урыҫлашҡан башҡорт, татар балалары уҡый ине. Бигерәк тә шулар башҡорт теленән, башҡорттарҙан көләләр икән. Кәмселектер инде ул. Лилиә яҡшы уҡыны, тәртипле, аҡыллы башҡорттоң вәкиле бит. Уға тел өсөн үкенесле булып киткәндер, күрәһең. "Тыңлап ултырам-ултырам да, минең башҡорт икәнде онотмағыҙ, тип әйтеп ҡуям. Һеҙ шылтыратһағыҙ шуға юрамал ҡысҡырып тороп башҡортса һөйләшәм", - тип һөйләй торғайны. Әлбиттә, ауырыраҡ уҡыған бала булһа, Лилиәгә улар араһында ҡыйынға тура килер ине.

**Әйткәндәй, Лилиә бөгөн Германияла белем ала, Гөлиә - БДУ талибәһе. Балалар үҙ-үҙенә, үҙ көсөнә ышанһын өсөн, ата-әсә нимә эшләргә тейеш: гелән уның теләген үтәргәме, әллә һәр ваҡыт ҡаршы килеп, һынауҙар тыуҙырырғамы; балаға дуҫ һәм кәңәшсе булырғамы, әллә үҙ проблемалары алдында яңғыҙ ҡалдырырғамы? Һеҙ балаларығыҙ өсөн ниндәй тәрбиәсе булдығыҙ?**

- Төрлө ваҡытта төрлөсә булғандыр ул. Ҡайһы берҙә

теләгән дә үтәйһең, һынауҙар тыуҙырырға ла тура килә, дуҫ та булаһың, проблемалары алдында яңғыҙ ҡалдырған осраҡтар ҙа булды. Иң мөһиме, ниндәй осраҡта ла уға ышаныуыбыҙҙы белдерҙек. Махсус тәрбиәләмәнек шикелле. Бая әйтеп үтеүемсә, "Һеҙ нимә эшләйһегеҙ, беҙ шуны эшләйбеҙ, нимә һөйләйһегеҙ, шуны һөйләбеҙ инде", - тип бер әйткәндәренән һуң, аҙымдарҙы һағыраҡ баҫа, һүҙҙәрҙе уйлабыраҡ әйтә башланым шулай ҙа. Лилиә бәләкәй генә сағынан китап уҡырға ятатты. Шуға журналдар күп алдырҙыҡ (уларҙы һаҡлап һалып ҡуйғанмын, хәҙер Гүзәл уҡый), һәр ваҡыт китаптар һатып алдыҡ, аҙаҡ китапхананан ташыны. Аттар яратты. Бер йыл ипподромға йөрөнө. Тәүҙә аттарҙы тәрбиәләйҙәр ине: ашарға һалалар, һыу эсерәләр, аҫтын таҙалайҙар, аҙаҡ үҙҙәре һыбай йөрөйҙәр. Лицейҙа уҡыған саҡта авиация институты студенттары менән атыу түңәрәгенә йөрөнө. Улар араһында йомшаҡ ларға әҙерләп тә булмайҙыр ул. Һүҙҙең генә был тәңгәлдә файҙаһы әҙ. Бәләкәй саҡтарынан өлкән кешегә ҡараған кеүек ҡараныҡ шикелле. Шуға ла уҙаллы булып үҫтеләр.

Әле Гүзәл дә үҙенсәлекле бала. Фларис та өлкән ҡыҙҙарына биреп еткермәгән һөйөүен бәләкәсенә бирергә тырыша. Эштән ҡайтһа, икәүләп мәж киләләр. Журналдар, китаптар уҡыйҙар, төрлө мәсьәләләр сисәләр, өҫтәл уйындары уйнайҙар, туп тибәләр. Ярай әле Фларистың ялҡауы килмәй, тип ҡыуанып ҡуям уларға ҡарап. Сөнки минең хәлем етмәҫ ине көнө буйы бала ыңғайына йөрөргә.

**Ғәҙәттә, ҡыҙҙар - атайҙы, атайҙар ҡыҙҙарҙы нығыраҡ ярата, тиҙәр. Был ысынбарлыҡҡа тап киләме? Һеҙҙең ғаиләлә атай абруйы нисек һаҡлана? Ҡатын-ҡыҙҙар берләшеп, атайға "ҡаршы" булмайҙармы?**

- Уларыбыҙ булмағас, сағыштырып әйтә алмайым. Әммә Фларис ҡыҙҙары өсөн, рағыҙ!". "Әсәйҙәрҙә аҡса булмай бит!" - тип Лилиәнең күҙенә хатта йәштәр төйөлгәйне. Нишләп улай өйрәткәнмендер, үҙем дә аңламайым...

Фларис күп ваҡытын балалары менән үткәрә ине, әле бәләкәйе менән дә шулай. Шулар ыңғайына уйнаһынмы, теләһә нәмәләр төҙөп, яһап бирһенме. Шундай атайҙың, әлбиттә, балалары алдында абруйы ла ҙур булалыр ул. Әле бына быйыл да тау эшләп бирҙе лә, күрше-тирә балалар ҙа рәхәтләнеп шыуҙы. Ҡатын-ҡыҙҙар уға ҡаршы берләшкәнебеҙ юҡ былай. Әммә Лилиә атаһы менән берәй нәмәгә бәхәсләшеп китһә, бер-береһенең алдында сыға алмай сәғәттәр буйы ултыралар. Фларис совет заманында йәшәгән, Лилиә замана балаһы булараҡ, һәр кем үҙ фекерендә ҡала.

**Бар ғаиләләр ҙә үҙенсә бәхетле, бар ғаиләләр ҙә үҙенсә бәхетһеҙ, тиҙәр. Тормош булғас, һауыт-һаба шылтырамай ҙа тормайҙыр,**

# ЯРАЛҒАН...

уйынсыҡтар ҙа тегә ине. Нимә эшләгәләре килә, әгәр уларҙы юҡ икән, ыңғайҙарына торҙоҡ, ярҙам иттек. FLEX программаһында ҡатнашырға булғас та, ҡуй, башыңды ҡатырма, еңеһе эшең бармы, тип әйтә инек, сөнки эстән генә үҙем шулай уйлай инем. Баланың күңелен уйлап, уға терәк булып, иншаларын бергә уйлашып, мәж килдек. Ғәжәп: конкурста еңеп, бер йыл Америкала уҡып ҡайтты. Иң тәүҙә балала үҙ-үҙенә ышаныс тыуҙырыр кәрәктер ул. Гөлиә - Лилиәнең тап киреһе. Китап уҡытыу ғына түгел, ҡыҙыҡҡыҙыҡ әкиәттәрҙе хатта уҡый ҙа алманым, ярамтаны бөтәнләй. Иғтибары гел ситтә булды. Шуға ла спорт гимнастикаһына бирҙек һәм хаталанмағанбыҙ тип уйлайым. Энергияһын файҙаға түкте, исмаһам. Аҙнаһына биш көн йөрөнө. Унан тыш, мәктәптәге бейеү түңәрәгендә ятапып бейене. Бер йәкшәмбеһе буш ине, уныһында ла иртән эргәләге мәктәпкә баскетбол уйнарға сығып китә торғайны. Ятаҡкан шөғөлдәре менән шөғөлләнгәнгә юлдары ла гел асылып торғандыр, тип уйлайым. Ниндәй һәләттәре бар икәнен аңлап алырға тырышам инде.

Нимәгә тотонһалар ҙа үҙҙәре теләп тотондо, береһен ташлап, икенсеһен башлап йөрөмәне. Проблемаларын (әгәр улар үтә етди булмаһа) үҙҙәренән хәл иттерергә тырыша инек. Ситтән күҙәтәбеҙ, кәңәштәребеҙҙе бирәбеҙ. Алдарынан алып улар өсөн эшләп йөрөгәндә хәтерләмәйем. Беҙ күберәген хатта ситтән күҙәтеүсе булғанбыҙҙыр. Шуһыҙ, тормоштағы ысын проблемаысынлап та, үлеп тора. Минең үҙемдең атайым иртә үлгәс, ир кеше - ҡатынына, ҡатын иренә ниндәй мөнәсәбәттә булырға тейешлеген күреп үҫмәнем. Әммә өләсәй менән олатайҙы, бәлки, үрнәк итеп тә алғанмындыр. Ни өсөн тиһәң, бөтә каникулдарҙы уларҙа үткәрә торғайным. Олатай һуғыш ветераны, өләсәйем тылда хеҙмәт иткән, алты балаға үгмер биреп үҫтергәндәр. Бер береһенә "атай", "әсәй" тип өндәшеүҙәре әлек бигерәк мәҙәк тойола торғайны. Хәҙер үҙем дә ҡайһы берҙә, балалар ыңғайынамы, бигерәк тә саҡырырға кәрәк булһа, Фарисҡа "Атай!" тип ҡысҡырам. Өләсәй һәр ваҡыт беренсе урынға олатайҙы ҡуйҙы. Унан алда бер нәмә лә эшләнмәне. Балаларына ла: "Әлләә, атайығыҙ ни әйтер..." - тип тәүҙә уның ризалығы алына ине. Шуға эйәреп микән, мин дә ҡыҙҙарға: "Ана, атайығыҙҙан һорағыҙ", - тием. Үҙем риза булмаған осраҡта бигерәк тә. Шулай тием дә, тиҙ генә Фларисҡа шылтыратып ебәрәм: "Ҡыҙҙар һораһа, риза булып ҡуйма, йә шулай-шулай тип әйт", - тип. Юҡһа, ул ҡыҙҙары ыңғайына торорға ярата.

Бер ваҡытта ла балаларға үҙем аҡса бирмәнем. "Ана, атайығыҙҙан һорағыҙ", - тип уға ебәрә инем. Хатта бер ваҡыт Лилиә ныҡ итеп аптырап, үпкәләгәйне. Аҡсаһыҙыраҡ ваҡыт тура килде микән. Фларистың эштәре хөртөрәк булдымы, Лилиә барып аҡса һорағайны (ҙурайғайны инде), Фларис ҡыҙы ла китте: "Миндә ниндәй аҡса булһын. Эш хаҡын тиненә тиклем әсәйегеҙгә биреп торам. Унан һо-

**аңлашылмаусылыҡтарҙы нисек хәл итәһегеҙ? Бәхетле булыуҙың, ғаиләнде бәхетле итеүҙең сере нимәлә?**

- Беҙҙе Хоҙай үҙе ҡауыштырған бит инде. Белгән нисек һайларға: Фларис кеше менән аралашырға ярата, бер урында ултырып сыҙай алмай, ә мин тыныс, күберәген өйҙә булырға тырышам, кеше менән дә аралашып бармайым. Силәгенә күрә ҡапҡасы кеүекбеҙ, ҡыҫҡаһы. Әммә мин көнсығыш йондоҙнамәһе буйынса үгеҙ (һыйыр), ә һыйыр тулаһа, аттан яман икәне билдәле бит. Утҡа кәрәсин һибеп ебәрһә, тағы ла нығыраҡ тулай алам. Шуға, шундай мәлдәрҙә түҙемлеге етеп өндәшмәй ҡалһа, аралар тиҙ яйлана былай. Бәхетле булыуҙың сере берберенә юл ҡуя белеүҙә, берберенде ихтирам итеүҙә, йән көйөп әйтешеп киткән саҡтарың булһа ла, уны балаларыңа күрһәтмәүҙәлер, моғайын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Яҙмыш кәләмдәре миндә булһа, үҙем яҙыр инем яҙмышты", тигән юлдар күҙ алдына килде ошо әңгәмә барышында. Улар алдында ла төрлө һынауҙар, төрлө кәртәләр булмаған тип уйлайһығыҙмы? Булғандыр, моғайын. Әммә ғаилә тигән үҙ дәүләттәрен улар сабырлыҡ, түҙемлек, ышаныс һәм һөйөү менән нығытып, яҙмыш ҡәләмен парлы ҡулдарҙа тотоп, уны үҙҙәре яҙа. Әгәр ҡабаттан һайлау мөмкинлеге бирелһә лә, үҙҙәренә насип ошо йәрҙәрен барыбер эҙләп табырҙар ине, сөнки никахтар бит күктә яралә...**

Зәйтүнә ӘЙЛЕ
әңгәмәләште.

ТӘРБИӘ МӘКТӘБЕ



# ӨЙРӘТМӘЙЕМ...

## йүнәлеш бирәм

**"Тәртипле, аҡыллы, тәүфиҡле бул, балам" - һәр сәй табынынан һуң йәнһә балаларымдың кескәй генә уңыштары-шатлыҡтарына ҡыуанып әйтелгән ябай ғына ошо һүҙҙәрҙә тәрән мәғәнә, изге фатиха һалынған. Тәрбиә башы - ғаиләлә тигәнде күҙ уңынан ысҡындырмай, халҡыбыҙға хас ғөрөф-ғәҙәт, йолаларҙан да баш тартмай, бихисап ғалим йә бөйөк кешеләрҙең һүҙҙәрен дә ҡолаҡ осона элеп, йөрәк һәм аҡыл ҡушыуы буйынса тәрбиәләйбеҙ балаларыбыҙҙы.**

"Апай, улдарың бигерәк аҡыллы, нисек улай өйрәтәһегеҙ ул?" тип бер һеңлем һорау биргәндә аптырап ҡалғайным. Өйрәтергә ул этме, йә айыу балаһымы, тигәнерәк уйҙар солғанышында ҡалып, һеңлекәшемә кәңәш бирә алмағайным. Йылдар үтә барып, "балалар өйрәтеү" эшенде бер ни тиклем тәжрибә туплағандан, тәрбиә эшенә ниндәйҙер кимәлдә үҙ ҡарашым барлыҡҡа килгәндән һуң былай тип яуаплар инем:

**Беренсе һәм мөһим талап - әсә һөйөүе.** Иң эскерһеҙ, иң бөйөк хистәр ул балаңа ҡарата мөхәббәт. Сабыйың яралғандан алып һинең яратыуыңды, ҡурсыуыңды тойорға тейеш, тип һанайым мин. Арып-талып, бөткөһөҙ тормош мәшәҡәттәре баҫып киткәндә лә, арҡаларынан тапап һөйөп, күкрәгемә ҡыҫып алыу ҙа минең тәрбиә ысулдарының береһе. Ниндәйҙер ярамаған эш ҡылғанмы, йәки, киреһенсә, ҙур уңыштарға өлгәшкәнме, кәйефһеҙме, шатмы ул, ҙурайып, үҙемдән аша ҡарап торамы, әллә буйы саҡ-саҡ етәкләрек булғанмы, һәр ваҡыт үҙемдән ихлас яратыуымды балаларыма еткереүҙән тартынмайым.

"Атайһыҙ ул аҫрама, инәһеҙ ҡыҙ аҫрама" тигән мәҡәлебеҙҙә ниндәй әсе дөрөҫлөк ярылып ята. Ғаилә ҡороп, ике яҡлы тәрбиә алып үҫкән балаларҙың киләсәге өмөтләрәк һәм ныҡлыраҡ тип уйлайым. Эйе, тормоштоң төрлө хәлдәре булыуы бар. Аяуһыҙ яҙмыш ҡанундары ҡәҙерле кешеләребеҙҙе баҡыйлыҡҡа тартып алыуын теҙәтеп тә, кисектереп тә булмай шул. Әммә ләкин, холоҡтарыбыҙ тап килмәне, миңә уның менән ҡыҙыҡ түгел, тип енел генә ҡорған ояларын туҙҙырып, балаларын ике ут уртаһында тәрбиәләп маташыуҙар ҙа күп хәҙер. Юҡҡамы ни, атанан күргән - уҡ юнған, әсәнән күргән - тун бескән, тип тә әйкәндәр. Алма ағасынан алыҫ төшмәй, тип тә өҫтәргә була был мәлдә. Ниндәйерәк киләсәк тәрбиәләрендә белгең килһә, күрәҙәсегә түгел - көҙгөгә күҙ һал. Иҫ китмәле аҡыллы, күнелдәргә үтмәле һүҙҙәр һөйләп ултырып та, ҡылған ҡылыҡтарың бының тап киреһе икән, балаң да тәртипһеҙ тел биҫтәһе буласаҡ. **Шулай итеп, икенсе мөһим талап - атай тәрбиәһе, абруйы һәм дәрәжәһе.** Балаларыма бәләкәйҙән атай һүҙенең ҡеүәтен һәм көсөн, бәҫен еткерергә тырышам. Был, берҙән, уландарымдың да киләсәктә ысын ир-егет, өлгөлө ғаилә башлыҡтары, абруйлы атай буласаҡтарын ҡандарына һеңдерергә тырышыу, икенсенән, минең бер туҡтауһыҙ ятапып ҡына тороуымдан шашып китмәҫ өсөн ҡаты ҡулдар ҙа кәрәклеген аңлағанлыҡтан ҡулланылған алым.

**Өсөнсө мөһим тәрбиә ысулы - хеҙмәт.** Эшләгән - тешләгән, кем эшләмәй - шул ашамай, әҙәмде әҙәм иткән - хеҙмәт, тигәнерәк бик күп аҡыллы әйтемдәргә таянып эш итәбеҙ был осраҡта. Әлбиттә, көндәр буйы таш тумыртып, бил яҙлыҡтырмай эшләтеү тигәнде аңлатмай инде был. Көн режимын уҡыуға, ниндәйҙер хужалыҡ эштәренә, уйынға, йәмғәт эштәренә ваҡытты дөрөҫ бүлә белергә өйрәтергә тырышабыҙ.

Ололарҙы - ололау, кеселәрҙе - кеселекләү, итәғәтле, ипле, инсафлы, иманлы булыуҙары, кеше араһында үҙҙәрен тәрбиәле тота белеүҙәре ата- әсәнең күсермәһе инде. Шулай уҡ телебеҙгә һөйөү уятып, үткәнебеҙҙе хөрмәтләп, киләсәгебеҙҙе ҡайғыртып, ысын башҡорт итеп үҫтереү ҙә беҙҙең мөһим бурысыбыҙ.

Балам менән бала ла булам, сыбыҡ атҡа атланып һыбай ҙа сабам, кәрәк саҡта яҡын дуҫ, кәңәшсегә лә әйләнәм, бергәләшеп илашып та, көлөшөп тә алам, шаян һәм шуҡ та, урынында етди, ҡырыҫ та ҡалам. Өйрәтмәйем, бары тик күңелемдән, йөрәгемдән сыҡҡан тәрбиә ысулдарым менән дөрөҫ юлға йүнәлеш кенә бирәм. Балаларым тәрбиәмдең сәскәләре генә, емештәрен ейәндәремдә, бәхетле ҡартлығымда күрермен тип инанам.

Гүзәл МЫРҘАЕВА.
Баймаҡ районы.

ЙӘН ӘРНЕҮЕ



# ЭСКӘН АТАЙ МЕНӘН...

**Һуңғы арала ғаиләләге ҡыйырһытылыуҙарға ҡаршы закон ҡабул итәсәктәр, тигән хәбәрҙәр ишетелеп ҡала. Был турала "Киске Өфө"лә лә депутаттарҙың сығышы булды. Ысынлап та, "шеш" тулышты бит: ғаилә, балалар тип, "йөк аты"на әйләнгән, эскесе иренән ыҙа сиккән ҡатын-ҡыҙҙар бихисап бит хәҙер.**

Беҙ ҙә ғаиләбеҙҙә шулай үҫтек: көнө-төнө иҫерек атай, туҡмалыуҙан ыңғырашҡан әсәй, ас балалар, һалҡын өй. Атай эшләмәгәс, әсәйем ике-өс урында бил бөгөргә тырышты. Таңғы 5-тән мәктәпкә ут яғырға йүгерә, иҙәндәрен йыуып, дәрестәр башланыуға кластарҙы ялт иттереп ҡуя. Унан икмәкханаға йүнәлә. Көн буйы эҫе мейес алдында өйөрөлә, ҡамыр баҫа, калун балта менән оло-оло түмәрҙәрҙе ярып, хәлдән тайып эштән ҡайта. Ҡайта ла, баҡырып торған һыйырын һауырға йүгерә, унан ашарға бешереп, беҙҙе тәрбиәләп йоҡларға һала...

Ә атайымдың йүнле эш менән булғанын хәтерләмәйем дә. Айыҡ сағы һирәк булды, ә иҫерек сағында әсәйебеҙҙе туҡмап, беҙҙе өйҙән ҡыуып сығарып, баҡсала, өй артында ҡуна инек. Ҡыш етһә, бесән әҙлектән малыбыҙ ятып үлә, утын юҡ, күршеләрҙән мунса хәйерселәп әсәйебеҙ берәй эштәрен эшләшә. Яҙа китһәң, күп инде...

Үҫә төшкәс беҙ әсәйебеҙгә: "Ниңә айырылманың, ниңә атайлы итәм тип, беҙҙе психик сирлегә тарыттың?" - тип үпкәләй инек, ундай атайҙың булғанынан булмағаны яҡшы, йәнәһе... Йылдар үткәс, хәҙер генә аңлайым. Бәс, ауылыбыҙҙағы бөтә ҡатын-ҡыҙ ҙа шулай йәшәгән дә баһа! Әсәйем олоғайғас, әҙерәк эскеләй башланы. Бер мәл асыуланып, эсмәгән әсәйҙәрҙе миҫал итеп килтереп, сәменә теймәксе булғайным, ауылыбыҙҙа өлгө итеп күрһәтерлек әсәйҙәр булмай сыҡты. Класташтарымдың әсәләре ярым эскесе, ҡайһылары аҙналар буйы эсһә, ҡайһылары "байрамдарҙа ғына" төшөрә. Һәм был күренеш нормаға әйләнгән. Ирҙәренән туҡмалып, күрмәгәнен күрә-күрә донъя көткәндәр 4-5 балаһы менән ҡайҙа, нисек сығып китһен инде? Кем көтөр ине уларҙы, кем яҡлар ине? Шуға әсәйҙәр ҙә барыһынан күрмәксе "стресс сисеп алырға" өйрәнделәр. Әсәйебеҙҙе лә ғәйепләргә хаҡыбыҙ юҡтыр. Әгәр ара-тирә шулай һалғылап алмаһа, шунсама нервы көсөргәнешенән, этлек күреүҙән бөгөн ул йә йөрәк сирлегә, йә рак ауырыуына әйләнер ине, йә бөтөнләй баҡыйлыҡҡа күскән булыр ине, тип уйлап ҡуям. Дөрөҫөн әйткәндә, әсәйемдең ошо насар ҡылығына аҡлау эҙләйем. Аҡлау дөрөҫ түгеллеген белһәм дә...

Әсәйемдең эскеләп алыуына аҡлау эҙләгәндән дә яҙмайым быларҙы, ә ошо кимәлдән юғарыраҡ күтәрелә белмәгән ауылыбыҙ ҡатындары, эскесе атайҙар, яуапһыҙ йәмғиәт, битарафлыҡ-вайымһыҙлыҡ өсөн әсенеп яҙам...

...Атайыбыҙ тере, әммә беҙҙең өсөн ул күптән юҡ инде. Бушлыҡ. Ә бушлыҡты хөрмәт итеп тә, ғәфү итеп тә булмай. Бушлыҡтың нимәһен кисерәһең? Эсә торғас, мейеһе кипте, тереләй йәне серене. Ул хатта ошо кимәлгә төшөүенең сәбәбен дә, үҙенең бер кемгә лә кәрәкмәгәнен дә аңлау хәлендә түгел... Ҡыҙғаныс, хәҙер улдары, ҡустыларым да эскегә бирелеп бара...

**ХӘМДИӘ.**

БӘХӘС ҠОРО

# ЯРАТЫУ, ЯРАТЫУ ТИП...

## кәмһетәләр ҙә, үлтерәләр ҙә беҙҙә

**Беҙҙең йәмғиәттә, мәҙәниәттә яратыу хисе һәм, ғөмүмән, мөхәббәт тигән төшөнсә юғары ҡуйылған. Яратыу - иң беренсе урында, тибеҙ. Унда барлыҡ тойғоларҙың да иң юғары нөктәһен күрәбеҙ. Беҙҙең кинолар ҙа, китаптар ҙа мөхәббәтте ауырлыҡтарҙы, ҡара көстө еңеүсе бер изгелек итеп һүрәтләне һәм һүрәтләй. "Мөхәббәт булһын, башҡаһы үҙенән-үҙе хәл ителә ул" тип теләк теләргә яраталар туйҙарҙа ла. Шулай, яратыуҙы идеаллаштырғанбыҙ, артыҡ баһалағанбыҙ.**



Ә, асылда, ысынлап та изгеме ул яратыу тигән нәмә? Яҡшылыҡ алып киләме ул кешегә? Әллә әҙәмдең ғүмерен ағыулап тороусы ауырыу ғынамы был хистәр? Яратыуҙы алға ҡуйып, хөрмәт, сабырлыҡ, яуаплылыҡ кеүек унан күпкә тәрәнерәк булған сифаттарҙы үҙебеҙ ҙә аңғармаҫтан ситкә этәрәбеҙ түгелме? Ысынында, бөтөнөһөн дә яратыу хәл итә алһа, нимәгә кеше үҙен әллә ниндәй ҡатмарлыҡтар менән йонсота һуң? Ни өсөн барыһын ла яратыу хәл итеп кенә ҡуймай? Уйландырамы? Әгәр шулай булһа, әйҙәгеҙ әле, яратыу хаҡындағы өс хәҡиҡәтте асыҡлап китәйек.

**Беренсенән, мөхәббәт һәр ваҡыт ысынбарлыҡҡа тура килмәй.** Һеҙ кемгәлер ғашиҡ булғандан ғына унын һеҙҙең ғүмерлек юлдашығыҙ була алыры факт түгел. Мөхәббәт ул - эмоциональ процесс, ә үҙ-ара мөнәсәбәт ҡора белеү - логик процесс. Һәм уларҙың бер-берейенә ярашып китеүенә бер ниндәй ҙә гарантия юҡ. Яратыу тойғоһо күп осраҡта ҡапыл һәм көтөлмәгәндә килә, шунлыҡтан уны аҡыл менән бер нисек тә үлсәп өлгөрөп булмай. Хатта яҡшылап белмәгән кешене лә яратып ҡуялар тормошта. Бигерәк тә йәш саҡта ҡайҙалыр кемделер осраҡлы күрҙең - яраттың. Был кеше һеҙгә яҡшы мөнәсәбәттә булмаҫҡа ла мөмкин, иғтибар итмәүе, хистәрегеҙгә яуап бирмәүе лә бар. Был осраҡта һеҙ үҙегеҙҙе түбәнерәк баһалайһығыҙ, комплекстар уяна, йә был, йә теге сифаттарығыҙҙы тәнҡитләү башлана. Йәки был кеше һеҙҙе тейешле рәүештә хөрмәт итмәй. Йәки ул кешенең донъяға ҡараштары һеҙҙеке менән тап килмәй. Унын амбициялары юғарыраҡ, маҡсаттары башҡа, теләктәре һеҙҙекенә параллель түгел. Һеҙҙең барлыҡ эске энергияғыҙҙы һурып ала, һәр саҡ кәйефегеҙҙе төшөрә, күңелегеҙҙе ҡыра торған кеше булыуы ла ихтимал. Бәхетһеҙ итеп тойҙора торған әҙәмде лә яратырға була бит. Былар барыһы ла парадокс кеүек, әммә факт, тормош күренештәре.

Яратыу тойғоһонон ҡоло булып, башҡа төшөнсәләрҙе күҙ уңынан ысҡындырған парҙар, ғәҙәттә, ярты-бер йыл тирәһенән конфликтҡа инә башлай. Сөнки улар был кеше менән бары тойғоларын еңә алмау арҡаһында ғына яҡынлашҡан. Йәғни, бары тик "яратыу" сәбәпле генә. "Яратҡан кешенең барлыҡ алама ғәҙәттәрен дә ярата һың", тип ҡаршы төшөр ошо урында әле һаман шул эйфория эсендә булғандар йәки яратҡан кешеләре менән бергә була алмай ҡалғандар, сөнки улар ҙа һаман шул хәтирәләр тулҡынында йәшәй. Ә яратҡан кешеләренән рәнйетелгәндәр иһә ризалашыр. Улар бит был дәлилдәрҙе үҙ башынан үткәрҙе, үҙ миҫалында аңланы.

Ни өсөн былай килеп сыҡтымы? Асылда, был хаталар барыһы ла тәүге аҙымда - ғашиҡ булған саҡта уҡ башланды. Ғәҙәттә, ғашиҡ булған кеше (бигерәк тә йәш кеше) "Үҙем беләм"де алға ҡуя. Ысынында, үҙең белмәйһең икән ул. Бөтөнләй белмәй һәм аңламай хәл итәһең ҡайһы бер мәлдәрҙә. Йөрәк был ваҡытта һиңә артыҡ буйһонмай, һин үҙең дә үҙеңә буйһонмайһыңдыр әле хатта. Әммә нисек кенә булғанда ла, аҡылды юғалтырға ярамай. Аҡыл ҡатнашмаған эш аҙағынан, ғәҙәттә, хәйерле булмай...

**Икенсенән, яратыу проблемаларҙы хәл итмәй.** Хатта, киреһенсә, проблемаларҙы күбәйтә ала. Күҙәтеп ҡарағыҙ: бер-берейен яратҡан кешеләр күберәк талаша. Сөнки улар парҙарының бар нәмәһен дә белеп торорға теләй. Уны күҙ уңынан ысҡындырмаҫҡа, уйҙарына тиклем уҡып торорға ынтыла. Был икәү яйлап бер-берейенең иркен бөтөнләй быуа. Ә был конфликта илтеүсе юл ғына. Ошонан көнләшеү, ғәйепләү, ышанмау баҫҡыстары китә. Мәҫәлән, йәштәр ата-әсәһен беҙҙең араны бутайҙар, ҡыҫылалар, яратышыуыбыҙҙы аңламайҙар, тип ғәйепләй, ә шул уҡ ваҡытта үҙ-ара ла һыйыша алмайҙар. Уларға мөхәббәт бар ауырлыҡтарҙы ла йырып сығырға ярҙам итер кеүек тойола ла, ә унын ундай мөмкинлектәре булмай сыға.

Бик ябай ғына итеп ҡарайыҡ: яратыуҙан ғына тамаҡ туймай, яратыуҙан ғына аҡса килмәй, яратыуҙан ғына кеше үҙгәрмәй, яратыуҙан ғына бәхетле булып булмай, яратыуҙан ғына донъя теүәлләнмәй. Кеше ниндәй кеше булып яралған, ниндәй мөхиттә тәрбиәләнгән - ул шулай булып ҡала. Мөхәббәт ярҙамында ул ваҡытлыса үҙгәреп торорға ла мөмкин, әммә уны был яһалмалыҡ бик тиҙ ялҡытасаҡ. Беҙҙә "яратам" тип ҡыйырһыталар ҙа, кәмһетәләр ҙә, үлтерәләр ҙә хатта. Үкенескә ҡаршы, күп осраҡта мөхәббәт проблемаларҙы хәл итеүсе булып түгел, ә проблемалар яһауға сәбәпсе хис булып сыға.

**Өсөнсөнән, мөхәббәткә үҙеңде ҡорбан итмә.** Яратҡан кешене ҡайғыртыу, уны һәр саҡ уйлап йөрөү, унын теләктәрен алға ҡуйыу - ғәҙәти. Был бик ябай итеп аҡлана: мин уны ярата бит. Ә унын тарафынан ниндәй мөнәсәбәт һуң? Ул һинең өсөн ниндәй ҡорбандар килтерә? Килтерәме, ғөмүмән? Әллә бында ҡорбан һин үҙең генәме?

Ғаиләлә бер-берең өсөн ниндәйҙер ҡорбандар яһау, бер-береңә юл ҡуйыу, ишеңде ҡайғыртҡанда үҙ мәнфәғәттәреңде онотоп тороу ғәҙәти хәл. Бындай мөнәсәбәттәр ике яҡлы булғанда, йәғни бер-береңде ҡайғыртып, аңлап, йәлләй белеп йәшәү - бына был сәләмәт мөнәсәбәттәр булалыр. Тик бында "ике яҡлы" тигәнде онотмаҫҡа кәрәк. Әгәр был ҡорбанлыҡтар бары тик бер яҡтан ғына килтерелә һәм һинең дөйөм физик торошоңа, һаулығыңа, амбицияларыңа, ҡараштарыңа зыян яһай икән, был яратыу проблемаға әйләнә. Мөхәббәт хистәре беҙҙең шәхси донъяға ҡурҡыныс менән янамаһын, ә уны тулыландырһын, йәмләһен.

Кәмһеткән, ҡыйырһытҡан йәки нимәләрҙәндер сикләгән мөнәсәбәттәргә түҙеп йәшәп, беҙ үҙебеҙҙең һөйөүҙән йотолабыҙ. Үҙаллы уйлай һәм хәл итә белеү сифаттарын юғалтабыҙ. Тора-бара үҙебеҙҙе үҙебеҙ ҙә, башҡалар ҙа һәм шулай уҡ беҙ яратҡан кеше лә хөрмәт итмәй башлай. Был юлдың аҙағы тик ошолай ғына.

"Яратмайынса нисек йәшәргә һуң?" тип һорар күптәр. Был һорауға мин дә яуап эҙләйем. Әммә шул хәҡиҡәтте аңлағанмын: бәхет өсөн яратыу ғына аҙ. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Әлиә СӘЙҒӘФӘРОВА.**

***✓ Башҡорт һунарсыларында тик башҡорт бурҙайы булды. Ул бик күп сифаттарға эйә ине. Ул эҙләне лә эҙҙән ҡыуып етеп йәнлек алды, өңгә лә керҙе, һыуҙан ҡош та сығарҙы.***

# АТА-БАБАМ ҺӨНӘРЕ - ҠОШ СӨЙӨҮ

*Спартак ИЛЬЯСОВ*



**Хәҙер инде ҡош сөйгәндә, ҡош менән һунар итеүҙә ҡулланыла торған әйберҙәрҙе яҙып, һәр береһен тасуирлап китәйек.**

**Тағараҡ. Тағараҡ бауы.** Ике ағас, ике бағана араһына ныҡ итеп тартып ҡуйылған арҡан. Арҡан ныҡлы һабаҡлыҡ - киндер, ҡыл йә сүс бәйҙәрҙән тығыҙ итеп бәйләнә. Йыуанлығы хәҙерге үлсәм менән өсдүрт сантиметр, йә артыҡ йыуан булмаған ике бармаҡ. Оҙон түгел, ике-өс метр. Ике осона, бағаналарға беркетеп элер өсөн, ҡалын ҡайыш тағыла. Бөркөт тағарағы һәм ыласын тағарағы була. Ыласын тағарағы нәҙек, диаметры иң күбе 1,5-2 см. Тағараҡтың төп ҡулланылышы "томаға" кейҙерелгән ҡоштоң ихтыярын һындырыу, сөнки сайҡалып, бәүелеп торған тағараҡта ултырған ҡош үҙен һәр саҡ ышанысһыҙ тоя. Аунап-ҡолап төшмәҫ өсөн, тағараҡ һәр саҡ тигеҙлек һаҡларға мәжбүр итә. Ҡанатлы ҡош ҡолап төшөүҙән, әлбиттә, ҡурҡмаҫ ине, әммә ул күрмәй. Сөнки башына кейҙерелгән томаға күҙен бөтөнләйгә ҡаплап тора. Көнө-төнө, айҙар буйы тағараҡта ултырған ҡошто хужаһы алып ҡулына ултыртһа, уның сығанағы иң ышанысл, ныҡлы, ҡурҡыныcһыҙ ергә әйләнә. Йыртҡыс ҡош өсөн кеше сығанағы йә ҡулбашы ҡая түшенә, ҡая үркәсенә әйләнә. Шуға ла ул сөйөлөп, ҡошто, йәнлекте алғас, кире шул ышанысл "ҡая үркәсенә" - сығанаҡҡа ултырырға ҡаршылашмай. Тағараҡты көслө ел, ямғыр, ҡар яумағанда асыҡ ерҙә, ә ел йәки яуынлы осорҙа яҡтылыҡ төшкән япма, һарай эсенә япҡандар. Ялан ерҙә ағас булмау сәбәпле кәртә эшләү мөмкинлеге булмағанда һауын бейәләрҙең ҡолоҡайҙарын да тағараҡҡа ағас ҡолаҡтар аша элгәндәр.

**Ағас ҡолаҡ.** Ҡолаҡтың бер тишегенән тағараҡ бауы үтһә, икенсе тишегенән ҡайыш аша ҡолон муйынына бәйләнгән. Боронғо ваҡытта тимер сыңға табыу ярайһы уҡ ауыр булғанға, ҡартатайҙар бөркөт, ҡарсыға аяғына ағас ҡолаҡты ҡайыш менән бәйләп ҡуйғандар. Бөркөт ҡолағы ҙурыраҡ, ә ҡарсыға, ыласын ҡолағы бәләкәй булған. Ағас ҡолаҡтың түбәнге буш тишегенән оҙон, нәҙек ҡайыш, бау үткәреп, бөркөттө өйрәткәндәр. Ә һунарҙа бауҙар ҡыҫҡа булған. Ҡошто тиҙ генә ысҡындырып осороп ебәрер өсөн түбәнге ҡолағына таралдыҡ кейҙергәндәр. Таралғы түгел, ә таралдыҡ.

**Бейәләй.** Әгәр һунарсы һулаҡай булмаһа, тик уң ҡул өсөн ҙур тире - йорон бейәләй тегелә. Уның тышҡы яғы ҡайыш та булыуы ихтимал. Әгәр тышы күн-ҡайыш булһа, эске яғы мотлаҡ йә йөрөн - эшкәртелгән тире, йә кейеҙ булған. Бейәләйҙең төп тәғәйенләнеше - бөркөт, ыласын, ҡарсыға ултырғанда уның осло тырнаҡтарынан ҡулды һаҡлау. Уның ярайһы уҡ иркен, оҙон һаплы булыуы шарт.

**Еңдек.** Еңдек көпө, бишмәт, тун, хәҙерге фуфайка еңенә бейәләй һабынан сығанаҡ аша ҡулбашҡа тиклем кейелә торған иркен еңтире. Еңтире йомшаҡ итеп эшкәртелгән һарыҡ, кәзә, бүре, эт тиреһенән тегелһә лә, тыш яғы ҡалын, йомшаҡ күн, ҡайыш менән ҡапланған була. Һыбай йөрөгәндә һелкенгәндә йә ат тулағанда, сапҡанда бөркөт уң аяғын бейәләй һабына, һул аяғын еңдек өҫтөнә баҫып, йығылмаҫ өсөн тырнаҡтары менән беләкте ҡоршап тотоп алға ҡарап ултыра. Тигеҙлек һаҡлар өсөн ҡанаттарын асып елпеһә лә, һул ҡанаты ҡошсоноң башы артынан үтә. Ул, ғәҙәттә, алға ҡарап ултыра. Уның был ултырыу алымы туҡтай биреп йә сабып барғанда ла һул ҡул менән томағаһын сисергә уңайлы була.

**Балдаҡ, беләҙек.** Ауыр бөркөттө ҡулда, сығанаҡта оҙаҡ йөрөтөп булмағанлыҡтан, һыбай һунарсылыҡ иткән ҡошсолар эйәр ҡашағаһына - алғы дуғаға ҡул суғын һалып барырға терәк нығытҡандар. Уның терәү ере аҫҡы яғы берәүҙәкеке аса булһа, икенсеһенеке яҙы булып, һәр осраҡта аҫҡы яғы ҡайыш менән эйәргә нығытылған. Ҡошсо балдаҡҡа, беләҙеккә уң ҡул суғын һалып, сығанағын киңәйтә биреп, ҡошо шунда ултыртып йөрөгән. Ниңәлер, исемен бер яҙғанда балдаҡ тип, икенсе ерҙә беләҙек тип тәркәгәнмен. Беҙҙең ҡартатайҙар уны беләҙек тигәндәр. Сөнки ҡул суғы нәҡ беләҙек кейелгән урынға ятҡан бит. Әгәр балдаҡ тиһәк, ул ағаста дүрт йә биш бармаҡ өсөн уйып төшөрөлгән ятма булыр ине. Ул ваҡытта бейәләй нисек булған һуң? Бәлки, балдаҡ көҙ көндәр йылы осорҙа ҡулланылғандыр. Балдаҡ сөйөр ҡош бөркөт, көсөгән, ҡарағош түгел, ә ыласын, балапан, ҡыйғыр, ҡарсыға, яғылбай һәм башҡа вағыраҡ, еңел ҡош булғанда ҡулланылған. Сөнки ваҡ ҡош, ғәҙәттә, һәр саҡ йә ҡулбашҡа, йә ҡул суғының өҫ яғына ултырған. Ҡул бармаҡтарына зыян килтереү мөмкинлеге әҙ булғанлыҡтан, балдаҡҡа бармаҡтарҙы һалып барыу өсөн "тупаҡ бейәләй" йәки бейәләйҙең осо йә ҡырҡып ташланған, йә махсус рәүештә бармаҡтар сығып торорлоҡ итеп тегелгән. Сөнки көн йылы булғас, бармаҡтар өшөмәгән.

Һунар итә торған ерҙең таулы яланлымы, урманлы түбәнлекме булыуына ҡарап, һунарҙа хәрәкәт итеүсе алым ҡулланылған. Һыбай, ат өҫтөндә. Арбала йәки санала. Ваҡ ҡоштар менән һунарсылыҡ иткәндә - йәйәү. Арбала йәки санала һунарға сыҡҡанда ҡошто арбаның йәки сананың алғы яғына тире менән ҡағылған махсус ултыртма эшләнгән. Ул ултыртма "туғыр" тип аталған.

**Туғыр.** Алғыр ҡош менән һыбай сыҡҡанда ла, сана-арбала булғанда ла ҡошсо күп осраҡта бер үҙе булмай. Уның йәнәшендә һунар эте менән ярҙамсы була. Башҡорт һунарсыһы элекке ваҡытта һунар этенең тик бер тоҡомон ғына тотҡан. Ул башҡорт бурҙайы. Башҡорт һунарсыларында тик башҡорт бурҙайы булды. Ул бик күп сифаттарға эйә ине. Ул эҙләне лә эҙҙән ҡыуып етеп йәнлек алды, өңгә лә керҙе, һыуҙан ҡош та сығарҙы. Насип булһа, башҡорт бурҙайы тураһында айырым һүҙ әйтергә теләгем бар. Туғыр өҫтөндә ултырған ҡош, әлбиттә, томағала була һәм туғырға ҡыҫҡа бауҙар менән бәйләп ҡуйыла. Ә туғыр үҙе аяҡтарынан арбаға, санаға нығытылып ҡуйыла. Ултыртма йөнлө тире менән бәйләнә, ҡағыла. Был ҡыш көнө ҡоштоң аяғы өшөмәһен өсөн эшләнә.

**Томаға.** Алғыр ҡоштоң күҙен ҡаплау өсөн башына яраҡлы итеп бесеп, махсус рәүештә тегелгән тәрән башлыҡ. Ул йомшаҡ сафьян күндән, бәрхәттән тегелгән. Байҙар бер-береһенең алдында ҡупырайыр булһалар, йә туйҙа ҡайны кеше кейәү йә төп ҡоҙа һунарсы булһа, уға бүләк итеп сөйөр ҡош биргәндәр. Өйрәнгән алғыр ҡош бик ҡиммәт булған. Уны бүләктән тыш аҡсаға һалып, ҡалым хисабына ла биргәндәр. Кейәүгә бүләк итеп бирелгән алғыр ҡоштоң томағаһы фарсы, төрөк бәрхәтенән булып, алтын һәм көмөш мәрйен-гәрәбәләр менән сигелгән була. Әгәр алғыр ҡош төп ҡоҙаға - кейәүҙең йә ҡыҙҙың атаһына тәғәйен булһа, уға шул уҡ алтын-көмөш менән биҙәрләнгән сафьян күнле тағараҡлы алғыр йә типкес һайлағандар. Халыҡ телендә дөйөмләштереп "алғыр" тип ҙур ҡошто, "типкес" тип бәләкәй һунар ҡоштарын атағандар. Һунар ҡошоноң иң ҡиммәтле кейеме шул томаға булған да инде. Байрамдарҙа, туй өсөн томағаға һәр төрлө төҫлө таҫмалар, елберҙәктәр, ваҡ ҡына ҡыңғырау ҙа таҡҡандар. Буран көнө беҙ бүрек ҡолаҡсынын эйәк аҫтынан бәйләп ҡуйған кеүек, ҡош башына ла томаға аҫҡы соҡошо аҫтынан таҫма, йомшаҡ ҡайыш менән бәйләп ҡуйыла. Алғыр ҡошто ҡаратайҙар томағаһыҙ өйрәтә алмаған, сөнки ҡоштоң аң үҫеш кимәле ҡулға өйрәтелгән башҡа йән эйәләренән бик күпкә айырыла. Томаға кейҙерелгән бөркөт тағараҡта аҙналар, айҙар буйы ултыра. Бөркөт тыныс ҡына ултырмаһын өсөн, тағараҡ бауын һәр саҡ тартыптартып торғандар. Ҡырҡ көн буйы йоҡоһоҙ һәм бау бәүелгәндә тигеҙлек һаҡлап арып бөткән бөркөткә хужаһының еңдеге иң ышанысл урынға әйләнә. Тағараҡты алғыр башынан һунар этте, атты танытырға, улар менән аралашҡанда, бергә ашатҡанда ғына сискәндәр. Һунар этенең төҫө бүрегә, төлкөгә оҡшамауы ла бер шарт була. Һауаға ҡошто сөйгәндә, әлбиттә, томағаны хужа сисеп алып ҡала.

**Бауҙар.** Алғыр ҡошто өйрәткән саҡта томағаһын асып, тәүләп осҡан ҡош йә йәнлек күрһәткәндә уның аяғына һунарҙың төрөнә ҡарап төрлөсә бау-бәйҙәр таҡҡандар. Әгәр алғыр менән хужа ҡошҡа - үрҙәккә, ҡорға, ҡуянға, ҡаҙға һунарсылыҡ итә икән, уны тиҙ генә ысҡындырып осороп ебәрер өсөн бауҙар ҙа ябай булған. Тимер, унан тимер сыңға эшләп өйрәнгәнгә тиклем алғыр аяғына бәйләй торған бауҙар төрлөсә була. Миңә уларҙың ошо төрҙәре билдәле: беләҙек, балдаҡ; һиртмәк; ҡайыш бау. Ҡоштоң, ғәҙәттә, уң аяғына йомшаҡ, майланған, әммә ҡалын ғына ҡайыштан балдаҡ, беләҙек кейҙергәндәр. Беләҙекте бик оҫта, һынсыл һунарсылар ҙур алғыр ҡоштоң һул аяғына, ә бәләкәй ҡошҡа, ыласын, ҡыйғырға - уң аяғына кейҙергәндәр. Сөнки бөркөт төлкөнөң, бүренең һәр саҡ муйыны башына тоташҡан ерҙән уң аяғы менән, ә һул аяғы менән йә нәҙек биленән, йә умыртҡа һөйәгенең ҡалаҡ һөйәге аҫтына керер еренән тотҡан. Бәләкәй ҡош осоп барған ҡошто һәр саҡ йә ике аяғы менән дә, йә тәүге һуғыуҙа ҡорбанын тиңһенмәйерәк күберәк һул аяғы менән типкән.

Беләҙек ҡоштоң аяғына йә ҡайыштарын сисеп, йә ҡоштоң бармаҡтары аша аҫтан кейҙерелгән. Беләҙектең уртаһынан бер ая самаһы ҡайыш булып, осо бәләкәй генә һиртмәк менән бөтә.

**Таралдыҡ** һиртмәккә кейҙерелә. Ғәҙәттә, ат йүгәненең тамаҡһаһына тегелгән таралғы түгел, ә таралдыҡ.

1. Таралдыҡ аяһы.
2. Мүлдергә.
3. Таралдыҡ тишеге.
4. Таралдыҡ ағасы.
5. Оҙон бау йәки ҡыҫҡа ҡайыш - ҡулсар.

Беләҙек бауының һиртмәге таралдыҡ аяһына кейҙерелә. Таралдыҡтың икенсе осо тишек булып, мүлдергә аша йә оҙон бауға, йә бер аршын, бәлки оҙонораҡ ҡайышҡа бәйләнә. Оҙон бауҙы ҡошто өйрәткәндә ҡулланғандар. Ә ҡыҫҡа ҡайыш өйрәнгән ҡошто ҡулда йөрөткәндә тотор өсөн ҡулайлы булған.

Таралдыҡ ағасының аяһы "алғырҙы" тиҙ генә һиртмәктән ысҡындырып ебәрер өсөн уңайлы. Таралдыҡ ботағын урманда һайлап йөрөп киҫеп алып, әрсеп, киптереп ҡуйғандар. Таралдыҡтың дөйөм оҙонлоғо ун-ун биш сантиметр самаһы. Һуңғараҡ тимерҙән түңәрәк сыңға эшләнә башлағас, беләҙек бауының осона сыңға бәйләп, сыңға аша ҡулсар йә оҙон бау - нәҙек сылбыр үткәреп ҡулланыр булғандар. Ҡошто ысҡындырып ебәрер өсөн ҡулсарҙың йә сылбырҙың бер осон ебәреү еткән.

**Ҡыҫмау - ҡыҫбау.** Был күберәк бүре һуға торған алғыр бөркөттөң, ҡарағоштоң, көсөгәндең аяғын, ботон һаҡлар өсөн кейҙерелгән, дөрөҫөрәге, бәйләп ҡуйылған ағас ҡулайлама. Ҡыҫбау ике өлөштән, ә ҡайһы бер осраҡта дүрт өлөштән торған. Әлбиттә, ҡыҫбау ҡоштоң хәрәкәтен бер аҙ сикләгән, әммә ул күп осраҡта үҙен аҡлаған.

1. Бот ҡаҫмауы. Алғыһы.
2. Бот ҡаҫмауы. Артҡыһы.
3. Ашҡаҡ ҡыҫбауы. Алғыһы.
4. Ашҡаҡ ҡыҫбауы. Артҡыһы.
5. Ҡайыш бәйҙәр.

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



# ҠАРТАЙМАҪ ӨСӨН...

■ Зифа буйлы булырға хыялланған ҡатын-ҡыҙҙар йыш ҡына шәкәрҙән баш тартып, шәкәр алыштыусы ҡуллана. Күптәр был шәкәр алыштырыусыны организм өсөн бөтөнләй зарарһыҙ, тип иҫәпләй. Әммә уның составында аценсульфам йөрәктең ағзаларҙы ҡан менән тәьмин итә алмауына, цикломат бөйөр сирҙәренең көсәйеүенә килтереүе ихтимал. Шәкәр алыштырыусылар үт ҡыуығы юлдары сирҙәре менән яфаланыусыларға ла зарарлы. Ҡайһы берәүҙәр шәкәр урынына фруктоза, сорбит йәки ксилит ҡуллана, әммә улар калорияһы буйынса шәкәрҙән айырылмай. Табиптар фекеренсә, иң зарарһыҙы булып фруктоза тора, сөнки уның составында организмға зыян килтереүсе компоненттар аҙыраҡ.

■ Гүзәл затҡа бөйле тағы бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт. Британияның St.Tropez косметика фирмаһы хеҙмәткәрҙәре ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлеге өсөн аҙнаның иң ауыр көнөн асыҡлаған. 2000 ҡатын-ҡыҙ араһында үткәрелгән һорау алыуҙар күрһәтеүенсә, дүшәмбе гүзәл заттарҙың күпселек өлөшө үҙен ҡартайған тип тоя. Быға ял көндәре сәбәпсе, ти белгестәр, сөнки был көндәрҙә һуң йоҡларға ятабыҙ, әүҙем ял итеп арыйбыҙ. Шулай ҙа иң ауыр көн булып шаршамбы тора, сөнки был ваҡытҡа эштәге стресс та ҡатын-ҡыҙҙар сәләмәтлегенә насар тәьҫир итеп өлгөрә. Шаршамбы 15.00-16.00 сәғәткә ҡатын-ҡыҙҙарҙың йөҙөндә һырҙар күберәк күренә. Аҙнаның иң яҡшы көнө булып йома иҫәпләнә. Эш аҙнаһы аҙағына ҡатын-ҡыҙҙарҙың 60 проценты үҙен сикһеҙ бәхетле тоя икән.

■ Ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡолаҡтарындағы алҡалар борондан гүзәллек билгеһе иҫәпләнә. Шуға ла ҡыҙ балаһы булған ата-әсәләр уның ҡолағын тиҙерәк тиштергеһе килә. Ҡолаҡ тишкәндә ауыртыу нык тойола, шуға ла бала бәләкәй сағында ҡолаҡ тиштереү күпкә уңайлыраҡ тип иҫәпләй улар. Тик эксперттар һәм педиатрҙар бала үҙе был турала һорамайынса, ҡолағын тиштереү кәрәкмәй, тип иҫәпләй. Бигерәк тә бер йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙың ата-әсәһе уйланырға тейеш, сөнки энә организмға берәй инфекция индереүе бар, ә йәш баланың иммунитеты уның менән көрәшә алмай әле. Икенсенән, нык ауыртыу тойғоһо кисергән бала психологик тетрәнеү кисерә, бала тынысһыҙлана, бер туҡтауһыҙ илауы бар.

■ Американың Корнелл университеты яңы асыш тураһында хәбәр итә. Белгестәрҙең фекеренсә, ул фән өлкәһен күпкә алға ебәрәсәк. Ғалимдар миллионлаған кешеләрҙе ҡотҡарасаҡ аппарат уйлап тапҡан. Оҙайлы эксперименттарҙан һуң, ғалимдар ҡан ҡыуыу һәләтенә эйә яһалма йөрәк эшләй алған. Ул пенопластан яһалған һәм был йөрәкте донор итеп ҡулланып буласаҡ. Әлеге мәлдә күп кенә медицина компаниялары ошондай уҡ ҡоролма яһау өҫтөндә эшләй. Уларҙың төп маҡсаты - яңы йөрәктең кеше организмына нисек тәьҫир итеүен өйрәнеү.

■ Америка ғалимдары кешенең киләсәк портретын төҙөп ҡараған. Вашингтон университеты хеҙмәткәрҙәре - тикшеренеүсе һәм рәссам Николай Ламм менән генетик Алан Кван 100 мең йылдан һуң йәшәйәсәк кешеләрҙе һүрәтләргә тырышҡан. Уларҙың күҙаллауы буйынса, эволюция, ген инженерияһы һәм космосты үҙләштереү кешенең тышҡы ҡиәфәтен тамырынан үҙгәртәсәк. Тикшеренеүселәр фекеренсә, эволюция һөҙөмтәһендә баш мейеһе ҙурайсаҡ, һөҙөмтәлә, маңлай ҙа киңәйәсәк. Бөгөнгө көн өсөн нормаға әүерелгән ген инженерияһы киләсәктә кешенең ҡиәфәтен үҙгәртеүҙә үҙ ролен уйнаясаҡ. Мәсәлән, ата-әсәләр үҙҙәренең балаларының "генетик составы"н, шул иҫәптән, күҙҙәр, сәс төҫөн һайлай аласаҡ. Дөйөм алғанда, кешенең тышҡы йөҙө уның ниндәй ризыҡҡа өҫтөнлөк биреүе менән бәйле буласаҡ. Тикшеренеүселәр фаразлауынса, йөҙҙәр артыҡ симметрик һәм бер-береһенә оҡшаш була барасаҡ.

ХӘТЕРКИТАП

*Йәшәһен тип тоҡомдарҙа*
*Илгә, Иргә тоғролоҡ,*
*Һәр ауылда Батыр менән*
*Атҡа һәйкәл ҡуйырлыҡ!*
*Сафуан Әлибай, 1987 йыл.*

# ЯУГИР АТ КӘРӘК!

**Нарыҫтау һыртында йылҡы өйөрөн күҙәтеү һәм уларҙы хәстәрләп аҫраған кешеләр менән тәүге танышыу бынан утыҙ биш йыл әүәл булғайны. Мин баш ҡалала, Өфөлә уҡ Дим буйындағы иң сая халыҡлы, иң ат йәнле ауыл, тип ишетеп килгәйнем улар тураһында, ошо ҡалҡыулыҡтар буйлап аттарҙа сабып йөрөгән "Илсеғол ҡарттары" тураһында ла белә инем: "...Улар борон-борондан тирә-яҡты айҡап, аҫаба ерҙәрен сит-яттарҙан һаҡлап көнөнә әллә нисә урар булған был һырттарҙы. Легендар Илсеғол ҡарттары үҙҙәре оҙон буйлы, итектәре оҙон ҡуныслы, биштән үргән оҙон сыбыртҡылы булған, аттары ҡарсығалай оскор булған..." Әйҙәгеҙ, 1985 йылдағы осрашыу хәтирәләренә ҡайтып, был тарихтарҙы һөйләгән Илсеғол кешеләрен яңынан тыңлайыҡ.**



*Хәбибулла Йосопов Керчь менән.*

...Тымыҡ Димде һыулап ултырған ауылдарҙың береһе Илсеғол Миәкә районы сигендә урынлашҡан. Был ауылдан һуғышҡа киткән 367 кешенең 167-һе кире әйләнеп ҡайтмаған. Ауыл уртаһындағы обелиск уларҙың исемдәрен теҙеп һанай, иҫән ҡайтҡандарҙың исем-фамилиялары ла айырым ташҡа ырып теркәлгән - ил белһен, онотмаһын ил өсөн яу сапҡан аҙаматтарҙы. Мәрмәр ташҡа уйылған исемдәр араһында Башҡорт атлы дивизияһында ҡатнашҡан иргеттәр ҙә күп: Шәкир менән Рәхмәт Шәриповтар, Ғәли Ғайсин, Шәрәп Әхмәтов, Шәрәп Әхмәтғәрәев, Хажиәхмәт Фазләхмәтов, Низам Шәйхетдинов, Сәлим Мөхәмәтйәнов, Солтан Илекәйев... Әйткәндәй, дивизия командиры генерал Шаймуратовтың Сәлим Мөхәмәтйәнов тураһында әйткән һүҙе бөтә ғәскәр өсөн девиз була: "Иң ҡыйыу, иң батыр йөрәкле боец ул Мөхәмәтйәнов", - тигән ти, ул. Быйлай хәбәрҙе дивизия командиры юҡҡа әйтмәҫ. Командирҙың шәхси ат йөрөтөүсеһе - коневоды булған Мөхәмәтйәнов һуғыштың ниндәй генә ҡатмарлы һәм ҡурҡыныс ваҡытында ла ике-өс атын етәкләп, генералдың артынан ҡалмай оҙатып йөрөгән, уға һәм башҡа етәкселәргә запас аттары әҙер булған...

Эйе, ир-егеттәр генә түгел, аттар ҙа утҡа инә. Илсеғолдан ғына, бер ауылдан (!), йөҙ ҙә илле ат фронтҡа оҙатыла. Аттар... Яугир аттар... Был яҡтарҙа әүәлдән ат бик күп була, нык үрсей, йәйен-ҡышын ҡылғанлы далаһын, тигеҙ тау арҡаларын, иркен үҙәндәрен ҡаплап аттар йөрөй. Икенсе донъя һуғышының ҡара яуы ҡупҡан осорҙа ла ауылда аттар ҡош кеүек нык ишәйә, халыҡ ат ярҙамында колхозды бөтмәҫ-төкәнмәҫ эшен еңеләйтә. Был аттар араһында иң данлыһы, иң һылыуы, иң ҡәҙерлеһе лә була. Бөгөн дә илсеғолдарҙың телендә һәм йөрәгендә тирбәлә ул аттың исеме. Өлкәндәр һағынып, йәштәре ғорурланып һөйләр бер ат тарихы йәшәй был яҡта...

Дим туғайын яңғыратып кешнәп ебәрер ҡара айғыр... Ҡыҙыл Армия өсөн махсус тәрбиәләнгән РККА тоҡомо, Орлов юртағы. Улар тоҡом яҡшыртыу өсөн ауылдарға тараты-ла. Колхоздың бер күрке була был: айырым ашатыу, айырым тәрбиә, әләнән-әле ҡолондарының бәкәл тороҡтарын үлсәү - тоҡом теүәл һаҡланырға тейеш! Элекке колхоз рәйесе Харис Зарипов Өфө янындағы ат заводынан һатып алған саҡта йәш дунәндең - өс йәшлек тайҙың ҡушаматын да әйтәләр. Ғәҙәти булмай, ҡылыс сыңы кеүек яңғырауыҡлы, сәйер була тоҡом айғыры бәласаҡ малдың ҡушаматы - "Керчь"! Халыҡ уны башҡортсалап, йомшартып, "Кирич!" тип йөрөтә.



*Харис Зарипов Керчь менән.*

**Уҡытыусы-ветеран Закуан Төхфәтуллин хәтирәләре:** "Бөйөк Ватан һуғышы башланғас, 1942 йылда, Башҡорт атлы дивизияһына Миәкә районынан киткән ҡыҙылармеецтар беҙҙең ауыл аша үтте. Уларҙың тышҡы ҡиәфәте былай ине: бөтәһе лә аҡ тун кейгән, башҡорт аттарына атланған, улар эскадрон-эскадрон булып йырлап бара. Ауылдарҙың халҡы юл ситенән теҙелеп ҡарап, ҡул болғап, хәйерле юл, изге теләк теләп, оҙатып ҡала. Ошо ваҡытта беҙҙең ауылдаштар ҙа, колхоз аттары ла төркөм-төркөм булып тупланып фронтҡа китте - Башҡорт дивизияһы тупланған ергә оҙатылды. *(Башҡорт атлы дивизияһын булдырыу тотошлайы менән халыҡҡа йөкмәтелә: фермаларҙа һарыҡтар һуйыла, тиреләр иләнә, аҡ тундар тегелә, эйәрҙәр яһала, кейеҙҙәр баҫыла, сергетыштар әҙерләнә... Йүгән, дилбегә һ.б етештереү ҙә республика халҡы елкәһендә. Аттарҙың да колхоздарҙан иң яҡшылары һайлап алына, йәмғеһе 300 мең баш ат фронтҡа оҙатыла. Ә ҡалған ҡатын-ҡыҙға һәм бала-сағаға ни хәл итеп сәсеп-урырға, ни хәл утын ташырға... Ләкин бер кем дә икеләнмәй: "Бөтәһе лә фронт өсөн, бөтәһе лә еңеү өсөн!")"*

"Беҙҙең Керчь дивизия тупланған урынға 1942 йыл башында килтерелде. Тәүге мәлдә Ғәбитовта, аҙаҡ майор Фәттәховта йөрөнө. - **Был иҫтәлектәрҙе һөйләүсе Сәлим Мөхәмәтйәнов баштан уҡ дивизияла ат ҡараусы-коневод булып хеҙмәт итә.** - Керчты шундуҡ таныныҡ, ул да беҙҙе танып бышҡырып ебәрер ине. Ҡарап йөрөйөк, тип килештек, егеттәр менән уны күҙҙән ысҡындырманыҡ. Фәттәховҡа ла ныҡлап әйтеп ҡуйҙыҡ, атты беҙ яҡшы беләбеҙ, колхоздың иң ҙур байлығы, тинек. Керчтың нисек һуғышҡа ингәнен, нисек сапҡанын, нисек яраланғанын да күрҙем. Висла йылғаһын аша сыҡҡан саҡта хәтәр бомба аҫтында ҡалынды, Керчтың янбашына бомба ярсығы тейеп, ҡаны сәптереп сабып бара ине. Уны нисек тә ҡыуып етеп, хужаһына әйтеп, яраһын тиҙ генә тегеп ҡуйҙыҡ... Ярай әле һөйәге имен ине".



*Майор Фәттәхов Керчь менән.*

**Сәлим Мөхәмәтйәнов менән бергә дивизияла ат ҡараусы булып йөрөгән йәнә бер Илсеғол кешеһе - Солтан Илекәйев хәтирәләре:** "Керчты башҡаларҙан айырып тигәндәй гел ҡарап, аяп йөрөттөк, уныһы шулай булды. Үҙе лә беҙҙе танығандай, ал-

✓ *Вагон Аксен станцияһына етәрәк малҡай сыҙамай тулай башланы бит. Таң беленеп килгән саҡ. Вагондан атылып, уҡталып һикереп төштө! Ышанмаған кеүек, тып-тып итеп баҫып ҡарай тыуған ергә!*



лә ҡайҙан күреп ҡалып, бышҡырып, еҫкәнеп, текләп ҡарап, ҡолаҡтарын ҡайсылап эргәбеҙгә килергә уҡталып тора торғайны. Мин барыһына ла әйттем: ат беҙҙеке, "Большевик"тыҡы, абайлап тороғоҙ. Ул бит махсус үҫтерелгән, һайлап алынған тоҡом айғыры ине. Менгегә бейек, көүҙәһе оҙон, уның менән сафта ла йөрөп булмай - тик тормай, алдағы атты тешләй, тибә. Командир аты ине ул - иркенде ярата. Майор Фәттәховты нисә күрһәм, шунса әйтә торғайным: атты һаҡлап йөрөт инде, иҫән-һау алып ҡайтырға кәрәк. Фәттәхов көлә-көлә ризалаша: һау булһаҡ, атты алып ҡайтырбыҙ, ти. Шулай тип алдан һөйләшеп ҡуйҙыҡ..."

**Керчтың яу юлдарын күҙ алдына килтереп ҡарайыҡ. Һуғыштан ҡайтҡан берҙән-бер ат дивизия өсөн йөрәге янған бер кемде лә битараф ҡалдырмай, әлбиттә. Билдәле шағир Ҡадир Даян да атты махсус барып күрә, гәзиткә яҙып сыға. Ул гүйә Керчь менән "һөйләшә", уның уйҙарын яҙып ала:** "Аҡ бәкәлле ҡара айғыр атланған гвардия майоры Ибраһим Фәттәхов Шпрее йылғаһын кискән саҡта һикереп төшөп атының эйәрен бушатты. Беҙҙең башҡорт атлары был йылғаның түмән белә, бына тағы ат эсерәбеҙ, тип уйлай майор. Ә йотлоғоп һыу эскән Керчь башҡорт яугирҙары тарихын белмәй, әлбиттә. Ләкин ул бына нисәмә йыл һуғыш ҡырҙарын үтте. Брянск, Воронеж өлкәләре артта ҡалды, тәрән ҡарлы, әсе елле Дон далалары үтелде. Керчь ниндәй генә юлдарҙан, ниндәй генә ҡыр-урмандарҙан сапманы! Белоруссия урмандары, Польша дошмандан таҙартылды, инде Германия ерҙәре башланды. Дивизия Енеү таңын Бранденбург янында ҡаршыланы. Ҡыуаныстан илашҡан кавалеристар, аттарын ҡосаҡлап: "Беҙ еңдек! Һуғыш бөттө! Башҡортостанға ҡайтабыҙ! Ниҙәр генә күрмәнек беҙ һеҙҙең менән, малҡайҙар!" - тип ҡысҡырышҡанда Керчь һәм башҡа аттар, күңеле тулғандай, тынып ҡалды. Эйе, Керчь күпте күрҙе. Ике тапҡыр ҡаты яраланды. Ауыр оҙон юлдарҙа ныҡ ябыҡты. Һалдат ни күрһә, аттар ҙа шуны күрҙе. Керчтың хужаһы гвардия майоры Ибраһим Фәттәхов дүрт тапҡыр орден, өс мәртәбә миҙал менән наградланды. Бәлки, үҙен нисәмә тапҡыр ут эсенән имен алып сыҡкан ваҡыттарҙа майор атын кире Башҡортостанға алып ҡайтырға үҙ-үҙенә ҡат-ҡат ант иткәндер..."

Илсеғол ҡарттарының береһе **Ғәйнулла Ниғмәтуллин** һуғыштан ҡайтҡас колхозда бухгалтер булып эшләй. Бына уның хәтирәләре: "1945 йылдың ноябрь айында беҙгә райкомдан хәбәр килде: һеҙҙең атығыҙ иҫән икән, ҡайтаралар икән, майор Фәттәхов алып ҡайтҡан икән, тинеләр. Ошо унай менән халыҡты йыйҙылар. Колхозсылар бер тауыштан, Керчты ҡайтарырға, тигән ҡарар сығарҙы. Шунан атлы дивизияла хеҙмәт итеп ҡайтҡан Солтан Илекәйев менән Мәжит Рәхмәтуллинды Өфөгә ебәрҙек. Улар Керчты алып ҡайтты. Керчь ҡайтҡас инде беҙҙең ауылда байрам кеүек бик ҙур йыйын булды. Тирә-яҡтан атты күрергә ифрат күп халыҡ йыйылды..."

Һуғыш тамамланғас, дивизияның аттары төрлө яҡҡа таратыла башлай, иң аҙаҡҡы 40 000 атты көньяҡ Украинаға һәм Кавказға оҙаталар. Шулай, Башҡортостанға яугир аттар кире ҡайтарылмай. Улар менән айырылышыу кавалеристар өсөн иң ауыры була. Аттарының муйынына аҫылынып, ҡысҡырышып илаша егеттәр, малҡайҙарҙың да күҙҙәренән сөбөрҙәп йәштәр ҡойола, ләкин бойороҡ... ни хәл итәһең. Был турала яугирҙар һөйләргә яратмай...

Ә майор Фәттәхов һүҙендә тора, дивизияла хеҙмәт иткән шанлы "Илсеғол ҡарттары" ла уға ныҡлап әйтеп ҡуя шул: "Теләһәң нишлә, майор, ләкин атты алып ҡайтабыҙ! Ҡара уны, майор, башың менән яуап бирәһең! Керчһыҙ ҡайтһаң, Башҡортостанда урын юҡ һиңә!" Үткер егет була майор. Иң тәүгә тауар вагонына йөшереп алып ҡайта Керчты. Кем менән, нисек килешкәндер, уныһын ул ғына белә. "Большевик"тар ҙа уны "буш итмәй": колхоз умарталығынан бер тәпән бал, һимеҙ тәкә һуйып, ҡустәнәс килтерәләр. Аҙаҡ майор үҙе бернисә мәртәбә Илсеголға, Керчҡа (!) ҡунаҡҡа килеп китә, яугир юлдашының хәлен белешеп тора. "Керчь, һин минең ҡотҡарыусым", тип тә ҡат-ҡат әйтә ул. Атҡа ҡустәнәсен - бер ҡап шәкәрен ҡалдыра.

**Солтан Илекәйев хәтирәләренән:** "Атты тимер юл менән алып ҡайттыҡ, вагон Аксен станцияһына етәрәк малҡай сыҙамай тулай башланы бит. Таң беленеп килгән саҡ. Вагондан атылып, уҡталып һикереп төштө! Ышанмаған кеүек, тып-тып итеп баҫып ҡарай тыуған ергә! Башын сайҡап, алыҫ офоҡҡа күгәреп беленеп торған Нарыҫтау һыртына ҡарай, үҙе ғыршылдап йыш-йыш тын ала, шунан гөрһөлдәтеп кешнәп ебәрҙе! Аяҡтары менән ерҙе сапсып түҙмәй, шул яҡҡа ынтылды!.."

Гүйә уны һуғышҡа тиклемге тыныс бәхетле тугайҙар, көләс ағымлы йырсы кешеләр көтөп тора! Һағынған була малҡай, өҙөлөп һағынған була тыуған яҡтарҙы! Артабан ул ауыл яғына табан йомолоп саба, биш саҡрым етәрәк бер туҡтауһыҙ кешнәй, тауыш бирә! Шулай кешнәй-кешнәй ауылға килеп инә ул, һәр ҡапҡаға тиерлек боролоп ынтылып ҡарай... Дивизиялағы бөтә аттар ҙа хыялланғандыр ошолайтып иҫән-имен тыуған Урал буйына ҡайтыу хаҡында...

**Уҡытыусы-ветеран Закуан Төхфәтуллин хәтирәләренән:** "Керчь ауылға килеп инеү менән янғыратып кешнәп ебәрҙе, тип һөйләй торғайнылар. Атты бала-саға, барса халыҡ иҫтәре китеп уратып алған. Ат шул тиклем матур ине шул: көмөш йүгәнле, бейек ҡупшы эйәрле. Уның һуғыштан ҡайтыуы бик ҙур ваҡиға булды - атҡа ҡарап үҙебеҙҙең атай-ағайҙарҙың данлы фронт юлын иҫкә алабыҙ, күҙ алдына килтерәбеҙ, һағыштарыбыҙ баҫылғандай була... Был ат беҙгә ҡәһәрле яуҙы, атлы дивизияның ауыр яҙмышын хәтерләтеп тороп булды. Иртә таңдан йәки киске энерҙә уның гөрһөлдәтеп кешнәгән тауышы һаман да иҫтә. Алыҫ-алыҫҡа янғырап китә ине уның кешнәүе... Ауыл халҡы Керчты шул хәтле яратты, уға һоҡланып, уның менән йыуанып йәшәне..."

Һуғыштан ҡайтҡан атты байтаҡ йылдар колхоздың ат ҡараусыһы Хәбибулла Йосопов үҙ йортонда аҫрай, бик тәрбиәләп ҡарай. Хәбибулла Йосоповтың Керчь менән бергә төшкән фотоһын әлеге көндә Октябрьский ҡалаһында йәшәгән улы Фәрүәз Йосопов ҡәҙерләп һаҡлай.

**Һуғыш һәм хеҙмәт ветераны, яуҙан ҡайтҡан Керчты ҡараусыларҙың береһе Фәйзулла Ғүмәров хәтирәләре:** "1947 йылдар ине... Һуғыштан һуң тәүге һабантуй үткәрелде. Район үҙәге янында халыҡ йыйылды. Бөгөнгө көн кеүек хәтеремдә, фронттан ҡайтҡан эмблемалы йүгәнде кейҙереп, муйынына ҡыҙыл тағып, Керчты һабантуйҙың уртаһына ҡуйҙылар. Уны һабантуйға барған бер кем дә күрмәй ҡалмағандыр, моғайын. Әбей-һәбей ситтән илашып ҡарап тора. Ә һуғышта булғандар, айырыуса кавалерист булып йөрөгәндәр, килеп атты һөйөп-ҡосаҡлап, ялын-йүгәнен тотоп ҡарап, һыйпап, янында илашып-илап киткәндәре әле лә күҙ алдымда. Бынан һуң байтаҡ йылдар әле Керчь һабантуйҙарҙа ҡатнашты. Йыл һайын халыҡ көтөп торор ине, быйыл да Керчь буламы, алып киләләрме, Керчь ҡатнашамы икән, тип һөйләшеүҙәрҙе, көтөүҙәрҙе ишетергә тура килә ине... "

Бына ошондай иҫтәлектәр йәшәй Керчь тураһында. Керчь нисәнсе йылға хәтле йәшәй һуң? 1959 йылда колхоздың ит тапшырыу планы буйынса яугир атты Приют ҡасабаһына ит заводына оҙаталар. Аяҡтары ауырта айғырҙың, кәре киткән була. Ләкин уға бысаҡ һалырға бер кешенең дә ҡулы бармай. Бер нисә ай завод территорияһында уны-быны ташып ваҡ эштә йөрөй, аҙаҡ шунда ағаслыҡта утлап, йылғанан төшөп һыу эсеп йөрөй. Көскә атып йөрөй башлағас, уны бикләп ҡуялар... Илсеғол халҡы был хаҡта һөйләй алмай, улар күҙҙәрен йәшерә, һәм һәр кем үҙен ғәйепле тоя. Атты ауылда ҡалдыра алмағандары өсөн улар һаман да үкенә. Ләкин заманалар шулай ине, бойороҡтар үтәлергә тейеш ине...

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Был көндәрҙә Илсеғол халҡы бер уй-хыял менән йәшәй - ауыл уртаһындағы паркта данлы яугир атҡа - Керчҡа һәйкәл ҡуйыу. Ул һәйкәл яуҙа ятып ҡалған бөтә ауылдаштарҙың, Керчтың һәм һуғыш яландарында ҡалған "Большевик" колхозы аттарының ғына түгел, ғөмүмән, бөтә Башҡорт атлы дивизияһында ҡатнашҡан яугирҙарҙың һәм аттарҙың символик образы, уларға ҡарата ихтирам һәм иҫтәлек билдәһе булыуын теләй илсеғолдар. 1985 йылда улар Керчҡа һәйкәл ҡуйыуҙы юллап, Башҡортостан Министрҙар Советына, Рәссамдар союзына хаттар яҙған була. Ул осорҙа эшләгән райком етәксеһе Хәбир Хәләф улы Мусин ҡултамғаһы менән яҙылған хатты минең үҙемә лә күрергә тура килгәйне. Скульптор Лобанов бик ҡыҙығып эшкә тотона, Илсеғолға барып, буласаҡ һәйкәл өсөн урын да ҡарап йөрөй, ләкин уйламаған бер ҡаршылыҡ килеп сыға: скульптор Керчтың һынын ауыл уртаһындағы паркта ҡалҡыу урында ҡуйырға теләй, ә унда Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан ауылдаштар исемлеге менән мәрмәр стела тора. Стеланы ситкә күсереү, һәйкәлде уртаға ҡуйыу буйынса килешә алмайҙар, имеш, һәм Лобанов ҡул һелтәп Өфөгә ҡайтып китә...**

**Быйыл, Бөйөк Еңеүҙең етмеш биш йыллығына әҙерләнгән мәлдә, Илсеғол йәштәре йәнә күтәрҙе был һорауҙы: "Әйҙәгеҙ һуң, Башҡорт атлы дивизияһының иҫән-имен илгә ҡайтарылған аты - Керчҡа һәйкәл ҡуйыйыҡ! Республика Башлығының грантын юллайыҡ, рәссам-скульптор табайыҡ һәм Керчты тағы ҡайтарайыҡ! Ат кәрәк бит беҙгә, яугир ат кәрәк! Уның ҡото беҙгә кире ҡайтырға тейеш!"**

**Миәкә районы Илсеғол ауылы Дим буйында. Ауылға яҡын ғына тау итәгенән урғылған шифалы Изге шишмә һыуын эсергә, күркәм мәсетендә намаҙ уҡырға мөмкин. Нарыҫтауҙа Алтын Урҙа дәүере батырҙары Иҙеүкәй менән Мораҙым хәтирәләрен һаҡлаған зыяратты, башҡорттарға меӊ ярым йылдар элек үк Ислам дине тәриҡәтен тараткан сәхәбәләр хөрмәтенә төҙөлгән тажлы ҡорамды күрергә төрлө яҡтан халыҡ ағыла. Башҡорт атлы дивизияһын данға күмгән аттарға, һуғыштан тыуған ергә ҡайта алған Керчь ҡушаматлы ғәзиз яугир атҡа һәйкәл дә ҡуйылһа, боронғо Илсеғол ауылы йәнә күтәрелеп ҡалыр ине - милли ғорурлыҡ булырҙай был ваҡиға беҙҙең башҡорт халҡы тарихында балҡып тора бит.**

**Сәрүәр СУРИНА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ҒҮМЕРҘӘР ЗАЯ ҮТМӘҺЕН

## 17-се идея Иғтибар: "SOS"

Барығыҙ ҙа, моғайын, фажиғәле "Титаник" тарихын беләһегеҙҙер, ләкин уның менән тығыҙ бәйле "Калифорния" тарихы хаҡында ишеткәнегеҙ бармы икән?

1912 йылда Великобритания ярҙарынан "Титаник" лайнеры Атлантик океан аша круизға сыға. "Титаник" ул ваҡытҡа төҙөлгән иң ҙур судно була. Уны бөтөнләй батмай торған судно тип ышандыралар, әммә Атлантик океандың уртаһында карап һыу аҫты айсбергына бәрелә һәм бата. 2000 пассажирҙың 1517-һе һәләк була. Әлбиттә, фажиғә халыҡ араһында асыу тыуҙыра. Килеп тыуған хәл ентекле тикшерелә һәм сәбәптәре асыҡлана: сиктән тыш юғары тиҙлек, ҡотҡарыу кәмәләренең етерлек булмауы һәм уларҙың насар йыһазландырылыуы, иң мөһиме, айсбергтар хаҡында мәғлүмәт булмауы. Шуға күрә айсбергтар буйынса Халыҡ-ара патруль төҙөлә, ҡәтғи ҡағиҙәләр индерелә. Был тикшереү әлегә тиклем бик һирәктәр белгән тағы бер фактты асыҡлай.

"Титаник" батҡанда, унан утыҙ миль алыҫлыҡта ғына "Калифорния" тигән икенсе судно юлда булған. Ул заманда радиокоммуникациялар көсһөҙ, радистар аҙ булған. Шул кисте "Калифорния"ның берҙән-бер радисы сәғәт ун беренсе яртыла рацияһын һүндереп, йоҡларға ята. Бер сәғәттән "Титаник"тан ярҙам һорап, ялбарып, эфирға сығалар, ләкин "Калифорния"ның һүндерелгән радиопередатчигы бер нәмә лә ишетмәй. Шулай итеп, "Титаник" батҡанда унан бер сәғәтлек кенә юлда булған икенсе карап, бер нәмә лә белмәй, эргәләренән үтеп китә. Минең өсөн "Титаник"тың төп фажиғәһе ошонда: ярҙам мөмкин булған, ләкин ярҙам итә алыусы был турала белмәгән!

Был беҙҙең бөтәбеҙгә лә ҙур һабаҡ. Һин тормош дингеҙе буйлап йөҙгәндә, башҡа кемдеңдер ғүмере, бәлки, ниндәйҙер айсбергка килеп бәрелеп, ярҙамға мохтаждыр. Ләкин иң әрнеткесе шул: кешеләр "SOS" йәки "Ярҙам итегеҙ, миңә ярҙам кәрәк" тип ҡысҡырмай.

Улар асыу, ситләшеү, сарказм йәки башҡа шундайыраҡ берәй төрлө асыул менән яуап бирә. Һинең менән бергә тормош дингеҙе буйлап йөҙгән башҡа кешеләрҙең "SOS"ына ҡолаҡ һалырға ваҡыт, әмәл тап. "Мин һине күрә алмайым" тигән һүҙҙәр ишетмә. "Зинһар өсөн, ярат мине. Миңә үтә лә ауыр, мин янғыҙмын" тигән ялбарып инәлеүҙе ишет. "Үҙ эшең менән бул" тип ишетмә. "Ярҙам ит миңә. Миңә һөйөү кәрәк" тип ишет. Был сәләмдәрҙе, ярҙам һорап саҡырыуҙарҙы көн һайын тиерлек ишетергә мөмкин. "Калифорния" булма. Бел, һинең тирәләй "Титаник"тар бата, һәм һин "SOS" тигәнде ишетеп, ярҙамға килә алаһың. Һинең йәшәү мәғәнәң шуға ҡайтып ҡала ла инде.

**Роберт ЭНТОНИ.**

**(Дауамы бар).**



## 20 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.10 Время покажет. [16+]
14.00 Добрый день.
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.35, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.20 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Премьера. "У нас все дома". [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Познер. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 02.40 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Зулейха открывает глаза". [16+]
22.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
01.50 Т/с "Баязет". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм, Республика!**
**7.45, 13.00, 15.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 Сәләм, Республика! [12+]**
**8.45, 11.15, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.00, 18.45 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**10.00 Открытый урок. [6+]**
**10.05, 10.45, 11.35, 12.15 "Урок для первоклассников". [0+]**
**13.15 Ете егет. [12+]**
**14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.15 Әлләсе… [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Д/с "Вся жизнь - мечта". Талха Гиниатуллин. [12+]**
**17.00 Колесо времени. [12+]**
**18.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**19.45 "Бай баҡса". [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 История одного села. [12+]**
**20.45 Дорожный патруль. [16+]**
**21.00 Наши годы. [12+]**
**22.00 Спортивная история. [12+]**
**22.45 Концерт народного артиста РБ Расуля Карабулатова. [12+]**
**1.15 Х/ф "Любовь и дружба". [12+]**
**2.45 Бәхетнамә. [12+]**
**3.30 Спектакль "Бесприданница". [12+]**
**5.30 "Наука 102". [12+]**

## 21 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 1.05 Время покажет. [16+]
14.00 Добрый день.
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.35, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.25 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Премьера. "У нас все дома". [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Право на справедливость. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, Республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 02.35 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Зулейха открывает глаза". [16+]
22.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
01.45 Т/с "Баязет". [12+]

### БСТ

**7.00, 8.00 Сәләм, Республика! [12+]**
**7.45, 13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.45, 11.15, 15.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.00, 18.45 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**10.00 Открытый урок. [6+]**
**10.05, 10.45, 11.35, 12.15 "Урок для первоклассников". [0+]**
**12.45 Дорожный патруль. [16+]**
**13.15 Ете егет. [12+]**
**14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.15 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Д/с "Вся жизнь - мечта". Талха Гиниатуллин. [12+]**
**17.00 Колесо времени. [12+]**
**18.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**19.45 "Бай". [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 История одного села. [12+]**
**20.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**21.00 Наши годы. [12+]**
**22.00 Детей много не бывает. [0+]**
**22.45 Концерт народного артиста РБ и РТ Идриса Газиева. [12+]**
**23.45 "ВасСәләм!" [16+]**
**0.15 Х/ф "Я сражаюсь с великанами". [12+]**
**2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**3.00 Спектакль "Наш одуванчик". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 "Бай баҡса". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 22 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.55 Время покажет. [16+]
14.00 Добрый день.
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.25, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.15 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Премьера. "У нас все дома". [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Премьера. "Вечерний Unplugged". [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, Республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 02.35 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Зулейха открывает глаза". [16+]
22.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
01.45 Т/с "Баязет". [12+]

### БСТ

**7.00 Сәләм, Республика! [12+]**
**7.45, 13.00, 15.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.00 Сәләм, Республика!**
**8.45, 11.15, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.00, 18.45 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**10.00 Открытый урок. [6+]**
**10.05, 10.45, 11.35, 12.15 "Урок для первоклассников". [0+]**
**12.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**13.15, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.15 "Апчхи". [0+]**
**15.30 "АйТекә!" [6+]**
**15.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Д/с "Вся жизнь - мечта". Талха Гиниатуллин. [12+]**
**17.00 Колесо времени. [12+]**
**18.00 Спортивная история. [12+]**
**19.45 Үткән ғүмер. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 История одного села. [12+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**21.00 Наши годы. [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**22.45 Концерт народного артиста РБ Фадиса Ганиева. [12+]**
**0.00 Х/ф "Невероятное путешествие мистера Спивета". [6+]**
**2.45 Спектакль "Любишь - не любишь?" [12+]**
**4.30 Автограф. [12+]**
**5.00 "Бай". [12+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 23 АПРЕЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00, 3.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10, 0.55 Время покажет. [16+]
14.00 Добрый день.
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15, 2.25, 3.05 Давай поженимся! [16+]
16.00, 3.15 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.40 Премьера. "У нас все дома". [16+]
19.40 Пусть говорят. [16+]
21.00 Время.
21.30 Т/с Премьера. "Ищейка". Новый сезон. [12+]
22.30 Премьера сезона. "Док-ток" [16+]
23.30 Вечерний Ургант. [16+]
0.10 Премьера. "Вечерний Unplugged". [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, Республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 02.40 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.20 Т/с "Зулейха открывает глаза". [16+]
22.30 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
01.50 Т/с "Баязет". [12+]

### БСТ

**7.00, 8.00 Сәләм, Республика! [12+]**
**7.45, 13.00, 15.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.45, 11.15, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.00, 18.45 Т/с "Ай ҡыҙы". [12+]**
**10.00 Открытый урок. [6+]**
**10.05, 10.45, 11.35, 12.15 "Урок для первоклассников". [0+]**
**13.15, 1.45 Бәхетнамә. [12+]**
**14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу. [12+]**
**15.15 Бирешмә. Профи. [6+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Д/с "Вся жизнь - мечта". Талха Гиниатуллин. [12+]**
**17.00 Колесо времени. [12+]**
**17.45 "Честно говоря". [12+]**
**19.45 Автограф. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 История одного села. [12+]**
**20.45 "Криминальный спектр". [16+]**
**21.00 Наши годы. [12+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**22.45 Концерт народного артиста РБ Вильдана Яруллина. [12+]**
**0.15 Х/ф "Ключи от неба". [12+]**
**2.30 Спектакль "Нэркэс". [12+]**
**5.00 Башҡорттар. [6+]**
**5.30 Счастливый час. [12+]**

## 24 АПРЕЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 9.05 Телеканал "Доброе утро".
9.00, 12.00 Новости.
9.50 Модный приговор. [6+]
10.50 Жить здорово! [16+]
12.10 Время покажет. [16+]
14.00 Добрый день.
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 Давай поженимся! [16+]
16.00, 5.05 Мужское / Женское. [16+]
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.45 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым. [16+]
19.40 Поле чудес. [16+]
21.00 Время.
21.30 "Сегодня вечером". [16+]
23.30 "Голос. Дети". Новый сезон. Финал.
1.40 Вечерний Ургант. [16+]
2.30 Премьера. "Вечерний Unplugged". [16+]
3.15 Х/ф "Пряности и страсти". [12+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России.
9.00, 14.30, 20.45 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, Республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.30 Судьба человека с Борисом Корчевниковым. [12+]
12.40, 17.15 "60 минут". [12+]
14.50, 02.20 Т/с "Тайны следствия-18". [12+]
18.30 Андрей Малахов. Прямой эфир. [16+]
21.00 "Дом культуры и смеха". [16+]
22.45 "100ЯНОВ". [12+]
23.45 Х/ф "Сваты". [12+]

### БСТ

**7.00, 8.00 Сәләм, Республика! [12+]**
**7.45, 13.30, 15.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.45, 11.15, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**9.00 Д/с "Ограниченный суверенитет". [16+]**
**10.00 Открытый урок. [6+]**
**10.05, 10.45, 11.35, 12.15 "Урок для первоклассников". [0+]**
**12.55 "Урок для первоклассников". [6+]**
**14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**16.15 "Гора новостей".**
**16.30 Д/с "Вся жизнь - мечта". Талха Гиниатуллин". [12+]**
**17.00 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**17.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**18.00 "Йома". [0+]**
**18.45 "Башҡорт йыры-2020". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**19.30 Д/с "Тайны разведки". [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 История одного села. [12+]**
**20.45 Земляки. [12+]**
**21.00 Башҡорттар. [6+]**
**22.00 "ВасСәләм!" [16+]**
**22.45 Уфа. Живое. [12+]**
**23.30 Концерт Бибисары Азаматовой. [12+]**
**1.00 Х/ф "Ближе, чем кажется". [6+]**
**3.00 Спектакль "Весело живем". [12+]**
**4.45 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**5.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**5.30 "Наука 102". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

## 25 АПРЕЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

6.00 Телеканал "Доброе утро. Суббота".
9.00 Умницы и умники. [12+]
9.45 Слово пастыря. [0+]
10.00 Новости.
10.05 Д/ф "Михаил Кононов. Против всех". [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
13.35 Х/ф Премьера. "Жди меня". [12+]
17.40 Сегодня вечером. [16+]
21.00 Время.
21.20 "Голос. Дети". Новый сезон. Финал. [0+]
23.25 Большая игра. [16+]
0.35 Х/ф "Последняя любовь на Земле". [18+]
2.10 Мужское / Женское. [16+]
3.40 Наедине со всеми. [16+]

### РОССИЯ 1

05.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
08.20 Местное время. Суббота.
08.35 По секрету всему свету.
09.25 Пятеро на одного.
10.15 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 Смеяться разрешается.
13.50 Х/ф "Ошибка молодости". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
20.00 Вести в субботу.
20.40 Х/ф "Я подарю тебе рассвет". [12+]
01.15 Х/ф "Любовь как несчастный случай". [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**9.15 Күстәнәс. [12+]**
**9.45 "Сыйырсыҡ". [0+]**
**10.00 "Физра". [6+]**
**10.15 Преград. Net. [6+]**
**10.30 "Книга сказок". [0+]**
**10.45 История одного села. [12+]**
**10.55 Тотальный диктант. Башкирский язык.**
**13.00 Үткән ғүмер. [12+]**
**13.30 Хазина о хазине. [0+]**
**14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.00 "Дарю песню". [12+]**
**17.00 Концерт народной артистки РБ Альфии Юлчуриной. [12+]**
**18.00 100 имен Башкортостана. [12+]**
**18.45 Вопрос+Ответ=Портрет. [6+]**
**19.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**20.00 Ради добра. [6+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.30 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз.).**
**22.00 Караоке по-башкирски. [12+]**
**22.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**23.00 "БГФ: Роман на 80 лет". Юбилейный Гала-концерт БГФ им.Х.Ахметова. [12+]**
**1.45 Итоги недели (на баш. яз.).**
**2.15 Х/ф "Без вины виноватые". [0+]**
**4.00 Спектакль "Море мечты". [12+]**
**6.00 Историческая среда. [12+]**

## 26 АПРЕЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

5.00, 6.10 Т/с "Ангел-хранитель". [16+]
6.00, 10.00 Новости.
7.00 Играй, гармонь любимая! [12+]
7.45 Часовой. [12+]
8.15 Здоровье. [16+]
9.20 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым. [12+]
10.10 Жизнь других. [12+]
11.15, 12.15 Видели видео? [6+]
12.00 Новости (с субтитрами).
14.00 Х/ф "Небесный тихоход". Кино в цвете. [0+]
15.35 Д/с "Теория заговора". [16+]
16.40 Премьера. "Голос". Большой концерт. [12+]
19.25 "Лучше всех!" Новый сезон. [0+]
21.00 Время.
22.00 Премьера. "Док-ток". "COVID-19. Битва при Ухане". [16+]
0.00 "Что? Где? Когда?" Весенняя серия игр. Финал. [16+]
1.10 Премьера. "Вечерний Unplugged". [16+]
2.00 Наедине со всеми. [16+]
3.25 Мужское / Женское. [16+]

### РОССИЯ 1

04.30, 01.30 Х/ф "Другой берег". [12+]
06.15, 03.20 Х/ф "Напрасная жертва". [12+]
08.00 Местное время. Воскресенье.
08.35 Устами младенца.
09.20 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
10.10 Сто к одному.
11.00 Вести.
11.15 "Тест". Всероссийский потребительский проект. [12+]
12.20 Шоу Елены Степаненко. [12+]
13.25 Х/ф "Галина". [12+]
17.30 "Танцы со Звёздами". Новый сезон. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]

### БСТ

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз.).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 Күстәнәс. [12+]**
**9.45 М/ф "Мультфильмы". [0+]**
**10.00 "Бейе". [0+]**
**10.15 "АйТекә!" [6+]**
**10.30 "Сулпылар". [0+]**
**11.00 "Гора новостей". [6+]**
**11.15 "Ал да гөл". [6+]**
**11.30 "Ҡош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Бирешмә. Профи. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз.).**
**13.00 "Йөрәк һүҙе". [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 Брифинг Министерства здравоохранения РБ по коронавирусу.**
**15.00 "Башҡорт йыры". [12+]**
**16.00 "Дорога к храму". [0+]**
**16.30, 6.00 Историческая среда. [12+]**
**17.00 "Бал джигитов". Финал проекта. [12+]**
**18.45 Башҡорттар. [6+]**
**19.15 Лидеры региона. [12+]**
**19.45 Әлләсе… [6+]**
**20.30 Теге өсәү. [12+]**
**21.00, 22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30, 6.30 Итоги недели (на рус. яз.).**
**22.30 "Красная кнопка". [16+]**
**23.15 "Байыҡ-2020". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.15 Х/ф "Король бельгийцев". [16+]**
**2.00 Спектакль "Часы с кукушкой". [12+]**
**4.00 Х/ф "Король бельгийцев". [12+]**
**5.30 "Млечный путь". [12+]**

✓ *Бай балаһы ун бишкә еткәс баш, ярлы балаһы утыҙға еткәс тә йәш.*
*(Башҡорт халыҡ мәҡәле).*



БАШ ЭШЛӘТМӘК

# ЕР ШАРЫНЫҢ ИҢ-ИҢДӘРЕ




Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.

**15-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Гагарин. Туғыҙ. Тараҡан. Ҡаҙы. Ләйсән. Солтанов. Ҡорт. Аң. Байрам. Орсоҡ. Ҡаҙан. Турһыҡ. Тәнҡитсе. Ҡаптырма. Каса. Өлөш. Үгәй. Трио. Илдә. Нужа.

**Вертикаль буйынса:** Соловьев. Ҡалтасы. Ыҡ. Ҡотоп. Тырнаҡ. Тәүфиҡ. Ҡан. Гитара. Ваба. Мөйтән. Ҡаҙна. Трал. Наҙанлыҡ. Терешкова. Йүгән. Сатыр. Ноҡом. Ҡама.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1441 һижри йыл.*

| Апрель (Шәғбан - Рамаҙан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 20 (27) дүшәмбе | 4:33 | 6:03 | 13:30 | 18:58 | 20:28 | 21:58 |
| 21 (28) шишәмбе | 4:31 | 6:01 | 13:30 | 19:00 | 20:30 | 22:00 |
| 22 (29) шаршамбы | 4:28 | 5:58 | 13:30 | 19:02 | 20:32 | 22:02 |
| 23 (30) кесе йома | 4:26 | 5:56 | 13:30 | 19:04 | 20:34 | 22:04 |
| 24 (1) йома | 4:24 | 5:54 | 13:30 | 19:05 | 20:35 | 22:05 |
| 25 (2) шәмбе | 4:21 | 5:51 | 13:30 | 19:07 | 20:37 | 22:07 |
| 26 (3) йәкшәмбе | 4:19 | 5:49 | 13:30 | 19:09 | 20:39 | 22:09 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ҮӘТ, ШУЛАЙ!*

# КҮҘӘТӘЛӘР...



**Башҡортостанда 27 муниципаль берәмектең авария хәүефе булған урындарында, ғәмәлдәге 380 комплексҡа өҫтәп, 115 юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙоуҙы фотовидеотеркәү комплексы урынлаштырылды.**

Дәүләт контрактына ярашлы, "Башинформсвязь" йәмғиәте республиканың 62 муниципаль берәмегендә авария хәүефе булған урындарҙа 609 камера урынлаштыра. Әле республикала 495 комплекс эшләй. Ҡалған 114 комплексты 2020 йылдың 1 майына тиклем файҙаланыуға тапшырыу планлаштырыла. Камералар ҡуйылған урындар менән Башҡортостан Республикаһының Транспорт һәм юл хужалығы буйынса дәүләт комитеты сайтында танышырға мөмкин.

СӘНҒӘТ. ӘҘӘБИӘТ

# СИБАЙҘАР...

**Сибай концерт-театр берләшмәһендә үҙизоляция шарттарында бер нисә интернет-проект старт алды. "Сулпан" балалар театры артистары Башҡорт теле йылына һәм башҡорт әҙәбиәте классигы Шәйехзада Бабичтың тыуыуына 125 йыл тулыуға арналған шиғри эстафета башлап ебәрҙе.**

Филармония артистары Еңеүҙең 75 йыллығына бағышланған видеороликтарҙа һуғыш тураһында шиғырҙар һөйләй. Көн һайын киске сәғәт 10-да Инстаграмда Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ринат Ғайсин Сибай концерт-театр берләшмәһе артистары һәм саҡырылған ҡунаҡтар менән тура эфирҙа әңгәмә ҡора. Эфирҙан һуң ток-шоуҙы "Бәйләнештә" һәм Инстаграмда ҡарарға мөмкин. Шулай уҡ учреждениеның рәсми төркөмөндә онлайн режимында "Сулпан" балалар театрының архив спектаклдәрен һәм филармония концерттарын күрһәтеү дауам итә.

# ФИЛАРМОНИЯ...

**Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы артистары өйҙән "Ә һин йәшә!" йырына клип төшөргән. Клип коронавирус инфекцияһы пандемияһына бәйле үҙизоляция шарттарында төшөрөлгән һәм монтажланған.**

Клипты яҙҙырыуҙа филармонияның 21 солисы ҡатнашҡан. Ролик идеяһы авторы - эстраданың художество етәксеһе Сулпан Асҡарова, һүҙҙәр авторы - Миңзәлә Яхина, музыка авторы - Гүзәл Сиражетдинова, мастеринг - Илшат Яхин һәм Эдуард Исламов, монтаж режиссеры - Илнур Хәкимов.

"Беҙҙең ҙур концерт ғаиләһенең һәр ағзаһы өй шарттарында репертуар өҫтөндә эшләүен дауам итә, онлайн-репетициялар ойоштора, яңы йырҙар яҙа, композициялар өйрәнә... Ижад кешеһе өсөн ошондай ябай булмаған шарттарҙа ла яңы проект тыуҙы, - тип әйттеләр филармонияла. - Клипта ҡатнашыусылар ошо ваҡыт эсендә бер тапҡыр ҙа осрашманы! Йырҙың исеме үк әйтеп тора: "Ә һин йәшә!" Тормош ауырлыҡтарына ҡарамаҫтан, беҙ йәшәргә тейеш!"

# ЕТЕНСЕ ТОМЫ...

**Зәйнәб Биишева исемендәге Башҡортостан "Китап" нәшриәтендә башҡорт телендә "Башҡорт әҙәбиәте тарихы"ның етенсе томы донъя күрҙе. Ул билдәле башҡорт ғалимы һәм әҙәбиәтсеһе, академик Ғайса Хөсәйенов етәкселегендә әҙерләнгән һәм 1990-1996 йылдарҙа алты томда сыҡҡан баҫманың дауамы булып тора.**

Тәүге ике том боронғо замандарҙан алып 1917 йылға тиклем башҡорт әҙәбиәтен анализлай; артабанғы томдар совет осорона бағышланған. Алтынсы томда XX быуаттың 90-сы йылдарының беренсе яртыһындағы постсовет башҡорт әҙәбиәтенә күҙәтеү яһала. "Башҡорт әҙәбиәте тарихы"-ның етенсе томы заманса башҡорт әҙәбиәтен анализлауға арналған. Ул XX быуаттың 90-сы йылдарынан бөгөнгө көнгә тиклемге осорҙо үҙ эсенә ала. Китапта шиғриәт, проза, драматургия, балалар әҙәбиәте, әҙәбиәт ғилеме һәм әҙәби тәнҡит тураһында күҙәтеү мәҡәләләре тупланған. Нәжиб Асанбаев, Шакир Янбаев, Талха Ғиниәтуллин, Әнғәм Атнабаев, Рәшит Шәкүр, Ҡәҙим Аралбай, Таңсулпан Ғарипова, Факиһа Туғыҙбаева, Тамара Ғәниева, Әмир Әминев һәм башҡа башҡорт яҙыусыларының тормошо, ижады хаҡында айырым мәҡәләләр индерелгән. Томда 1995-2015 йылдарҙы үҙ эсенә алған әҙәби тормош йылъяҙмаһы ла бар. Баш мөхәррир һәм инеш һүҙ авторы - филология фәндәре докторы Миңлеғәли Нәҙерғолов. Редколлегияла Рауил Бикбаев, Айбулат Псәнчин, Ғайса Хөсәйенов, Гөлнара Абдрафиҡова бар. Китап уҡытыусылар, студенттар, шулай уҡ башҡорт әҙәбиәте менән ҡыҙыҡһынған уҡыусылар өсөн тәғәйенләнгән. Йыйынтыҡты "Китап" нәшриәтенең фирма магазинында һатып алырға мөмкин.

КӨЛКӨФӨ

**Һөйләшебеҙҙә беҙ мотлаҡ урыҫ һүҙҙәре ҡушып ебәрәбеҙ. Был хәл, әлбиттә, һөйләшеү телмәрен күпкә боҙа. Ҡолаҡҡа ятышһыҙ булып ишетелә. Минең бер "урыҫ знакум" беҙҙең лөғәттәге ошо ҡолаҡҡа ятышһыҙ хәлде бик үҙенсәлекле итеп ҡулланып шаярта. Бына, тыңлағыҙ әле.**



# УРЫҪ ЗНАКУМ ҺӨЙЛӘЙ...

## Күптә-ә-ә-ән ненавижу и хожу!

Баҙар. Халыҡ күп. Кемдер тауарын маҡтай-маҡтай һата. Һатып алыусылар дыу килеп һатыулаша. Ҡыҫҡаһы, баҙар гөж килә. Бына бер мәл "урыҫ знакум" ҡоласын йәйеп берәүҙе ҡосаҡлап ала.

- Һау ғынамы, ҡоҙа! Хәлдәрең нисек!

Тегенеһе эскерһеҙ ихласлыҡ менән әйтелгән был һүҙҙәргә майҙай иреп китә.

- Хәлдәр Аллаға шөкөр, ҡоҙа! Барыһы ла имен-аман!

Осрашыу шатлығынан бер аҙ һыуына төшкәс, "урыҫ знакум" һүҙен дауам итә.

- Һине күреүемә бик шатмын, әй! Мин бит һине күптә-ә-ә-ән ненавижу и хожу!

Былдай шаяртыуҙы аңлағандар көләп ҡуйыр. Һәм йәнле һөйләшеү ары дауам итер. Аңламағаны... Ә быना уға аңлатырға тура килә инде. "Урыҫ знакум": "Мин бит һине күптә-ә-ә-ән күрә алмай йөрөй инем", - тип әйтте.

## Әҙ генә собака!

Бура бурайҙар. Эш һәүетемсә генә бара. Ағасты тегеләй-былай шылдырып, уның килешле урынын самалайҙар. "Урыҫ знакум" өйрәтеп тора.

- Ҡустым, һин әҙ генә собака. Ай, әттәгенәһе! Мин һиңә улай уҡ собака тимәнем дә инде. Үтә китте ағасың. Хәҙер кирегә әҙ генә собака.

Һиҙгәнһегеҙҙер, "урыҫ знакум", бүрәнәне тегеләй эт, былай эт, тип өйрәтеп тора.

## Стреляй тотторманы!

- Нишләп урманға барманың?

- Стреляй тотторманы.

- Тағы ниндәй стреляй тотторманы!

- Белмәйем инде. Әллә берәй нәмәнән өрккән, әллә ҡурҡҡан. Кәртә буйлап сабып тик йөрөй. Саҡ типмәне үҙемә. Бер ҙә улайтҡаны юҡ ине...

Ошо мәлдә генә һүҙҙең ат тураһында барғанын аңлап ҡалаһың.

## Человек умирал!

"Урыҫ знакум"дың берәүгә урман юлын өйрәткәнен тыңлап торам әле.

- Ауылдан сыҡҡас, һырттан китәһең. Бер аҙ бара биргәс, йылға үҙәгенә барып төшәһең. Күп тә бармайһың, элеккe утар урынына барып етәһең. Утарҙы һулға тартып сығып кит. Һулға тартып ҡуйма, унда человек умирал. Абайлап ҡараһаң, моғайын, аңғарырһың. Ҡайһы бер урында ҡоламаған бағаналары әле лә бар...

Барыһыла аңлашыла кеүек. Человек умирал, тигәне генә бер аҙ аптырауға һала.

- Ә унда ниндәй кеше үлеп ята?

- Кем белә инде уны. Берәү генә түгел, апаруҡ мәрхүмдәр яталыр инде унда. Урындары йәннәттә булһын. Заманына күрә утар ҙур ғына булған бит...

Ошо мәлдә генә һүҙҙең зыярат тураһында барғанын аңғара төшәһең.

**Әғләм ШӘРИПОВ.**

ФӘҺЕМЛЕ ҺҮҘ

# ҒҮМЕР БЕР ГЕНӘ



**Йәшәлгән йылдарымды иҫәпләп сыҡтым да, ҡапыл ҙур асыш яһағандай тетрәнеп ҡуйҙым: ҡалған ғүмерем йәшәлгән йылдарымдан аҙыраҡ ҡалған икән дәһә. Бәй, ашығырға кәрәк! Йәшәргә ашығырға! Йәнем дә тертләне, атлыға, ашыҡтыра башланы.**

Үҙемде әле бер ҡап кәнфит отҡан бала кеүек хис итәм: ғәҙәттә, тәүге тәмлекәстәрҙе уйлап-нитеп тормай ашай башлайһың да, бик әҙ ҡалғас, уларҙы ысынлап та тәмен тойоп, ләззәтләнеп ашарға тотонаһың бит. Ошондай хәлдә хәҙер мин. Һәр көнөмдөң ҡәҙерен белергә, һәр көнөмдө ләззәтле, мәғәнәле үткәрергә тейешмен, тигән ҡағиҙәгә күстем.

Минең һәр төрлө устав, закон, процедуралар һәм эске ҡағиҙәләргә арналған бөткөһөҙ конференциялар өсөн ваҡытым юҡ, уларҙың барыбер тормошҡа аша торғаны ла юҡ.

Үҙҙәрен йәшенә ярашлы тоя белмәгән кешеләрҙе тәрбиәләргә лә, улар менән көрәшкә лә ваҡытым юҡ.

Кемдеңдер үҙен күрһәтергә тырышҡан йыйылыштарҙа ла ҡатнашҡым килмәй.

Һәләтлеләрҙең ҡараштарын, талантын һәм ҡаҙаныштарын үҙләштереү маҡсатында уларҙы яман күрһәтеп, абруйҙарын ҡаҡшатыусы көнсөлдәрҙе иғтибарымдан мәхрүм итеү - үҙе үк улар өсөн үлемесле хөкөм.

Яңғырауыҡлы мәҡәлә баштарын тикшереп ултырмайым: ваҡытым бик әҙ ҡалды, йәнем ҡабалана: ҡабында кәнфиттәрем бик әҙ ҡалып бара.

Бик кешелекле кешеләр менән йәшәргә ынтылам. Үҙ хаталарынан көлә белгән, ниндәйҙер уңыштарға өлгәшә алған кешеләр менән. Үҙенең тәғәйенләнешен аңлаған һәм үҙ бурыстарынан йәшенмәгән кешеләр менән. Кешелек дәрәжәһен һаҡлаусы һәм фәҡәт хәҡиҡәт, ғәҙеллек, дөрөҫлөк яғында булғандар менән. Былар тап тормошто лайыҡлы итә алыусы сифаттар бит.

Минең үҙемде кеше йөрәгенә юл таба белгәндәр менән уратып алғым килә.

Тормоштоң ауыр һынауҙары аша үҫергә өйрәнгән һәм башҡалар күңеленә наҙлы хистәрен һаҡлап ҡала алған кешеләрҙе юлдашым иткем килә.

Эйе, мин ашығам, файҙалы тиҙлек менән йәшәргә ашығам, ә быға рухи өлгөргәнлек кенә ярҙам итәсәк. Рухи яҡтан өлгөргәнлеккә өлгәшеү ниәтем.

Һауытында ҡалған кәнфиттәрҙең береһен дә бушҡа исрафлағым килмәй, сөнки мин беләм: улар элек ашалғандарына ҡарағанда тәмлерәк.

Маҡсатым - ғүмерем ахырына үҙ-үҙем, яҡындарым һәм намыҫым менән килешеү нигеҙендә барып етергә.

Кемгәлер, бәлки, ғүмер икәү булып тойола торғандыр, ләкин ҡапыл бер заман шул асыҡлана: ғүмер берҙән-бер генә.

**Билдәһеҙ автор.**

ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# БИШ БЕШЕРЕМ БУЛҒАН...

**Гәзитебеҙҙәге "Әсәйем лөғәте" рубрикаһындағы һүҙҙәрҙе бик ҡыҙыҡһынып уҡыйым. Телебеҙ, фекер байлығы бит улар. Үҙем дә хәтерҙә һаҡланып, тел осонда йөрөгән бер нисә лөғәтте яҙып ебәрергә булдым әле.**

**Ике ҡанат,бер ҡойроҡ** - саҡырыуҙы ҡыуанып ҡабул итеү, ҡош кеүек осорға әҙер булыу.

**Ауылсы ҡара ҡолаҡ** - ауылсылап йөрөүсе ғәйбәтте күп ишетә, ҡолағы ғәйбәт менән бысранып ҡайта.

**Ҡыҙыл яланғас ҡалған** - ниндәйҙер хәлдән бер нәмәһеҙ тороп ҡалған.

**Табан тайҙырмау** - тыуған еренән, торған еренән ситкә китмәүҙе аңлата.

**Әғәлгә килеү** - артыҡ көс түгеп арыу, йә артығын ашап хәле бөткән, әғәлгә килгәнсе ашаған.

**Биш бешерем** - ауыҙы биш бешерем булған, үпкәләп турһайған.

**Салауат күпере** - беҙ бала саҡта йәйғорҙо шулай тип әйтә инек.

**Мәрзиә СОЛТАНБАЕВА.**
**Учалы ҡалаһы.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ИЛАЙ-ИЛАЙ ЯҘ БУЛА,

## Көлә-көлә көҙ була

Барған саҡта алға сыға алмаһа ла,
Алған саҡта алға сыға әләм-һәләм.

**(Рәшит Шәкүр).**

Бай балаһы ун бишкә еткәс баш,
Ярлы балаһы утыҙға еткәс тә йәш.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Яҡшы хәтерле үҙ һүҙле кешенән дә ҡурҡынысырағы юҡ.

**(Карлос Монсивес).**

Белем - бәхеттә биҙәк, ә бәхетһеҙлектә ҡасыу урыны.

**(Марсель Пруст).**

Өмөт менән йәшәргә өйрәнгәндәр бәхетле булып үлә.

**(Ҡытай халыҡ мәҡәле).**

Кемгәлер ирек бирһәң, ул һәр кемдең ауыҙын тыя башлаясаҡ.

**Б. Крутиер.**

Һәр төрлө өҫтөнлөктәр - ул азатлыҡ һәм ғәҙеллектең ҡәбере.

**И. Зейме.**

Үҙеңә ҙур ҡәнәғәтләнеү биргән эште эшләйһең икән, тимәк, һин - азат.

**(Вольтер).**

Донъяла бик күп мөғжизәләр бар, әммә кешенең үҙенән дә ҙурыраҡ мөғжизә юҡ.

**(Софокл).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ауылда бер ҡарт йәшәгән. Ул донъя йөҙөндәге иң бәхетһеҙ кешемен, тип иҫәпләгән үҙен. Бар ауыл биҙрәгән унан: ул һәр ваҡыт кәйефһеҙ, ҡараңғы, ҡәнәғәтһеҙ йөҙ менән йөрөгән. Туҡтауһыҙ зарланған. Ҡартая барған һайын уның был холҡо тағы ла яманыраҡҡа, түҙеп тормаҫлыҡҡа, ауыҙынан сыҡҡан һәр һүҙе ағыулыраҡҡа әйләнгән. Кешеләр уны әллә ҡайҙан урап үткән, ҡасырға тырышҡан: бәхетһеҙлек тиҙ йоғоусан бит. Бәхетһеҙ кеше эргәһендә бәхетле булып баҫып тороу уңайһыҙ ҙа тойолған.**

**Әммә бер ваҡыт, һикһән йәше тулғас, ҡарт үҙгәргән дә ҡуйған: ул бер нигә лә зарланмай, йылмая, йөҙө нур сәсә, шул тиклем бәхетле ти үҙе. Был хәбәр тиҙ генә ауыл буйлап таралған һәм ауылдаштары ҡарттың йорто янына йыйылған.**

**- Һиңә ни булды? - тип һораған улар ҡарттан.**

**- Бер ни ҙә булманы, - тип яуаплаған ҡарт. - Мин һикһән йыл буйы бәхетле булырға тырыштым, әммә бер ни ҙә килеп сыҡманы. Хәҙер мин тырышмайым, бәхеттән башҡа йәшәп ҡарарға уйланым. Шуға ла мин бәхетлемен..."**


1582218911006

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.

Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Вәлиәхмәт БӘҘРЕТДИНОВ,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Хәбәрселәр** 252-39-99, 246-03-24
**Матбуғат таратыу** 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
17 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3600
Заказ - 316/04